✓ИҒТИБАР! Сентябргә тиклем 2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу бара. Йәғни ошо осорҙа гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле

15 - 21 АВГУСТ (УРАҠАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№33 (347)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Илебеҙгә шәхестәр кәрәк,**




4

**Йөрәктә ныҡығынған ышаныу...**




6

**"Пи-пип" ҡасан башлана,**

әсә ҡарынындамы, әллә донъяға тыуғасмы?



8-9

**Аллергия**



12

**ТВ программа**

14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәғариф учреждениелары селтәрен оптималләштереү маҡсатында бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәрҙең ябылыуы менән килешеп буламы?

*Рөмил АҘНАБАЕВ, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты рәйесе:*

Был мәсьәлә бөйынса әле яңы ғына уҙған республика кәңәшмәһендә Президентыбыҙ М. Ғ. Рәхимов үҙ фекерен бик ҡәтғи белдерҙе: әле эшләп килгән бер башланғыс мәктәптең дә ябылыуына юл ҡуймаҫҡа. Һәм был бик дөрөҫ: мәктәп ябылһа, ауыл да бөтәсәк. Бер үк тырмаға икенсе тапҡыр баҫыу кемгә кәрәк? Совет дәүерендә күпме ауылды "перспективаһыҙ"ға әйләндерҙек!

Башҡорт халҡы элекке заманда уҡ иркенлектә йәшәргә күнеккәнлектән, ауылдарыбыҙ ваҡ булған. Шуға күрә беҙҙә күбеһенсә тулы булмаған урта һәм башланғыс мәктәптәр эшләп килде. Уларҙы яба башлаһаҡ, ауыл халҡы нисек тә булһа ҡалаға китергә тырышасаҡ. Белә-күрә тороп, ошо бәләкәй ауылдарыбыҙҙан ваз кисәйекме ни? Был мәсьәләне хәл иткәндә аҡса юҡлыҡҡа һылтаныу һис дөрөҫ түгел. Аслыҡ-яланғаслыҡ йылдарында ла мәктәптәр ябылманы, сөнки етәкселәр халыҡтың, илдең киләсәге тураһында ҡайғыртты. Урындағы хакимиәт етәкселәре мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн мөмкин булған барса сараларҙы файҙаланырға тейеш. Бәләкәй милләт вәкилдәренең күпләп ҡалаға китеүе арҡаһында уларҙың теле, мәҙәниәте һәм тарихы зур юғалтыуҙарға дусар булыуын да онотмаһаҡ ине.

Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ауылдарыбыҙҙы нисек кенә булһа ла һаҡлап ҡалыуҙы үҙенең төп бурыстарының береһе тип һанай. Беҙгә бәләкәй ауылдарҙан мәктәптәрен яптырмау үтенестәре теркәлгән хатмөрәжәғәттәр килеп тора, шул юҫыҡта ярҙам өмөт итеп килеүселәр ҙә етерлек. Ҡоролтай ауылдарыбыҙ киләсәге өсөн көрәш юлынан тайпылмаясаҡ.

*Юлай САДЫҠОВ, Бөрйән районы хакимиәтенең мәғариф бүлеге мөдире:*

Районыбыҙҙы оптималләштереү процесы ситләп уҙманы, бынан ике йыл элек үк 8 бәләкәй ауыл мәктәбен һаҡлап ҡалыу тураһында ҡайғырта башланыҡ. Беҙ ошо бәләкәй комплектлы мәктәптәрҙе база мәктәбенең филиалы итеп үҙгәртеү юлын һайламаныҡ, сөнки мәктәптең юридик берәмек булып ҡалыуы уға ныҡлы нигеҙ булып тора. Уйлаһаң, тырышһаң, кәңәш итһәң, иң ҡыйын хәлдәрҙән дә сығыу юлын табып була. Беҙ Мәскәү талап иткәнгә мөкиббән китеп яраҡлашырға тырышмайбыҙ, беҙҙең йәшәү шарттарыбыҙ ҙа башҡаса бит. Беҙҙә бер генә артыҡ уҡытыусы ла, кәрәге булмаған бер генә артыҡ мәктәп хеҙмәткәре лә юҡ. Шуның өсөн әле ҡулланылмаған эске резервтарыбыҙҙы барлайбыҙ. Бына, мәҫәлән, Кейекбай ауылында башланғыс мәктәпкә балалар баҡсаһын ҡушып, мәктәпкәсә йәштәге 20 баланы ошо мәғариф учреждениеһына йәлеп итә алдыҡ. Шулай уҡ Ҡотан ауылында ла ошондай уҡ башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы ойошторҙоҡ. Бер үк ваҡытта мәктәпте лә һаҡлап алып ҡалдыҡ, балаларҙы мәктәпкә әҙерләү мәсьәләһен дә хәл иттек. Ике ауыл араһы 4-5 саҡрымдан уҙмаған осраҡта өлкән синыф уҡыусылары база мәктәбенә йөрөп уҡыясаҡ. Ғөмүмән, район хакимиәте был юҫыҡта бик уйлап, халыҡ менән кәңәшләшеп эш итә, һәм беҙ киләсәктә лә районыбыҙҙа бер мәктәпте лә япмаясаҡбыҙ.

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**▸ Мәғариф системаһында барса реформаларҙың төптән уйланылған булыуы мотлаҡ. Дәүләт сәйәсәтенең был өлкәһендә ашығыс ҡабул ителгән ҡарарҙар бигерәк йыш осрай башланы. Мәҫәлән, белем биреү учреждениеларын ҡулайлаштырыу сиктәрендә ауыл мәктәптәренең ҡыҫҡартылыу күләме борсолоу, хатта хәүеф уята. Бында бар саралар ҙа ентекләп уйланылған булырға тейеш. Һәр учреждение артында кеше яҙмыштары, балалар, педагогтар яҙмышы, һуңғы сиктә, беҙҙең ауылдарыбыҙҙың киләсәге тора. Һәм был турала онотторға ярамай!**

**Мортаза РӘХИМОВ,**
**Башҡортостан Республикаһы Президенты.**

ИШАРА

# "ҠУЛАЙЛАШТЫРЫУ" КЕМГӘ ҠУЛАЙ,

## йәки 467 "перспективаһыҙ" ауыл мәктәбе ябылырмы?



Август кәңәшмәһендә.

**Беҙ, ҡала мөхитенә яраҡлашып китеп, үҙ ояларын шунда ҡороп йәшәп киткән элекке ауыл кешеләре, тыуып үҫкән ерҙәребеҙҙе онота алмайбыҙ. Әйе, беҙҙең күңел түрҙәребеҙҙә бала сағыбыҙҙа, йәшлегебеҙҙә гөрләп торған ауыл образы бер саҡта ла тоноҡланмаҫ кеүек. Шуғалыр ҙа инде, һәр йыл һайын сираттағы хеҙмәт ялы мөҙҙәте етеү менән күптәребеҙ тыуған ауылдарына юл тота. Мөһабәт тауҙар, гөл-сәскәле туғайҙар, сылтырап аҡҡан шишмә-йылғалар элеккесә ҡаршылап тора ҡала ҡунаҡтарын. Тик ҡайтҡан һайын бер генә нәмә күңелде ҡырып тора: ауылдарыбыҙ кесерәйеп, етемһерәп ҡалған кеүек.**

Бына мин киске әңерҙә бала саҡ эҙҙәрен һаҡлаған тыуған ауылым урамынан атлайым. Ҡапҡалары ҡыйшайған ярым емерек йорт-ҡуралар йәнгә шом һала, күптән кеше йәшәмәгән өйҙәрҙең быялалары ватылып төшкән буш тәҙрәләре уткән бер кешегә өңрәйеп баға... Ни эшләп шулай килеп сыҡты һуң, ни өсөн ауылым тап бөгөн, цивилизация сәскә атҡан осорҙа бөлгөнлөккә төшкән? Ни өсөн типһә тимер өҙәрҙәй егеттәр, ауылда гөрләтеп тормош ҡороп, бала табып бағыр ҡыҙҙар сит-ят ерҙәрҙә үҙ итә хәҙер? 1917 йылда Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе 2-се Әйле олоҫоноң Иҙрис ауылында 500-ләп кеше теркәлгән булһа, бөгөн шуның яртыһы ла юҡ. Быға кем ғәйепле: заманабыҙ ҡанундары шулаймы, шул аяуһыҙ ҡанундарға һылтанған урындағы етәкселәрме, әллә үҙебеҙме? Һораужар, һораужар...

(Дауамы 2-се биттә).

ИШАРА

# "ҠУЛАЙЛАШТЫРЫУ" КЕМГӘ ҠУЛАЙ,

## йәки 467 "перспективаһыҙ" ауыл мәктәбе ябылырмы?

(Башы 1-се биттә).

Ҡыҙғаныҫка ҡаршы, бөтөүгә дусар ителгән ауылдар республикабыҙҙа аҙ түгел. Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында "перспективаһыҙ" мөһөрө баҫылып, юҡҡа сығарылған йөҙәрләгән башҡорт ауылдары яҙмышы беҙгә әсе һабаҡ булманымы икән? Юҡтыр, күрәһең, юғиһә, беҙҙең ҡайһы бер етәкселәребеҙ ошо ауыр мәсьәләне еңел генә ысул менән аҙағынаса хәл итергә әҙер тормаҫ ине. Булмаҫ, тимәгеҙ, дөрөҫө шул булғас. Быны үҙебеҙҙең Мәғариф министрлығы ла шул юлды һайлағанға оҡшай. Белем биреү системаһын оптималләштереү, йәғни "ҡулайлаштырыу тип аталған яңғырауыҡлы программа тап шуны талап итә лә инде: яҡын киләсәктә Башҡортостанда 467, йәғни һәр бишенсе мәктәптең ябылыуы күҙаллана. Был иҫ китерлек күрһәткесте мин башымдан алып әйтмәйем, ул Мәғариф министрлығының пландарында булып, бар йәмәғәтселек иғтибарына еткерелде лә инде.

Ошо үгәйһетелгән 467 ауылдың күпселеген бәләкәй башҡорт ауылдары тәшкил итеүен һиҙемләүе ауыр түгел. Был ҡара исемлеккә ниндәй ауылдар ингәндер, әммә тыуған ауылымдағы мәктәптең ишектәренә йоҙаҡ эленмәҫ, тип ышанып булмай. Һеҙ нисек уйлайһығыҙҙыр, ә мин ошо мәғлүмәтте былай ҙа ауыр хәлдә ҡалған ауылдарға сығарылған һуңғы хөкөм ҡарары сифатында ҡабул иттем. Колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, башҡа төрлө эре етештереү көстәре ойошторолмаған, мәҙәниәт усаҡтары ла һүнә барған ошо ауылдарҙа мәктәптәрҙе ябыу уларҙы тамам юҡҡа сығарыу икәнен нисек аңламаҫҡа була? Бер нисә йыл элегерәк тыуған районымдың элекке түрәһе лә: "Ауылығыҙ бөтөп барғанға мин ғәйепле түгел, ундағы мәктәп сығымдары өсөн аҡса юҡ, барыбер уны ябасаҡбыҙ", - тип ҡырт киҫкәйне. Әле лә шул уҡ хәл: бәләкәй ауылдарҙағы мәктәптәр, аҡса юҡлыҡҡа һылтанып, "ҡулайлаштырыу" тип аталған аждаһаға ҡорбан ителәсәк.

Ә Мәғариф министрлығында: "Был белем биреү сифатының яңы кимәлгә өлгәшеүҙе тәьмин итеүсе ресурс мөмкинлектәре булған заманса мәғариф системаһын булдырыу ниәтендә эшләнә", - тиҙәр. Күрәһегеҙме, ғалимдар ҙа көнләшерлек ниндәй матур һүҙҙәргә төрөп бирелгән был ниәт! Йәнәһе, күҙ яуын алып торған база мәктәптәренә уҡыусыларҙы көн һайын автобус менән йөрөтөп уҡыта башлаһаҡ, уларҙың белем сифаты, тап әкиәттәгесә, ай үҫәһен көн үҫә, йыл үҫәһен ай үҫә башлаясаҡ. Нисек ымһындырғыс, ә!

"Алдан ҡысҡырған кәкүктең башы ауырта", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер ул халыҡ. Был осраҡта ла шулай килеп сыҡмағайы. Ошо һығымтаны нигеҙһеҙ тәнҡиткә ҡоролған, тип әйтмәһендәр өсөн фекер йөрөтөп ҡарайыҡ. Ябылырға тейешле мәктәптәрҙең башлыса төпкөл ауылдарҙа урынлашыуы бер кемгә лә сер түгел. Һуңғы йылдарҙа юлдарыбыҙ йүнәтелә килеп, күпкә яҡшырыуына ҡарамаҫтан, тап ошо ауылдарға барып етеү әле лә ауырлыҡтар тыуҙыра. Хатта юл һәйбәт булған осраҡта ла, беҙҙең ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында, бигерәк тә ҡыш көндәрендә, ул үткеһеҙгә әйләнә лә ҡуя. Хәҙер ауылдарҙа ҡарышлауыҡлы тракторҙы көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып булмай. Көн һайын буран һалып торған юлдарҙы кем таҙартыр һуң? Икенсе ауылға йөрөп уҡыған уҡыусыларҙың аҙналар буйына сараһыҙҙан дәрес ҡалдырыу факттары мәғариф органдарына билдәле түгелме икән ни? Былдай шарттарҙа уҡыусылрҙың белем сифаты күтәрелеү урынына төшә генә барасаҡ бит.

"Юл аҙабы - гүр ғазабы", тигән боронғолар. Әгәр ҡышҡы һалҡында автобус ярты юлда ватылып ҡуйһа, ни булыр? Ана, сит илдәрҙең типтигеҙ юлдарында фажиғәгә тарыусы туристар хаҡында телевизорҙан аҙна һайын тигәндәй хәбәр итеп торалар. Ә хәҙер күҙ алдына килтерегеҙ: 467 ауылдан көн һайын автобустарға тейәлгән бала-саға база мәктәбенә иртә менән алып барылып, төш ауғас кире ҡайтарыласаҡ. Уҡыу йылының беренсе көнөнән һуңғыһына тиклем. Был осраҡта уларҙың имен-аман йөрөүе өсөн бары Хоҙайға ғына ялбарырға ҡаласаҡ бит.

Йәнә, ошо хаҡта уйланғанда биопсихологик факторҙарҙы ла күҙ уңынан ысҡындырмау зарур. Әйтәйек, ауылда башланғыс мәктәп тә ябылды, ти.

Беренсе синыфта уҡыған баланы ата-әсәгә таң һарыһынан уятып, тамағын туйҙырып (балаларҙың күбеһе йоҡонан тороу менән ашарға ла бик теләп бармай), автобусҡа ваҡытында ултыртып ебәрергә кәрәк буласаҡ. Төшкөлөгөн дә уҡыусыларға мәктәптә бешерелгән аш менән туҡланыу зарурлығы тыуа. Уҡыусыларҙың байтағы мәктәп ашын бик өнәп тә бөтмәй, ул уҡытыусыларға билдәле хәл. Ҡышҡы көндәрҙә өшөп-туңып, тамағы ла йүнләп туймаған баланың белем сифаты нисек итеп күтәрелер икән? Унан һуң, база мәктәбендә 1-се синыфтан 11-сегә тиклем уҡыған балаларҙы бер үк ваҡытта йөрөтөргә тура киләсәк. Юғары синыф уҡыусылары кластан тыш төрлө тәрбиәүи эштәргә, түңәрәктәргә йөләп ителгәс, түбәнге синыф уҡыусыларына ла уларҙың бушағанын көтөргә тура киләсәк. Ошо уҡыусыларҙың ата-әсәләренә, балалары өсөн йылдар буйына борсолоп йәшәмәҫ өсөн, тыуған ауылын ташлап, күсенеп китергә генә ҡала.

Башланғыс синыф уҡыусыларын икенсе ауылдың яҡшыраҡ йыһазландырылған мәктәбенә йөрөтөп уҡытыу уларҙың белем сифатына бары кире йоғонто ғына яһаясаҡ. Ғөмүмән, башланғыс синыфтар программаһын бер ниндәй заманса йыһаз булмаған төпкөлдәрҙә лә сифатлы итеп үтәргә була, быны миллионлаған кешегә төплө белем биреү тәжрибәһе булған совет мәктәбе күптән раҫлағайны бит инде. Оло илебеҙҙә хатта һуғыш-ҡырылыш йылдарында ла мәктәптәрҙең ябылмауын онотоп бөттөкмө ни беҙ? Ул замандарҙа етәкселәр халыҡ киләсәген беҙҙән яҡшыраҡ күҙаллай белгән, күрәһең. Ә үҙебеҙҙең булдыҡһыҙлығыбыҙҙы финанс ҡытлығына япһарыуҙан туҡтарға ваҡыттыр бит. Уҡыусыларҙы автобустар менән йөрөтөп уҡытыу күпме сығымдар талап итәсәге иҫәпләп сығарылдымы икән, бәлки, урыҫтар әйтмешләй, уйыныбыҙ һуҡыр шәмгә лә тормайҙыр әле. Финанс ҡытлығы ла мәңгелек түгел бит: бай, мул тормош та етер бер заман, тик юҡҡа сыҡҡан ауылдарыбыҙҙы ғына кире ҡайтарып булмаҫ.

Әлеге көндә ғәмәлгә ашырыла башлаған оптималләштереү программаһының төптән уйланылмағанлығы тураһында тағы ла әллә күпме дәлилдәр килтерергә булыр ине, әммә Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов мәғариф хеҙмәткәрҙәренең быйылғы республика кәңәшмәһендә тап ошо мәсьәлә буйынса борсолоуын белдереп, был өлкәлә ашығыслыҡтың үтә хәүефле булыуы хаҡында иҫкәртте беҙҙе. "Беҙ ауылдарҙа, иң кәмендә, әлегә тиклем эшләп килгән башланғыс мәктәптәрҙе һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ", - тине Башҡортостан Президенты. Эйе, ил киләсәге хаҡына яуаплылыҡты үҙ иңенә алған Президентыбыҙ башҡа етәкселәргә лә өлгө булһын ине. Юғиһә, 467 мәктәпте япһаҡ, Башҡортостан ерендә 467 ауыл да киләсәкһеҙ ҡалып, юҡҡа сығасаҡ. Йөрәге битарафлыҡ һаҙлығына батмаған ватандаштарыбыҙ был хәлгә риза булмаясаҡ, шуның өсөн республика мәғарифы етәкселәренә халҡыбыҙ киләсәге өсөн һис ҡулай булмаған "ҡулайлаштырыу" программаһын ҡабатанан ҡарау фарыҙ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**



Август кәңәшмәһендә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Волга буйы төбәк үҙәге начальнигы генерал-майор Игорь Паньшин етәкселегендәге махсус комиссия Башҡортостанда граждандар оборонаһы торошон комплекслы тикшереүҙәр алып бара. Комплекслы тикшереү Өфөлә, Нефтекамала һәм Дәүләкән районында үтәсәк. Уның барышында БР Граждандар оборонаһының һәм ҡотҡарыу хеҙмәттәренең етәкселәре тыңланасаҡ.

✓Башҡортостан 2009 йылға үҙ бюджетын баланслауға федераль бюджеттан 230,5 миллион һумға яҡын аҡса аласаҡ. Ошо туралағы ҡарарға РФ Хөкүмәте рәйесе Владимир Путин ҡул ҡуйған. Дотациялар алыусылар исемлегенә илдең 54 субъекты ингән. Дәүләт ярҙамының дөйөм күләме - 58 миллиард һумдан ашыу.

✓Рәсәйҙең баш санитар врачы Онищенко, уҡыу йылы башланыр алдынан барлыҡ балалар ҙа сусҡа киҙеүе ауырыуына анализдар тапшырырға тейеш, тигән тәҡдим менән сыҡты. Әле донъяла был киҙеүҙең пандемияһы күҙәтелә. Көҙөн ул Рәсәйҙә лә таралыуы мөмкин, тигән фараз бар.

✓Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға дәғүә итеүселәрҙән документтар ҡабул итеү 1 сентябрҙә тамамлана. Дәғүәселәрҙең материалдары БР Журналистар союзында Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13-сө йорт (Матбуғат йорто), 1007-се офис адресы буйынса ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 276-42-66.

✓Республикала араҡы һатыу 9 процентҡа ҡыҫҡарған, ә коньяк менән шампан шарабы һатыу, киреһенсә, артҡан. Шулай уҡ араҡы һатыуға лицензия һорап мөрәжәғәт итеүҙәр ҙә кәмегән.

✓БР буйынса Федераль теркәү хеҙмәте идаралығына документтарҙы теркәүгә сиратка хәҙер интернет аша ла яҙылырға мөмкин. Был хеҙмәтләндереү идаралыҡ сайтында (www.Bashreg.ru) "Тура бәйләнеш" бүлегендә күрһәтелә. Регпалатала тағы бер яңылыҡ: идаралыҡта һәм уның бүлектәрендә үк дәүләт пошлинаһы һәм теркәлгән хоҡуҡтар тураһында мәғлүмәткә түләүҙәр индереү өсөн банк терминалдары урынлаштырылды.

*✓ Ә бит беҙҙең төбәк менән идара итеүсе Президент һәм Хөкүмәт Рәсәй Федерацияһы Президенты һәм Хөкүмәте сәйәсәтен алып бара. Тимәк, "уфагуб"тар Рәсәй етәкселегенең сәйәсәте менән риза түгел булып сыға?*

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БОҘОҠ ЯҘА ГУБЕРНА,

## йәки Ялған яҙған - тарихсымы?

**"Рус-башҡорт һүҙлеге"н төҙөүселәргә бер тәҡдимем бар, йәмәғәт. Махсус рәүештә ҡараным - унда урыҫ халҡының "пошла писать губерния" тигән әйтемен "ығы-зығы башланды" тип тәржемә итеп ҡуйғандар (Русса-башҡортса һүҙлек. - Өфө, 2005, 1-се том, 254-се бит). Риза түгелмен. Минеңсә, был һүҙбәйләнеште башҡаса тәржемә итергә мөмкин. Мөмкин генә түгел, кәрәк. Мәҫәлән, өҫтәгесә, баш һүҙҙәгесә: "Боҙоҡ яҙа губерна". Аңлашылмаймы? Төшөндөрөргә тырышайым, булмаһа.**

Ваҡыт үтеү менән теләһә ниндәй телдәге һүҙҙәр, айырым һүҙбәйләнештәр тәүге мәғәнәһен юғалта, икенсерәк яңғырай башлай, йәки бөтөнләй аңлайышһыҙға әүерелә. Өҫтәге әйтем шулар иҫәбенән. Ҡасан булған ул губерния, нимәне аңлатҡан, ул нимә һәм нишләп яҙған һәм, иң мөһиме, ни өсөн ошондай тапҡыр әйтем барлыҡҡа килгән? Ошолар хаҡында бөгөнгө егерме йәшлектәрҙән һорағыҙ әле, - аңлатып бирә алырҙар микән? Ай-һай! Йәштәребеҙ наҙан түгел. Замана үҙгәргән. Был әйтем күптән инде киң ҡулланылмай. Кәрәге бөткән. Ваҡыты үткән. Мәғәнәһе юғалған. Губерна нимә булған ул? Ун һигеҙенсе быуатта Рәсәй империяһындағы административ берәмек ул. Бөгөн нисәнсе быуатта йәшәйбеҙ? Дөрөҫ, егерме беренселә. Губернаны ғына түгел, башҡа бик күп һүҙҙәрҙе "ерләп" ҡуйҙыҡ. Мәҫәлән, "волость", "уезд", "кантон". Был боронғо административ берәмектәрҙең атамаларына ғына ҡағылмай. "Революция", "Политбюро", "КПСС" һәм башҡа бик күп һүҙҙәр ҙә шулар ишенән. Элегерәк "кулактарҙы һәм помещиктарҙы тарих сүплегенә илтеп күмдек" тигән һүҙбәйләнеш йыш яңғырай торғайны. Беҙ ҙә шулайтып "губерна", "губернатор" һүҙҙәрен тарих ҡыйлығына оҙаттыҡ та ҡуйҙыҡ.

Тик ысынлап та оҙаттыҡмы? Аныҡ ҡына әйтеп булмай. Беренсенән, ул һүҙҙәр менән тарихсылар ҡуллана. Тәбиғи хәл. Икенсенән, ҡайһы бер журналистар ҙа ҡулланғылай. Ялағайланыу йөҙөнәнме, әллә башҡа берәй сәбәп менәнме, айырым төбәк башлыҡтарын ҙурлау йәһәтенәнме, уларҙы "губернатор" тип атап ебәрәләр. Тегеләр быны нисек ҡабул итәлер инде? Оҡшаталар микән? Әллә үпкәләйҙәрме? Аҡыллы кеше, әлбиттә, үпкәләр ине. Һәрһөп, уҡаһы ҡойолоп бөткән һүҙ менән атаһындар әле үҙенде. Ауылда егәрле бер егеткә "кулак булып бараһың түгелме" тигәйнем, үпкәләпме үпкәләй. Мин эшҡыуар, тип ебәрә. Һәм ул хаҡлы. Ҡайһы бер һүҙҙәр шулайтып иҫкерә икән. Уларҙы бик ныҡ теләһәң дә тергеҙеп булмай. Һәм кәрәкмәй ҙә.

Йәмәғәт, шуны әйтмәксемен: нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ул һүҙҙәрҙе, хәйер, һүҙҙәрҙе генә микән, тергеҙергә теләүсе һәм маташыусылар бар был донъяла. Әллә ҡайҙа, даръя аръяғында түгел, үҙебеҙҙә, эргәбеҙҙә генә йөрөй улар. Бәлки, һеҙ уларҙы йәмәғәт транспортында күргәнегеҙ барҙыр, баҙарҙарҙамы шунда, йәки берәй магазиндамы. Хатта берәй абруйлы ғилми-ғәмәли конференцияларҙа йәки эшҡыуарҙар форумында ла күреүегеҙ ихтимал. Иғтибар итмәй, эргәләренән үтеп киткәнһегеҙҙер. Улар бит башҡаларҙан бер нәмәһе менән дә айырылып тормай. Улар, әйтәйек, нацизм һәм фашизм идеологияларына табынғандар кеүек, сәстәрен ҡыҫҡа итеп ҡырҡтырып, ҡара күн курткалар һәм бейек ботинкалар кейеп, муйындарына свастика аҫып йөрөмәй. Бөгөнгө фашистарҙы неонацист, тиҙәр. "Яңы", яңырырға тырышҡан нацист була инде. "Губерна" һүҙен тергеҙергә маташыусыларҙы иһә "неогубернасылар" тип атарға мөмкин. Хәйер, махсус атамаға күп һанлы хәрәкәттәр генә хаҡлы. Былар иһә күп түгел. Сүп кенә. Дүртбиш кешеме шунда. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙың идеялары боҙоҡ, уйҙары яман, эштәре бысраҡ, әшәке.

Интернетта барлыҡҡа килгән бер сайттан башланды был эш. Бер нисә йыл элек үҙен ғорур рәүештә "эшҡыуар" тип атаған, шул уҡ ваҡытта тырышып-тырмашып "тарихсы" исеменә эйә булырға маташҡан Николай Швецовмы, уның тәҡдиме һәм ярҙамы менән башҡа берәүме, Бөтә донъя селтәрендә "Уфа губернаһы" тигән сайт аҫып ебәрҙе. Интернетта сикләү юҡ - ни теләйһең, шуны ҡылаһың. "Уфагуб" (был сайттың ҡыҫҡартылған атамаһы) рәхәтләнеп ҡылды ла, ҡыланды ла. Беренселәрҙән булып әлеге лә баяғы "тарихсы"ның (уға ҡарата был һүҙҙе тырнаҡ эсенән башҡа яҙып та булмай) "опус"тары донъя күрә башланы. Баҡтиһәң, ул һәм уның эргә-тирәһендәге уның кеүек "тарихсы"лар Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының тарихындағы күп кенә "билдәһеҙ" биттәрҙе асҡан икән. Ошо хаҡта тиҙ арала йәмәғәтселеккә еткерергә булып киткәндәр. "Асыш"тары ниҙән ғибәрәт, тип һорарһығыҙ. Башҡорттар ҡырағай, улар саҡ тау башынан (вариант - ағас башынан) төшкән. Уларҙың дәүләтселеге буш һүҙ, сөнки Өфө губернаһы һаман бар. Улар аслыҡтан ҡырылып бөтөп барғанда, Мәскәү ярҙам итмәһә, күптән ер йөҙөнән юҡҡа сығырҙар ине. Һәм был шәп булыр ине, сөнки бөгөн ошо "маймылдар" беҙҙең менән идара итә. Зәки Вәлиди - фашист, һәм башҡалар, һәм башҡалар. Ғәфү, йәмәғәт, мин был неогубернасыларҙың "хеҙмәттәрендә" һәм сайтта урынлаштырылған материалдарға комментарийҙарында яңғыраған ҡайһы бер фекерҙәрҙе генә һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим иттем. Башҡаларын ауыҙ асып әйтерлек түгел. Бигерәк боҙоҡ. Боҙоҡлоҡтарға, йәберләүҙәргә, мыҫҡыллауҙарға ла түҙергә булыр ине. 452 йыл түҙәбеҙ бит инде. Улар бөгөн Башкортостандағы етәкселекте алып ташларға саҡыра башланы. Ә был иһә, йәмәғәт, белмәһәгеҙ - белегеҙ, дәүләткә ҡаршы енәйәт. Ул иң ҡурҡыныстарҙан һанала. Бөгөн Башҡортостан властарының башына етергә саҡырһалар, иртәгә Рәсәйҙе тарҡатырға өндәй башларҙар. Уларҙың баштарына әллә ниндәй уйҙар килер әле.

"Улар" тиһең дә яҙаһың, ә Швецовтан башҡалары кем һуң, тип һораусылар булыр. Яуап бирәм - Н. Швецовтың "Николай һәм компания" фирмаһындағы ярҙамсыһы Сергей Орлов, ошо компанияның бухгалтеры Константин Нестеров һәм, иң ҡыҙығы, Рәсәй Фәндәр академияһының ғилми хеҙмәткәрҙәре, фән кандидаттары Игорь Күсемов менән Илдар Ғабдрафиҡов(!). Август башында был кешеләр Өфөнөң Орджоникидзе суды ҡарары менән ике айға, суд процесы башланғанға тиклем, ҡулға алынып, рәшәткә артына оҙатылды. Әлеге ла баяғы, Башҡортостандың дәүләт төҙөлөшөн түңкәрергә саҡырған өндәүҙәре өсөн. Ҡулға алыныусылар иһә быны менән риза түгел. Башҡортостан етәкселеге сәйәсәте менән риза түгелбеҙ, шуға рәшәткә артына эләктек, тип иҫәпләй улар. Шулай итеп, был кешеләр үҙҙәрен Советтар Союзындағы академик Дмитрий Сахаров кеүек "намыҫ тотҡондары" менән бер рәткә баҫтырып ҡуйҙы. Тик шуны ғына оноторға ярамай - Сахаров тотош совет режимы менән көрәште. Ә былар? Былар бит Рәсәй Федерацияһының айырылғыһыҙ бер өлөшө булған Башҡортостан Республикаһының етәкселеген алып ташларға саҡыра. Ә бит беҙҙең төбәк менән идара итеүсе Президент һәм Хөкүмәт Рәсәй Федерацияһы Президенты һәм Хөкүмәте сәйәсәтен алып бара. Тимәк, "уфагуб"тар Рәсәй етәкселегенең сәйәсәте менән риза түгел булып сыға? Был сайттың Рәсәйҙә түгел, ә океан аръяғында, Америка Ҡушма Штаттарының Аризона штатында урынлашыуы ла аңлашыла түгелме хәҙер?

Шуныһы ла ғәжәпләндерә: эш боҙорға тигәндә, был кешеләр шәп ине, ә инде яуап бирергә ваҡыт еткәс, шунда уҡ сәйәси эҙәрлекләүҙәр, кеше һәм һүҙ азатлығын баҫтырыу тураһында тауыш күтәреп, хоҡуҡ яҡлаусыларға (хоҡук һаҡлаусылар менән бутап ҡуймағыҙ), Йәмәғәт палатаһына, адвокаттарға мөрәжәғәт итә башланылар. Һүҙ юҡ, Рәсәй Йәмәғәт палатаһы ла килеп ҡыҫылыр, моғайын. Эштең табышлы булыуын һиҙеп ҡалһалар, күренекле адвокаттар ҙа килеп ҡушылыр был эшкә. Үләкһә эҙләп осоп йөрөгән ҡоҙғондарҙы хәтерләткән үҙәк матбуғат саралары журналистарына ла "ем" күп булыр һымаҡ тойола...

**Ысынлап та, губерналарҙы тергеҙергә микән уйҙары, тип баш ватаһығыҙҙыр. Әлбиттә, юҡ! Губерна - ул сәбәп кенә. Әйткәндәй, Өфө һәм Ырымбур губернаторҙары араһында башҡортҡа мәрхәмәтле, уның мохтажлыҡтарына иғтибарлы һәм мөнәсәбәттә ягымлы кешеләр булмаған түгел, булған. Әммә губернаға бөгөн ҡабат әйләнеп ҡайтыу юҡ. Ҡайһы берәүҙәр бик теләһә лә.**

**Таһир ИШКИНИН.**

### *НИҺАЙӘТ!*

Июнь айында "Циркон" Бөтә Рәсәй социологик тикшереүҙәр төркөмө үткәргән анкета мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәй халҡының 65 проценты Үҙәк телеканалдары аша күрһәтелгән тапшырыуҙарҙы өнәмәүе хаҡында белдергән, рәсәйлеләрҙең 69 проценты иһә телевидение буйынса йәмәғәтселек советы төҙөү идеяһын хуплай. Нимәгә кәрәк һуң ундай совет? Рәсәй халҡының әхлағына, йәшәү принциптарына тап килмәгән тапшырыуҙарҙы һәм фильмдарҙы тыйыу өсөн кәрәк. Шундай тапшырыуҙарҙың береһе "ТНТ" каналы аша күрһәтелгән "Дом-2" тапшырыуы ошоғаса бик күптәрҙең һарыуын ҡайната ине. Яңыраҡ Мәскәүҙең Пресня район суды яманаты сыҡҡан был тапшырыуҙы көндөҙ күрһәтеүҙе тыйған ҡарар сығарҙы. Ниһайәт, боҙ урынынан ҡуҙғалды. Үҙәк телеканалдар аша күрһәтелгән тағы ла ошондай бик күп программаларҙың һәм фильмдарҙың тыйылыуын көтә халыҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Мәскәүҙәге Черкизов баҙары ябылған һәм уның бинаһы сентябрҙә һүтелә башлаясаҡ икән. Мәскәү властары элекке баҙар биләмәһендә спорт комплексы һәм сауҙа үҙәге төҙөргә уйлай.

✓ Зәйнәп Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте дәүләт заказына ярашлы яңы уҡыу йылына дәреслектәр һәм уҡытыу-методик ҡулланмаларҙың төп өлөшөн сығарып бөттө. Быйылға уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн 65 дәреслек һәм 53 ҡулланма сығарыу планлаштырылған булған.

✓ "Роспотребнадзор"ҙың БР идаралығы Ҡытайға барыуҙан тыйылып торорға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, әле Ҡытайҙа үпкә чумаһы ауырыуы таралыу менән бәйле эпидемик хәл килеп тыуған.Чума күберәк үлем менән тамамланыусы ҡурҡыныс йоғошло сир.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Ҡарары менән БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы үткәргән конкурс һөҙөмтәләре буйынса кинорежиссер Булат Йосоповҡа "Республика тураһында кино төшөрөүсе 5 йәш режиссер" проектын тормошҡа ашырыуға Башҡортостан Республикаһы Президенты гранты бирелде. Проект сиктәрендә ижади эштәргә конкурс иғлан ителә. Унда ҡатнашыусылар тәҡдим ителгән тема буйынса ҡыҫҡа метражлы фильм өсөн әҙәби сценарий яҙырға тейеш. Ғаризалар 20 августа тиклем www.kinoshkola.info сайты аша ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефондар: (347) 293-19-54, 291-1330.

✓ 15 августан 1 октябргә тиклем Башҡортостан биләмәләрендә һунарсылыҡ миҙгеле асыла. Ҡарарҙа ҡайһы бер сикләүҙәр бар: тораҡ урындарҙа һәм уларға ҡараған биләмәләрҙә, Өфө районында һунар итеү тыйыла. Бер һунарсы түләгенә бишәр һыу ҡошо, сел һәм ҡурпысыҡ, унар күл һәм ялан ҡоштары ата ала. Һунарсыларға дөйөм алғанда 150-ләп айыу, 2700 ҡондоҙ, 800 мышы, 2000 ҡабан һәм 57 мең өйрәк атырға рөхсәт ителә.

✓ Был юлы Башҡортостандың үҙендә үткәрелгән ҡабул итеү имтихандары йомғаҡтары буйынса Санкт-Петербург кино һәм телевидение дәүләт университетына беҙҙән 18 егет һәм ҡыҙ уҡырға инде. Быға тиклем был уҡыу йортонда республиканан 50 студент уҡый ине инде.

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## Юлаевсылар майҙанға сыға

Өфө-Арена эргәһендә һуңғы көндәрҙә ғәҙәттәгенән тыш йәнлелек һиҙелә. Баҡтиһәң, тиҙҙән буласаҡ ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс турнирға билеттарҙы байтаҡ алданыраҡ һата башлағандар икән!

Эйе, 24-26 августа Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына традицион халыҡ-ара хоккей турниры буласаҡ. Ҡиммәтле трофей өсөн майҙан хужалары - юлаевсылар, Тольятти ҡалаһының "Лада", Нижнекамскиҙан "Нефтехимик" һәм Словакия Республикаһынан "Скалице" командалары көс һынашасаҡ.

Өфө-Арена эргәһендә хоккей алыштарын көтә-көтә көтөк булған көйәрмән Бикҡужа Хәкимйәнов менән танышып, һөйләшеп киттек.

- Нинә шулай иртәләнең? Турнир башланырға байтаҡ ваҡыт бар бит әле,- тим.

- Мин юлаевсылар өсөн генә янып көйәм. Уларға бит был юлы беҙҙең ышанысты һәм хөрмәтте аҡлау өсөн байтаҡ көс түгергә тура киләсәк. Билеттар һатылып бөтөп бара, шуға күрә алданыраҡ хәстәрлек күреү хәйерле, - тине көйәрмән.

Турнирға билет хаҡтары төрлөсә, урындарҙың ҡайҙа булыуына ҡарап: 50,120, 150, 200 һум.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Сит ил паспортының… ғүмере оҙайтыла

Ошо көндәрҙә Рәсәйҙең Дәүләт Думаһы депутаттары 1996 йылдың 15 августында ҡабул ителгән 114-се "Рәсәй Федерацияһына инеү һәм унан сығыу тәртибе" тураһындағы Федераль законға үҙгәрештәр индерелеүен ҡарарға тейеш. Уға ярашлы, сит ил паспортының ғәмәлдәге ваҡытын 5 йылдан 10 йылға тиклем оҙайтыу күҙ уңында тотола.

Бында шуны аңлатып үтергә кәрәк: закон ҡабул ителгән осраҡта, биометрик паспорттар ғына 10 йылға биреләсәк, ә ҡәҙимге паспорттарҙың "ғүмере" лә, дәүләт һалымы ла үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ. Микрочиплы паспортҡа дәүләт һалымы үҙгәрәсәк. Дәүләт һалымы ололарға - 2 мең, ә бәлиғ булмағандар өсөн 1200 һум тәшкил итәсәк. Паспорттың 10 йылға бирелеүен иҫәпкә алғанда, былдай һалымды ҙур тип әйтеп булмай.

"Рәсәй Федерацияһына инеү һәм сығыу тәртибе" Законына үҙгәрештәр индереүҙе тәкдим итеүгә бер нисә сәбәп бар. Беренсенән, илдең ҡайһы бер төбәктәрендә сит ил паспортын алыу өсөн ярайһы ғына ҙур сираттар теҙелгән. Икенсенән, биш йыл һайын сит ил паспортын баҫыу дәүләттең дә матди сығымын арттыра. Етмәһә, сит илдәрҙә, күптән инде сит ил паспорттары оҙайлы ваҡытҡа бирелә. Мәҫәлән, Европала сит ил паспорты икенсе илгә сыҡҡанда мисәт һуғыла торған биттәре тулып бөткәнсе ғәмәлдә.

Әлеге көндә был закон проекты Дәүләт Думаһында үҙ сиратын көтә. Әгәр ҙә ҡабул ителһә, ул 2010 йылдың 15 ғинуарынан үҙ көсөнә инәсәк.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ИЛЕБЕҘГӘ ШӘХЕСТӘР КӘРӘК,

## ә уларҙы лидер уҡытыусылар тәрбиәләй

**Республикала матур йолаға әүерелгән, быйыл ун өсөнсө тапҡыр уҙғарылған мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһе был юлы Баймаҡ, Йылайыр һәм Хәйбулла райондарында үтте. Педагогик форумда Башҡортостан Республикаһы Президенты М.Ғ. Рәхимов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе К.Б. Толкачев, БР Хөкүмәте Премьер-министры Р.С. Сарбаев, республика министрлыҡтары һәм ведомстволары етәкселәре, хакимиәт башлыҡтары, уларҙың социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫарҙары, муниципаль берәмек хакимиәттәренең мәғариф бүлеге начальниктары ҡатнашты. Кәңәшмәгә шулай уҡ РФ Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары О.Н. Смолин килде.**

Педагогик кәңәшмәнең күсмә рәүеш алып барыуының әһәмиәте, әлбиттә, баһалап бөткөһөҙ. Иң беренсе сиратта, педсовет үтәсәк төбәктәрҙә мәғариф учреждениелары, социаль-мәҙәни үҙәктәр төҙөлә һәм реконструкциялана. Был төҙөлөштәр менән бер рәттән, юлдар яҡшыртыла, ауылдар күркәмләнә, урындағы халыҡтың күңеле күтәрелеп китә. Ҡыҫҡаһы, төбәккә яңы йәшәү һулышы өрөлә. Был юлы ла кәңәшмәлә ҡатнашыусылар был һулышты тойҙо, яңы сафҡа индерелгән мөһабәт объекттар, төҙөк ауылдар, көләс йөҙ менән балҡыған кешеләргә ҡарап һоҡланды.

Мәктәп асылыу ауыл халҡы өсөн һәр ваҡыт һөйөнөслө күренеш. Ни тиһәң дә, ауыл күркен, йәшәйешен шул мәктәптәр һаҡлай бит. Был йәһәттән, Аллаға шөкөр, беҙҙең республикала мәғариф объекттарын төҙөүгә етди иғтибар бүленә. БР мәғариф министры Зиннәт Аллаяров әйтеүенсә, Рәсәйҙә төҙөлгән мәктәптәрҙең һәр унынсыһы Башҡортостанда сафҡа индерелә. Был йәһәттән республикабыҙ һәр саҡ лидерҙар рәтендә килә. Был кәңәшмә ваҡытында ошоно раҫлаған тағы бер ваҡиға булды: Хәйбулла районының Бүребай ауылында асылған мәктәп 1990 йылдан алып сафҡа индерелгән белем усаҡтарының меңенсеһе булып сыҡты. Мененсе мәктәп 550 урынға иҫәпләнгән, уның төҙөлөшөнә республика бюджетынан 200 миллион һум аҡса сарыф ителгән. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар был өс районда тағы ла биш яңы мәғариф объекты асылыуына шаһит булды. Йыйылыусыларҙы бигерәк тә август кәңәшмәһенең пленар ултырышы үткән Урғаҙалағы яңыртылған Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы бинаһы һоҡландырҙы. Бында ғәйәт ҙур реконструкция уҙғарылған, ҡатмарлы эске инфраструктуралы бынамын тигән уҡыу ҡаласығы ҡалҡып сыҡҡан. Уҡыу йортоноң әһәмиәте бөгөнгө заманда бигерәк тә актуаль - ауылдырыбыҙ кадрҙар ҡытлығы кисерә һәм ауылдарҙы күтәрер патриот кешеләрҙең яңы тулҡынын көтә. Был техникумға ошондай ҙур бурысты атҡарыу йөкмәтелгән дә инде. Бында тәрбиәләнәсәк ауыл хужалығы кадрҙарының яңы быуынына замандың иң ҡурҡыныс афәтенә - ауылдарҙың бөтөүенә лә ҡаршы тора алыусылар, тигән өмөт менән ҡарала бит. Ауылдар эшле булһа, йәш ғаиләләр күбәйеп, балалар ишәйһә, мәктәптәр ҙә ябылмаясаҡ, тимәк, ауыл да йәшәйәсәк. Был тема август кәңәшмәһендә Президентыбыҙ сығышында ла, башҡа сығыштарҙа ла ҡыҙыл еп булып үрелеп барған тема булды.

РФ Дәүләт Думаһының Мәғариф буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Олег Смолин да пленар ултырышындағы сығышында: "Башҡортостанда хатта төпкөл ауылдарҙа ла балалар лайыҡлы белем ала", - тип, беҙҙәге ауыл мәктәптәрен үҫтереү өсөн күп эш алып барылыуын хуплауын белдерҙе. Уның әйтеүенсә, илдең башҡа төбәктәрендә бөтөнләй икенсе күренеш күҙәтелә. РФ Фән һәм мәғариф министрлығының рәсми күрһәткестәре буйынса, 2007-2008 йылдарҙа ғына Рәсәйҙә 2400 ауыл мәктәбе ябылған. "Ә ауылдар юғалыу менән бергә ауыл өсөн перспективалар ҙа юғала", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Олег Смолин.

Баланы илдең лайыҡлы шәхесе итеп тәрбиәләү өсөн заманса белем






## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Июлдә Өфө ситендәге өйҙәргә һәм коттедждарға хаҡтар 4,3 процентҡа артҡан. Ер участкаларының хаҡы уртаса 2,4 процентҡа күтәрелгән. Әле өйҙәрҙең, коттедждарҙың бер квадрат метрының хаҡы - 25,5 мең һум. Йыл башындағыға ҡарағанда, был 10,5 процентҡа арзаныраҡ.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә баш ҡалала йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын иҫкәртеү һәм дауалау мәсьәләләре тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Былтыр Өфөлә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән яфаланыусы 280 мең кеше теркәлгән. Йыл һайын 1500 өфөлө миокарда инфарк-ты, 3 меңдән артыҡ кеше мейе ҡан әйләнеше боҙолоуына юлыға. Инфаркттан үлеүселәр 22 процент, инсульттан үлеүселәр 12-15 процент тәшкил итә.

✓ "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы уҡыу процесына умартасылыҡ нигеҙҙәрен индерергә тәкдим итә. Уның етәксеһе Әмир Ишемғолов билдәләүенсә, республика уҡыусыларына умартасылыҡ нигеҙҙәрен хеҙмәт тәрбиәһе дәрестәрендә өйрәтергә була. Беҙҙә былдай эш тәжрибәһе бар: былтыр Балтас һәм Бөрйән райондары мәктәптәре хеҙмәт дәрестәрендә үҙәк өсөн 500 мең һумлыҡ рамдар эшләгән.

✓Бөгөн 11-16 сәғәттәрҙә Нефтехимиктар паркында Сәскәләр көнө уҙғарыла. Бында сәскәләр күргәҙмәһенән тыш, балалар өсөн бәйгеләр һәм уйындар ойоштороласаҡ, ижади коллективтар сығыш яһаясаҡ.

✓Өфөнөң трамвай депоһы хеҙмәткәрҙәре өсөн ҡыҙыу осор - улар трамвай юлдарын һәм уның эргәһендәге биләмәләрҙе төҙөкләндереү эштәре менән була. Әле 2-се депо Вологодская урамын төҙөкләндерә.

✓Баш ҡаланың төп магистрале - Октябрь проспектында, "Кала мәҙәниәт йорто" туҡталышынан "Рәми Ғарипов исемендәге гимназия" туҡталышына тиклем төҙөкләндереү эштәре алып барыла. Тротуарҙарға асфальт түшәлә, эскәмйәләр урынлаштырыла, бордюр таштары алыштырыла. Ремонт эштәре артабан "Курсаҡ театры" туҡталышынан "Кала Советы" туҡталышына тиклем дауам иттереләсәк.

БЕЛЕП ҠУЙ!



# НАМАҘ - ОЖМАХҠА АСҠЫСТЫР

Бәйғәмбәребеҙ шулай тигән: "Аллаһы Тәғәлә иман менән намаҙҙан да юғары вазифа бирмәгән. Әгәр ҙә ниндәйҙер юғары вазифа булһа, ул фәрештәләргә уны үтәргә әмер итер ине. Әммә фәрештәләрҙең яртыһы көндәрен һәм төндәрен рукуғта, яртыһы сәждәлә уҙғара" (Фадаиль - Амаль, 256).

"Иң насар бур - үҙенең намаҙын урлаусы".

"Йоҡлаған саҡта шайтан һеҙҙең кемегеҙҙеңдер елкәһенә өс төйөн бәйләп, һәр берեһенә өрә һәм әйтә: "Йоҡла, төн оҙон әле!" Кеше уянып, Аллаһы Тәғәләне иҫләһә, бер төйөн сиселә; тороп, тәһәрәт алһа, икенсе төйөн сиселә; намаҙ уҡыһа, өсөнсө төйөн сиселә. Ул иртәсәк дәртле һәм ҡәнәғәт буласаҡ. Ә кире осраҡта, ул насар, төшөнкө кәйефтә торасаҡ".

"Хатта бер намаҙын ҡалдырыусы ғаиләһенән һәм мөлкәтенән мәхрүм ителеүсегә тиң".

Бохариҙа риүәйәт ителеүенсә, ғәҙәттә, Аллаһтың илсеһе иртәнге намаҙҙан һуң сәхәбәләренән төштәрендә нимә күреүҙәре хаҡында һорашҡан. Улар уға үҙҙәренең төштәре тураһында һөйләгән, ә Бәйғәмбәр уларҙы юраған. Бер ваҡыт ул үҙенең төшөн һөйләгән. Ул бик оҙон булған. Уға төшөндә ожмах, һуңынан тамуҡ һәм ундағы язалауҙар күрһәтелгән. Тамуҡтағы язалау төрҙәренең береһе былай булған: бер кешенең башын таш ярған. Бәреү шул тиклем көслө булған, таш кире ҡаҡлыңып, элекке урынына барып яткан. Ошонан һуң бәреү тағы ла дауам иткән. "Был кем?" - тип һораған Аллаһтың илсеһе үҙен оҙатып йөрөүселәрҙән. "Был Ҡөрьән уҡырға өйрәнгән, әммә уны һуңынан туктатҡан һәм йоҡларға ятыр алдынан фарыз намаҙын уҡымаған кеше", - тип яуап биргәндәр Бәйғәмбәргә.

"Төнгө намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыусы ярты төнөн ғибәҙәттә үткәреүсегә тиңләшер. Иртәнге намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыусы төнө буйы ғибәҙәт ҡылып сығыусыға тиңләшер".

Башҡа ғибәҙәттәргә ҡарағанда, шайтан бигерәк тә кешенең намаҙына үсле һәм уны бүлдерергә тырыша. Иманлы кеше был тоҙаҡты урап үтер өсөн зирәк булырға тейеш. Шулай ҙа кемдеңдер ҡаза намаҙҙары ҡалған икән, ул мөмкинлек сығыу менән уны уҡып ҡуйырға тейеш. "Кем дә кем намаҙын онотҡан, уны иҫенә төшөргәс тә уҡып ҡуйһын. Ошонан башҡа ғәфү ителеү юлы юҡ", - тигән Аллаһ илсеһе.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**"Әт-тухур" (таҙалыҡ) - имандың яртыһылыр; "Әлхәмдулилләһи" һүҙе үлсәүҙәрҙе тултыра; "Собханаллаһи уә Әлхәмдулилләһи" һүҙҙәре күк менән ер араһын тултыра. Намаҙ - ул нур. Саҙаҡа - раҫлау. Сабырлыҡ - бер балҡыш. Ҡөрьән - һинең яҡлы йә һиңә ҡаршы иҫбатлаусы. Һәр кем иртән үҙенең йәнен һатырға йүнәлә, һәм уны йә ҡоткара, йә һәләк итә" (Мөслим, "Тәхәрә", 1).**

# ЙӨРӘКТӘ НЫҒЫНҒАН ЫШАНЫУ...

## иман тип аталыр...

Хәҙистә башланған, таҙалыҡ тип тәржемә ителгән "Әт-тухур" һүҙе урынына башҡа риүәйәттәрҙә "әл вуду" һүҙе лә осрай. Бында ритуаль таҙарыныу күҙ уңында тотола. Дингә баҫҡан кешене Ислам бөтә гонаһтарынан таҙартҡан кеүек, вуду (тәһәрәт алыу) кешене бәләкәй гонаһтарынан таҙарта. Шуға күрә лә, гонаһтарҙан таҙарыныу күҙлегенән, тәһәрәт имандың яртыһына тиңләшә. Иман, бер Аллаһҡа табыныу кешенең күңелен бысраҡлыҡтан таҙарта. Тәһәрәтле булыу - көүҙәлә күңел таҙалығының сағылышы. Мөьминдең күңеле лә, тәне лә таҙа булырға тейеш. Бында "Иман" һүҙе, "Әл-Баҡара" сүрәһенең 143-сө аятындағы кеүек, намаҙ мәғәнәһенә эйә булһа, хәҙистә намаҙ өсөн мөһим шарт булып торған тәһәрәт тураһында һүҙ бара. Йәғни, "таҙалыҡ - имандың яртыһылыр" тигән һүҙбәйләнеште, "тәһәрәт - имандың яртыһылыр" тип тә аңларға була. Иман - ул йөрәктә ныҒынған, тән менән ғибәҙәт итеүҙә күренгән ышаныу. Намаҙ - тәһәрәт шарт булып торған ғибәҙәт. Ошо мәғәнәлә вуду, йәки тәһәрәт "имандың яртыһы" тип һанала.

Әлхәмдулилләһи Аллаһты лайыҡлы һүҙҙәр менән маҡтауҙы аңлата. Исламға ярашлы, һәр изге эш тә бүләкләнәсәк һәм бөтә эштәр ҙә үлсәнәсәк. Аллаһты маҡтау, "Әлхәмдулилләһи" һүҙҙәренә бүләк йомарт буласаҡ һәм Ҡиәмәт көнөндә үлсәүҙәрҙе тултырасаҡ. Был һүҙҙәр, ҡыҫҡа булыуға ҡарамаҫтан, бер Аллаһҡа табыныуҙы, хаҡ иманды һәм Үҙен яралтыусыны белеүҙе күрһәтә һәм ҙур ҡиммәткә эйә.

Собханаллаһи Аллаһты уға тиң булмаған бөтә нәмәнән дә өҫтөн итеп күрһәтеү. Бергә әйтелгән саҡта Әлхәмдулилләһи һәм Собханаллаһи һүҙҙәре тәүхидте, бер Аллаһҡа табыныуҙы күрһәтә. Был һүҙҙәр Йыһанды яралтыусының бөйөклөгөн һәм биргән ҡабул итеү һүҙҙәре, улар өсөн бүләк күк менән ер араһын тултырыр. Хәҙистә был аңлатмалар, Собханаллаһи һәм Әлхәмдулилләһи һүҙҙәрен әйтеп, иманлылар күп нәмәгә өлгәшә аласаҡ икәнлеген күрһәтер өсөн килтерелгән. Был һүҙҙәрҙе мәғәнәһенән аңлап, йышыраҡ ҡабатлау мотлаҡ.

Намаҙ - төндә юлды яҡтыртҡан нурға тиңләшә. Был нур иман менән тоҡана. Иман эҙҙәре Ислам нормаларын үтәүсе мөьминдең йөҙөндә күренә. Намаҙ алдынан тәһәрәт алған кеше үҙендәге арыуҙы һәм көнө буйы тупланған бысраҡлыкты йыуып төшөрә, рухи һәм физик яҡтан таҙарына. Һәр намаҙ менән алған нур уға изгелек менән яуызлыҡты, хәләл менән хәрәмде айырырға өйрәтә. Шулай итеп, мосолман ике донъя бәхетенә ирешә һәм Ҡөрьәндә әйтелеүселәр араһында булыр: "Ҡиәмәт көнөндә һин мөьмин ирҙәр менән мөьмин ҡатындарҙы күрерһең. Уларҙың алдынан һәм уң яғынан да (донъяла ҡылған изгелектәренең) нурҙары яҡтыртып барыр" (57/12).

Саҙаҡа - кешенең үҙенең иманын дәлилләүе. Был осраҡта саҙаҡа мотлаҡ түләнәсәк зәкәт, үҙ теләгең менән бирелгән хәйер һәм фиҙәҡәрлекте аңлата. Яҡын кешеңдең рухи һәм матди яҡтан ярҙам итеүе, борсолоуы, изгелек теләүе Имандың емештәре булып тора. Һаранлыҡ, тупаҫлыҡ һәм йөрәкһеҙлек - имандың көсө кәмеүен йәки юғалыуын күрһәтә. Ҡөрьәндә әйтелә: "Динде ялғанға һанаған кешене һин күрҙеңме? Шул кеше етемде янынан ҡыуыр. Ас кешенең тамағын туйҙырмаҫ" (107/1-3). Саҙаҡа иманды һәм Исламдың бөйөк ҡиммәттәрен раҫлаусы булып тора. Ҡиәмәт көнөндә иманлынан уның мөлкәте һәм ул уны нисек ҡулланғаны тураһында һораласа, ул үҙенең тараткан саҙаҡаһын күрһәтәсәк.

Бәйғәмбәребеҙҙең (салаллаһу ғәләйһи сәләм) был хәҙисендә сабыр - балҡыш - сығанаҡтың үҙенән сығыусы нур рәүешендә һүрәтләнә, шул уҡ ваҡытта нур - ул сағылған яҡтылыҡ. Бының Ҡөрьәндә раҫланғанын күрәбеҙ: "Аллаһ ҡояшты яҡтылыҡ сығанағы итеп яралтты, ә айҙы нурлы итеп (сағылыш) яралтты" (10/5).

Бында бәхет юлында ике донъяла ла мөьминдең сабырлығы балҡып тороуы тураһында әйтелә. Бер яҡтан ҡарағанда, сабыр арҡаһында мөьмин тыйылған алдатҡыс ҡиммәттәрҙән баш тарта, икенсе яҡтан, әмерҙәрҙе үтәп һәм ауырлыҡтарҙы сыҙамлыҡ менән үтә белеүе арҡаһында, үҙен бәхетле итәсәк күңел тыныслығына ирешә. Мөьмин ихтыяр көсө, сабырлыҡ, сыҙамлылыҡ, түҙемлелек тә туплай. Ғалимдар сабырға шундай аңлатма бирә: "Шәриғәт сиктәрендә кешенең тойғоларын һәм аңын тотоуы". Аяттарҙа һәм хәҙистәрҙә "сабыр" һүҙе бер нисә мәғәнәлә әйтелә:

- ғибәҙәттә һәм тыйылғандарҙан баш тартыуҙа сабыр,
- ҡайғы килгәндә сабыр,



- йәбер-золомға сабыр,
- дәғүәттә, изгелеккә һәм яуызлыҡтан тыйғанда сабыр,
- һуғыш майҙанында һәм иманһыҙҙарға ҡаршы торғанда сабыр.

Хәҡиҡәттә сабырлыҡтың һәр төрө лә - "дыя", бөйөк көстөң балҡышы һәм сығанағы.

Күптәр, сабыр ғәҙелһеҙлек алдында килешеү һәм уға ҡаршы килмәү, тип аңлауы ихтимал. Киреһенсә, сабыр - мөьминдең эске энергияһының төп сығанағы. Сабыр - тимәк, түҙемле һәм сыҙамлы булыу. Шуға күрә лә Бөйөк Аллаһ сабырлы булып ҡотолоу юлын эҙләргә һәм дошмандарҙы еңергә әмер бирә. Мөьмингә нәҡ ауыр ваҡыттарҙа сабыр бөтәһенән дә яҡыныраҡ булырға тейеш, шул ваҡытта ғына: "Аллаһ сабыр иткәндәргә ярҙам итә", - тигән хәҡиҡәт барлыҡҡа килә.

Сабыр - мосолмандың төп капиталы. Уны шулай уҡ потенциаль көс тип тә атарға була. Шулай ҙа мөьмин үҙ аллы ла ауырлыҡтарҙы үткәрә, уға ҡаршы тора һәм иң ҙур маҡсаттарға ла ирешә. Һәр ваҡыт, сабырҙың бер балҡыш икәнен иҫтә тотоп, уның нурын үҙең алдында күрә белергә кәрәк. Мосолманға яҡшы ярҙамсы - сабырлыҡҡа өндәүсе. "Ғаср" сүрәһендә бер-береһен сабырлыҡҡа саҡырыусыларҙың ҡотолоуы тураһында әйтелә.

Шулай итеп, сабыр - дыя (балҡыш), ә намаҙ - нур (яҡтылыҡ). Ғүмер буйына төрлө хәлдәрҙә сабырлыҡ күрһәтеү мотлаҡ. "Ваҡыт һәм сабырлыҡ сисмәгән проблема юҡ" тип тә әйтәләр. Шуға күрә Хәҡиҡәт юлында ныҡыш булырға һәм ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәй, аҙаҡҡа тиклем барырға кәрәк.

Изге Ҡөрьән - Хәҡиҡәт юлында юл күрһәтеүсе һәм Ислам белеменең төп сығанағы. Кешеләр Изге Китапҡа ышаныуға һәм уның ҡанундарын үтәүгә яуаплы ҡарай. Ҡөрьән - "ышанам" тип әйтеп һәм уның закондарын үтәүсегә файҙа икәнлегенә һәм Аллаһ һүҙенән алыҫ булған кешегә ҡаршы дәлил булып тора. Ҡөрьән йәшәү нигеҙҙәрен аңлатып бирә һәм һүҙ көрәштерергә урын да ҡалдырмай. Иманлылар ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы һәм бәхәстәрҙе еңер өсөн Ҡөрьәнгә мөрәжәғәт итә, Изге Китап хәҡиҡәттең үлсәме булып тора. Һәр кем иртәнсәк үҙенең нәфсеһен һатырға һәм уға алмашҡа донъя йә әхирәт өсөн нимә булһа ла алырға йүнәлә. Кем көнө буйына үҙен тыя алған, үҙенең көнөн файҙалы үткәргән, ә кем ҡағиҙәләргә игтибарлы булмаған һәм маҡсатына төрлө юлдар менән ирешергә тырышҡан, үҙенең һәләкәтенә һәм бөлгөнлөгөнә аҙым эшләй. Лайыҡлы мосолман булыр һәм хәләл сиктәрендә үҙенде тотор өсөн һәр көнөндә Ҡөрьәндә әйтелеүселәр рәтендә булыу ниәте менән башларға кәрәк: "Аллаһ мөьминдәрҙең малдарын, йәндәрен йәннәт биреп һатып алды" (9/111).

**Был хәҙистә һанап үтелгән категориялар, тәү ҡарауҙа, бер-береһе менән бәйләнмәгән кеүек күренеүе бар, әммә улар бер-береһе менән үрелеп килә һәм бер бөтөндө тәшкил итә. Был тәһәрәт менән намаҙ, "Әлхәмдулиллаһи" менән Ҡөрьән, саҙаҡа менән "алып-һатыу" араһында яҡын бәйләнеш бар - быларҙың бөтәһен дә сабырлыҡ, түҙемлек менән бәйләргә мөмкин. Бәйғәмбәребеҙҙең (салаллаһу ғәләйһи сәләм) хәҙисе беҙгә үҙенең иманында, ғибәҙәтендә, зикерҙәрендә, саҙаҡаһында һәм "гүзәл сауҙа" итеүҙә мосолман моделе өлгөһөн күрһәтә.**

## УРАҘАҒА НИӘТ ҺӘМ ИФТАР ДОҒАҺЫ

### Сәхәр ашағандан һуң

**Ҡояш ҡалҡырҙан ике сәғәт алда сәхәр ашын ашап бөтөп, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ошондай ниәт ҡылына:**

***Бисмилләһир-рахманир-рахим.***
***Нәуәйту ән әсүмә саумә шәһри рамаҙәнә минәл-фәжри иләл-мәғриби халисәл-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр.***

**Мәғәнәһе:**
"Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн тип таң атҡандан башлап ҡояш байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнем. Аллаһ - Бөйөк".

### Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға

***Бисмилләһир-рахманир-рахим. Аллаһуммә ләкә сүмтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризҡикә әфтартү үә лисауми ғадим мин шәһри рамаҙәнә нәүәйтү фәғ-фирли мә ҡаддәмтү үә мә әххартү.***

**Мәғәнәһе:**
"Эй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом. Һиңә генә иман килтерҙем. Эштәремде тик үҙеңә генә тәүәккәлләйем. Һин биргән ризыҡ менән генә ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡап ҡына тороусы Аллаһ, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималы булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!"

## ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

| Август - Сентябрь | Сәхәр ашап бөткән ваҡыт | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу. Аҡшам намаҙы | Йәстү, тәрәүех намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21, йома | 05.03 | 05.33 | 14.30 | 20.05 | 21.35 | 23.35 |
| 22, шәмбе | 05.04 | 05.34 | 14.30 | 20.03 | 21.33 | 23.35 |
| 23, йәкшәмбе | 05.06 | 05.36 | 14.30 | 20.00 | 21.30 | 23.30 |
| 24, дүшәмбе | 05.08 | 05.38 | 14.30 | 19.58 | 21.28 | 23.30 |
| 25, шишәмбе | 05.10 | 05.40 | 14.30 | 19.56 | 21.26 | 23.30 |
| 26, шаршамбы | 05.12 | 05.42 | 14.30 | 19.53 | 21.23 | 23.30 |
| 27, кесе йома | 05.14 | 05.44 | 14.30 | 19.51 | 21.21 | 23.30 |
| 28, йома | 05.15 | 05.45 | 14.30 | 19.48 | 21.18 | 23.20 |
| 29, шәмбе | 05.17 | 05.47 | 14.30 | 19.46 | 21.16 | 23.20 |
| 30, йәкшәмбе | 05.19 | 05.49 | 14.30 | 19.44 | 21.14 | 23.15 |
| 31, дүшәмбе | 05.21 | 05.51 | 14.30 | 19.41 | 21.11 | 23.15 |
| 1, шишәмбе | 05.23 | 05.53 | 14.30 | 19.39 | 21.09 | 23.10 |
| 2, шаршамбы | 05.25 | 05.55 | 14.30 | 19.36 | 21.06 | 23.10 |
| 3, кесе йома | 05.27 | 05.57 | 14.30 | 19.34 | 21.04 | 23.05 |
| 4, йома | 05.28 | 05.58 | 14.30 | 19.31 | 21.01 | 23.05 |

ӘЙТӘГҮР!

# РАМАҘАН АЙЫ ЕТӘ - уразаға әҙербеҙме?

**Тик изгелектәр генә ҡыла торған ваҡыт - Рамаҙан айы яҡынлаша. Рамаҙан - Исламда айырыуса хөрмәт ителгән дүрт айҙың береһе. "Изге Рамаҙан айына әҙерһегеҙме?", "Был байрамды нисек ҡабул итәһегеҙ?" тигән һорауҙарға бер нисә уҡыусыбыҙҙан яуап алдыҡ:**

**Альбина ВӘЛИЕВА, өй хужабикәһе:** Ислам юлына баҫыуыма хәҙер өсөнсө йыл китте, әлхәмдулиллаһ. Ошо ваҡыт эсендә ураҙаны ҡалдырмай тоттом. Ураҙаның мәғәнәһен, файҙаһын аңлайым, шуға күрә лә ошо көндөң етеүен түҙемһеҙләнеп көтәм. "Ураҙа тотоғоҙ, сәләмәт булығыҙ", тиелә Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ хәҙисендә. Ысынлап та, үҙем ураҙа тотоп, һанап ҡарағанға күрә, ураҙа тотоу тән сәләмәтлегенә ифрат яҡшы тәьҫир итә икәнлеген әйтә алам. Ошо ай эсендә таҙарынып, еңеләйеп ҡалғандай булаһың. Тән генә лә түгел, йән дә таҙарына был изге айҙа, сөнки ай буйы тик дини кешеләр менән аралашаһың, һәр ваҡыт доға, зиҡер әйтәһең, өҫтәмә намаҙҙар уҡыйһың... Был, ысынлап та, йәнебеҙҙең, күңелебеҙҙең таҙарыныуына булышлыҡ итә. Әлеге ваҡытта йортобоҙҙо йүнәтеү, таҙартыу менән мәшғүлбеҙ. Изге айҙа таратырға иҫтәлекле бүләктәр алдыҡ. Ураҙа тотоусыларҙы быйыл тағы ла күберәк саҡырып, ауыҙ астырырға ниәтләгәнбеҙ. Сөнки ураҙа тотоусыны ауыҙ астырыу иң сауаплы ғәмәлдәрҙән һанала. Тағы ла Бәйғәмбәребеҙ: "Ураҙа - ҡалҡандыр", - тигән. Ысынлап та, беҙ был донъяла йәшәгән ваҡытта үҙебеҙҙе баҡыйлыҡҡа ла әҙерләргә тейешбеҙ. Беребеҙ ҙә был ергә мәңгелеккә килмәгән - шуны аңлайыҡ. Теге донъяла ошо Аллаһ ризалығы өсөн тотҡан ураҙаларыбыҙ тамуҡ утынан ҡалҡан булыр.

**Латифа менән Илгиз СӨЛӘЙМӘНОВТАР:** Изге айҙы быйыл айырыуса түҙемһеҙләнеп көтәбеҙ. Аллаһы Тәғәлә бәрәкәтен, әлхәмдулиллаһ, ебәреп кенә тора. Быйыл ҡоролоҡ йылы булһа ла, йәшелсә, емеш-еләктәребеҙ яҡшы уңды. Бер туған ҡустым менән ураҙаға тип һарыҡ һуйҙыҡ, иншалла, ураҙа тотоусыларҙы ифтар итергә саҡырырға уйлайбыҙ. Мәсет эргәбеҙҙә генә урынлашҡан, был беҙгә һәр ваҡыт мосолман ҡәрҙәштәребеҙ менән аралашып йәшәргә мөмкинлек бирә. Намаҙҙарҙы мәсеттә йәмәғәт менән уҡыу яңғыҙ уҡыуға ҡарағанда күпкә сауаплыраҡ. Рамаҙан айында өҫтәмә намаҙҙар ҙа уҡыу сөннәттер. Был намаҙҙарҙы мәсеттә мосолман ҡәрҙәштәребеҙ менән бергә уҡыһаҡ, күберәк сауаптарға ирешербеҙ, иншалла. Йыл һайын төрлө сәбәптәр арҡаһында ураҙа ҡазаға ҡалған осраҡтар булды. Быйыл бер көндө лә ҡалдырмай тоторға теләйбеҙ. Кеше гонаһһыҙ булмай, һәр кемебеҙҙең бәләкәй генә булһа ла гонаһы бар. Изге айҙа Аллаһы Тәғәлә булған гонаһтарыбыҙҙы ғәфү итһә ине. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тигән: "Кем булә өсөн түгел, ысын күңелдән ышанып ураҙа тотһа, уның элекке гонаһтары ла ярлыҡаныр". Изге айҙа гонаһтарыбыҙҙың ғәфү ителеүен, йөрәгебеҙ саф, уйҙарыбыҙ изге булыуын Аллаһы Тәғәләнән һорайыҡ. Доға мотлаҡ ҡабул ителә торған ваҡыттар була, уларҙың береһе ифтар - ауыҙ асыу мәле. Ураҙа тотҡан ваҡытта доға ҡылырға онотмағыҙ.

**Миңнур ИСЛАМОВА, пенсионер:** Инде нисәнсе йыл бер генә көнөн дә ҡалдырмайынса ураҙаларымды тотоп киләм. Шундай сауаплы ғәмәлде ни йөрәгең менән үтәмәйенсә ҡалдыраһың? Элек өләсәйем, әсәйемдәр ҙә ауыл ҡатындары менән ҡалдырмайынса ураҙаларын тотор, ифтар ваҡытында бер-береһенә ауыҙ асырға йөрөр ине. Алдан һәр береһе ниндәй көндә саҡырырын әйтеп ҡуйыр ине. Араларында Ҡөрьән уҡыусылар ҙа булды, ауыҙ асҡандан һуң мотлаҡ Ҡөрьән уҡып ала торғайнылар. Бала саҡтан шулар хәтерҙә ҡалған. Йәш саҡта ураҙа тотманым, дини белемем дә булманы, кәрәк икән тип уйламаным да. Олоғая килә, кеше асылына ҡайта, тигәндәре дөрөҫтөр, хәҙер Ислам динен өйрәнәм, фарыз ғәмәлдәрҙе үтәргә тырышам. Шуға күрә, Рамаҙан айын да түҙемһеҙләнеп көтәм. Өләсәйҙәрҙең йолаһын яңыртып, апай-инәйҙәрҙе ауыҙ асырға саҡырырмын, тип ниәтләнәм. Әле яҡындарыма, туғандарыма, күршеләремә ураҙаның мәғәнәһе, файҙаһы тураһында һөйләп йөрөйөм. Ураҙа тотоусылар ни тиклем күп булһа, шул тиклем яҡшыраҡ бит. Динебеҙгә ҡайтып, йолаларыбыҙҙы үтәп йәшәһәк, милләтебеҙ татыу, арабыҙҙа ғилемлеләр, аҡыллылар күп булыр, иншалла.

**Шулай итеп...**
**Шатлыҡлы ай, ураҙа айын имен-аман ғына үткәреп ебәрергә яҙһын! Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә: "Эй, иман килтергән бәндәләр, һеҙҙән элгәре йәшәгән кешеләргә фарыз булған кеүек, һеҙгә лә ураҙа тотоу фарыз", - тигән. Һәммәбеҙгә лә ураҙа тотоп, сауаптарына ирешергә яҙһын! Был донъяға бирелеп китмәйенсә, үҙен баҡыйлыҡҡа әҙерләү - һәр кемдең бурысы. Бәйғәмбәребеҙ ҡатыны Ғәйшәгә: "Йә, Ғәйшә, йәннәттең ҡапҡаларына шаҡып тор", - тигән. Ғәйшә: "Йә, Аллаһтың илсеһе, нисек мин йәннәт ҡапҡаларын шаҡып торайым һуң?" - тип һораған. "Ас тороуың, ниәтләп ураҙа тотоуың менән Йәннәт ишектәрен шаҡып торорһоң", - тигән Бәйғәмбәр. Йәннәт ишектәрен шаҡырға онотмағыҙ!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА әҙерләне**

*✓ Ғалимдар инкубатор цехында бер ҡыҙыҡ тәжрибә үткәреп ҡараған. Бер үк ваҡытта ике урында баҫылыусы 20-шәр йомортҡаның береһенең янына "пи-пип" сигналын биреп тороусы аппарат ҡуйғандар.*



# “ПИ-ПИП” әсә ҡарынындамы,

**Йыл һуҙымында ҡайһы айҙа тәрбиә тураһында иң күп һүҙҙәр яңғырай, фекерҙәр әйтелә тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, август айында үткән мәғариф өлкәһе хеҙмәткәрҙәре кәңәшмәләрендә. Әйтергә кәрәк, тап ошо айҙа алдағы уҡыу йылына старт алына, үткән йылдарға йомғаҡтар яһала, киләсәккә анығ маҡсаттар билдәләнә. Беҙҙең республикала, мәҫәлән, август конференцияларында ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа яңы һалынған мәктәптәр үҙ ишеген аса. Шуныһын да билдәләү мөһим: август кәңәшмәләрендә мәғариф системаһы хеҙмәткәрҙәре генә ҡатнашмай. Ил, республика етәкселәренән башлап, һәр район, ҡала, предприятие, ойошма етәкселәре, ғөмүмән, мәғарифҡа мөнәсәбәте булған һәм булмаған һәр тармаҡ вәкилдәре ҡатнаша был кәңәшмәләрҙә. Был хәл аңлашыла ла, сөнки илдең, республиканың, милләттең киләсәге белем һәм тәрбиә сығанағы булған мәктәптән башлана. Совет осоронан башлап хәҙер ҙә уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләре беҙҙә республика кимәлендә үткән иң оло форумдарҙан һанала. Гәзитебеҙҙең был һанындағы "Диалог" рубрикаһында тәрбиә мәсьәләләренә, ғөмүмән, милләтебеҙҙең киләсәгенә битараф булмаған ике нескә зат: Ейәнсура биләмә-ара китапханалар селтәре директоры Нәзирә КӘРИМОВА менән район китапханаһының хеҙмәтләндереү бүлеге мөдире Нурия ҠУНЫСБАЕВА ғаилә тәрбиәһе һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында фекер йөрөтә.**

**▸ Ғалимдар инкубатор цехында бер ҡыҙыҡ тәжрибә үткәреп ҡараған. Бер үк ваҡытта ике урында баҫылыусы 20-шәр йомортҡаның береһенең янына "пи-пип" сигналын биреп тороусы аппарат ҡуйғандар. Себештәр баҫылып сыҡҡансы, был сигнал яңғырап торған. Себештәр баҫылып сыҡҡас, йомғеһен бергә ҡушҡандар. Шунан һуң ситтә тағы ла теге "пи-пип" сигналын яңғыратҡандар. Нимә булған тиһегеҙ? Эйе, 40 себештең 20-һе теге сигнал яңғыраған ергә йүгереп барған, ҡалғандары ул сигналды бар тип тә белмәгән. Беҙ хәҙер ошо "пи-пип" сигналы ҡандан тапшырыла килгән тәрбиәнен үҙенә лә тиңләй алабыҙ. Ни өсөн тигәндә, ғалимдар тәрбиә ҡарында уҡ башлана, тиҙәр. Себештәр менән үткәрелгән тәжрибәнән сығып, һеҙгә шундай һорау: бала тәрбиәләгәндә "пи-пип" тәрбиә сигналы ҡасан яңғырай башларға тейеш? Бала әсә ҡарынында яралған сағындамы, донъяға тыуғасмы?**

**Н. КӘРИМОВА:** Көнбайыш дәүләттәр баҫмаларында донъя күргән бер мәғлүмәтте уҡығайным. Бер ҡыҙҙың тәүҙә осрашып йөрөгән егете ҡара тәнле африканлы булған да, аҙаҡтан ул аҡ тәнле кешегә кейәүгә сыҡҡан, әммә балаһы ҡара тәнле булып тыуған. Атай кеше балаһына ДНК анализы эшләтеп ҡараған, әммә уның үҙ балаһы икәнлегенә инанғас, тәүгеһенән дә нығыраҡ аптыраған. Был хәлде генетик яҡтан аңлатыу мөмкин булмаһа ла, баяғы "пи-пип" сигналы миҫалында аңлатып булалыр. Ни өсөн тигәндә, был ҡыҙҙа баяғы сигнал нәҡ тәүге егете менән осрашып йөрөгән саҡта яңғыраған, тип әйтергә була. Ирем Ғәзинур менән дуҫлашып йөрөгән саҡта уҡ ул, улыбыҙ тыуһа, Зиннур тип исем ҡушасаҡмын, тип әйтә торғайны. Ошо ябай ғына миҫалда ла тыуасаҡ балаға мөнәсәбәт сағыла, йәғни һеҙ әйткән "пи-пип" сигналы яңғырай. Бала тыумаҫ борон уҡ, беҙ уның исемен, тәбиғәтен, холоҡ-фиғелен күҙаллайбыҙ, һәм артабан баланы ошо ҡалыпҡа яраҡлаштырырға тырышабыҙ. Күп тәрбиә хаталары, бәлки, ошонан да киләләр.

Беҙҙең заманда тәүге урында эш, шунан һуң ғына ғаилә һәм балалар торҙо. Шунлыҡтан йәштәр араһында тыуасаҡ балаға етди ҡараш бик үк күҙәтелмәй торғайны, тәүге баланы ла йәшлек мәлебеҙгә ҡамасаулаған артыҡ мәшәҡәт тип кенә ҡарағанбыҙҙыр. Киноларға, кисәләргә йөрөгә, йәштәштәр менән аралашҡы килә, ә бында бала менән ултырырға кәрәк. Баланың ҡәҙерен, уны бағыуҙың тәмен икенсе-өсөнсө балаң тыуғас ҡына аңлай башлайһың. Америкала, Европала кешенең утыҙға еткәс кенә ғаилә ҡорорға тырышыуын, бәлки, ошо сәбәп менән дә аңлатырға булалыр. Минеңсә, кеше ныҡлап донъяға арҡа терәгәс кенә бала яраллтырға тейеш. Сөнки бала тыуған ваҡытта атай менән әсәй кеше тормошҡа әҙер булмай сыға һәм был хәл баланың формалашыуында сағылыш таба. Шуға ла мәктәптә факультатив рәүештә булһа ла ғаилә ҡороу, ир менән ҡатын мөнәсәбәте, бала тәрбиәләү хаҡында дәрестәр кәрәктер ул.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Ысынлап та, мин Нәзирә Фәтхислам ҡыҙы менән киләшәм, тыуасаҡ балаларына тәрбиә сигналы булырлыҡ "пи-пип" тауышы егет менән ҡыҙ танышып йөрөгән саҡта уҡ яңғырай башларға тейеш. Әммә тән тартылыуы менән йән тартылыуы буталған был осорҙа буласаҡ йәш ир менән йәш ҡатын атай-әсәй булырға әҙер булмай сыға. Кемгә нисектер, беҙ тәүге балабыҙ тыуғас та уҡ атай-әсәй булырға әҙер инек кеүек. Ирем Мәҙәрис өйләнешмәҫ элек уҡ тәүге балабыҙ малай буласаҡ, уның исеме Владик (хәҙер Вәлиулла) тине. Мин улыбыҙ Вәлиулла менән тыумаҫ борон уҡ һөйләшә торғайным. Ҡыш көнө эшкә китеп барам, улыма: "Улым, бына мин эшкә китеп барам, һин тыуасаҡ донъя һәм тәбиғәт шул тиклем матур", - тип, ул тыуасаҡ донъяның матурлығы хаҡында бәйән итәм. Ситтән мине күреп ишеткән кеше был хәлде бик сәйер күренеш итеп күргәндер инде. Бер мәл шулай эшкә китеп барғанда тайып ҡоланым һәм ҡорһағымдағы улымдан: "Улым, ғәфү ит, абайламай килеп, тайып ҡоланым, саҡ һине имгәтмәнем, ярай, бынан һуң һине ҡарап йөрөрмөн", - тип унан гәфү үтендем. Тыуғас та, уның менән диалогыбыҙ дауам итте. Әллә тәүге бала булғанға, нисектер, яҡыныраҡ ул миңә. Мин - уның, ул минең нимә уйлауыбыҙҙы, нимә тип әйтеребеҙҙе белеп торабыҙ. Һуңынан бер китаптан был хаҡта уҡыным, баҡтиһәң, әсә үҙенең тыуасаҡ балаһы менән һөйләшергә тейеш. Вәлиулла йомшаҡ күңелле.

Ә унан өс йәшкә кесе булған ҡыҙыбыҙ Лилиә менән мөнәсәбәтебеҙ башҡасараҡ, уға әҙерлегем әҙерәк булдымы икән - әйтә алмайым.



**▸ Чечен халҡында "Үҙ балаңа дошман бул, ул үҫеп еткәс, һинең иң яҡын дуҫыңа әүерелер", тигән мәҡәл-әйтем бар. Һеҙ был мәҡәл-әйтемдә нисек аңлайһығыҙ?**

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Япондар балаларын 5 йәшкә тиклем бөтөнләй тыймай. Нимә һорайҙар, шуны бирәләр, балалары нимә теләһә, шуны эшләйҙәр. Ә беҙ балаларыбыҙҙы тыуғандан алып тыя башлайбыҙ һәм улар үҫкән һайын, тыйыуҙар арта бара. Баҙнатһыҙлыҡ, үҙенде тулыһынса бойомға ашыра алмау кеүек сифаттарыбыҙ ошо тыйыуҙарҙан киләлер, тип уйлайым. "Үҙ балаңа дошман бул", тигән һүҙбәйләнеш уға талапсан булыуҙы аңлаталыр. Шул уҡ ваҡытта һәр ваҡыт тыйыуҙың да һөҙөмтәләре билдәле. Минеңсә, бында алтын урталыҡты табыу мөһимдер. Балалар өлкәндәрҙең тыйып әйткән һүҙҙәрен бер ваҡытта ла яратмай. Һин уны тыйып ниндәйҙер һүҙ әйтәһең икән, тимәк, балаң менән "дошманлашаһың" тигән һүҙ.

**Н. КӘРИМОВА:** Рәсәй менталитеты буйынса беҙ булғандарҙы инҡар итеп, өр-яңынан башларға яратабыҙ. Тәрбиә мәсьәләһендә лә бер сиктән икенсе сиккә һуғылған осраҡтар күп. Мәҫәлән, урыҫтар балаларын тыймай, шуға күрә уларҙың балаларында төрлө комплекстар, баҙнатһыҙлыҡ, оялсанлыҡ тойғолары юҡ, улар тормошта күпкә өлгәшә, тип күреп, бер мәл беҙ ҙә үҙебеҙҙең балаларҙы тыймай башланыҡ. Тәрбиә буйынса донъяның төрлө авторҙарының китаптарын уҡып, уларҙан да ниндәйҙер өлгө алып, балаларыбыҙҙы шул ҡалыптарға индергәнебеҙҙе һизмәй ҙә ҡалдыҡ. Иң мөһиме: атай-олатайҙарыбыҙҙың тәрбиә алымдарынан, халыҡ педагогикаһынан баш тарттыҡ. Һөҙөмтәлә бер йүнәлештәге анығ тәрбиә талаптары юҡҡа сыҡты. Шунлыҡтан балаларҙы дингә лә ылыҡтырырға тырышабыҙ, пионер эшен дә тергеҙергә ынтылабыҙ, профйүнәлеш буйынса ла уҡытыу башланды. "У семи нянек дитя без глазу" тигән кеүек, ете төрлө тәрбиәнең һөҙөмтәһе бик юҡ кимәлендә.

Япондарға килгәндә, улар 5 йәштән һуң балаларын бик ҡаты контроль аҫтына ала, иң мөһиме, уларҙы хеҙмәт менән тәрбиәләй башлай. Ә беҙҙең балалар 5 йәштә лә, 10 йәштә лә, 15 йәштә лә физик эштә ҡатнашырға ашыҡмай. Беҙ уларға эш ҡушмайбыҙ, йәнәһе, ошо юл менән уларҙы яратыуыбыҙҙы белдерәбеҙ, һөҙөмтәлә үҙебеҙгә "дошман" тәрбиәләйбеҙ. Минеңсә, чечен тәрбиәһендә ошоноң нәҡ киреһе яталыр. Әгәр ҙә балаңды үҙ иркенә ҡуйһаң, унан булдыҡлы кеше сығыуы бик шикле.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Нәзирә Фәтхислам ҡыҙының, талап ҡаты булырға тейеш, тигәне менән әҙ генә ризалашмайым. Ысынлап та, талап ҡаты булырға, әммә уның да самаһы булырға тейештер. Сөнки үҙ балаңа күрһәткән ҡатылығың һуңынан үҙеңә лә ҡатылыҡ булып әйләнеп ҡайтыуы мөмкин. "Бумеранг законы" тиҙәр был күренеште.

**▸ Һәр бер ата-әсә үҙ балаһын, рәхәт йәшәһен, ауыр эш башҡармаһын, мотлаҡ юғары белем алһын, тип теләй һәм шуға ынтыла. Бынан тыш, беҙҙең башҡорт ата-әсәһе үҙенең балаһын сәхнәлә күрергә тырыша, быны оло мәртәбәгә һанай. Ғөмүмән, ата-әсәләр үҙҙәренең бойомға ашмаған хыял-маҡсаттарын балаһы аша тормошҡа ашырырға тырыша. Немецтар, мәҫәлән, бала тыуыпүҫеп, белем алып, үҙаллы тормош юлына баҫҡанға тиклем сығымдарҙы яҙып бара һәм аҙаҡ бала был сумманы ата-әсәһенә мотлаҡ рәүештә ҡайтарырға тейеш. Мотлаҡ үтәлергә тейеш булған был шарт баланы үҙ алдына маҡсат ҡуйып, дөрөҫ йәшәргә мәжбүр иткәнен аңлауы ауыр түгел. Ә беҙҙең ата-әсәләр хатта пенсияһын да балаһына бирә. Был дөрөҫмө?**

**Н. КӘРИМОВА:** Ысынлап та, немецтар ошо юл менән балаларҙың да ата-әсә алдында булған бурысын аңғартҡан һәм тәрбиәнең мөһим бер мәсьәләһен хәл иткән. Ул аҡса ҡайтарыламы-юҡмы, быныһы бер мәсьәлә, әммә был шарт үтәлһен өсөн кешенән оло фиҙаҡәрлек талап ителгәне көн кеүек асыҡ.

Элек ата-әсәгә бурысты беҙҙә төпсөк бала бер үҙе ҡайтарған. Йола буйынса, ул ғаиләһе менән ата-әсәһе янында йәшәргә тейеш булған.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Хәҙерге балалар, хәҙерге йәштәр беҙҙең һымаҡ түгел, сөнки хәҙерге заман да башҡа төрлө. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең халыҡ педагогикаһына таянып, уларҙы немецтарҙағы һымаҡ ошондай күркәм йолалар, өлгөләр менән байытып, заманса тәрбиә программаһы тыуҙырырға тейешбеҙҙер. Тәрбиә тик боронғоса ғына ла булырға, тик заманса ғына ла булырға тейеш түгелдер. Әлеге лә баяғы, алтын урталыҡ мәсьәләһенә килеп сығабыҙ инде.

Дөрөҫ, беҙ үҙебеҙҙең балаларҙан үҙебеҙҙең бойомға ашмаған хыялдарыбыҙҙы тормошҡа ашырыуын, образлы әйткәндә, сәхнәлә лә күрергә теләйбеҙ. Шуғалырмы, Вәлиулла улымды бәләкәй сағынан бейеү түңәрәгенә бирҙем. Ике йыл йөрөнө лә ташланы. Шунан һуң мин уны шул уҡ сәнғәт мәктәбенә һүрәт төшөрөү бүлегенә бирҙем. Унынһын уҡып бөттө. Ҙур әртис булып китмәнә лә, кейәү булып, туйында бейей белерлек ул. Һүрәт төшөрөүгә йөрөү ҙә әрҙәм итте, ул минең кеүек мәҙәниәткә яҡыныраҡ юлды һайланы, әле Ырымбурҙа дизайнерға уҡып йөрөй. Ә бына Лилиә ҡыҙым һаман да үҙенең кем булып китерен анығ ҡына әйтә алмай. Уны ла бейеүгә биргәйнем, осшатманы, ташланы. "Бейеүсе булып китмәнәм дә, бейей белеүең зыянға булмаҫ, кәүҙәң һомғол булыр", тигәйнем, ул: "Әсәй, нишләп һин беҙҙе сәхнәлә күрергә теләгән өсөн генә мин үҙемә оҡшамаған сәхнәгә менергә тейешмен әле?", - тип яуап ҡайтарҙы. Ҡыҙым ошолай ябай ғына итеп миңә ҙур нәмәне аңлатып бирҙе. Ысынлап та, мин шуға тиклем йүнле кешеләрҙең балалары күрмәлекле, сәхнәлә йөрөй, әртис, тип яны-

***Рәсәй менталитеты буйынса беҙ булғандарҙы инҡар итеп, өр-яңынан башларға яратабыҙ. Тәрбиә мәсьәләһендә лә бер сиктән икенсе сиккә һуғылған осраҡтар күп. Мәҫәлән, урыҫтар балаларын тыймай, шуға күрә уларҙың балаларында төрлө комплекстар, баҙнатһыҙлыҡ, оялсанлыҡ тойғолары юҡ, улар тормошта күпкә өлгәшә, тип күреп, бер мәл беҙ ҙә үҙебеҙҙең балаларҙы тыймай башланыҡ.***

# КАСАН БАШЛАНА,

## әллә донъяға тыуғасмы?

лыш уйлап йөрөгән булғанмын икән.

**Н. КӘРИМОВА:** Һәр ата-әсәнең үҙ балаһын сәхнәлә күрергә теләүендә үҙ балаһы менән ғорурланғыһы килеүе сәбәбен дә күрергә була. Ата-әсә өсөн иң ҙур күңел ҡайтыуы балаларына һалынған өмөттөң аҡланмауы. Шуның өсөн дә балаларындың иңенә улар күтәрә алмаҫлыҡ йөктө һалмаҫҡа кәрәк. Сөнки ул был йөктө күтәрә алмаһа, уларҙан бигерәк, үҙенә ҡыйын була. Был хәл, бигерәк тә һәр ата-әсәнең үҙ балаһына мотлаҡ рәүештә юғары белем бирергә ынтылыуында ла сағыла. Һин бар көсөңдө, аҡсаңды балаңа мотлаҡ рәүештә юғары белем бирер өсөн йүнәлтәһең, кем белә, бәлки, балаң һинең ябай балта оҫтаһы, тракторсы булып та бәхетле йәшәр өсөн яралтылғандыр. Был һүҙҙәрҙе юҡҡа ғына әйтмәйем мин: беҙ әле бына үҙебеҙҙең Исәнғол ауылының көтөүенә көтөүсе таба алмайбыҙ. Беҙҙең ауылда ғына түгел, тирә-яҡ ауылдарҙың күбеһендә юҡ көтөүсе. Былар барыһы ла ғаиләлә һәм мәктәптә һәр һөнәргә хөрмәт тәрбиәләмәүҙән килә.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** 25 майҙа "Юлдаш" радиоһы аша мәктәпте тамамлаусыларға арналған тапшырыу бара. Унда һәр уҡыусы, һәр ата әсә, һәр уҡыусы бер генә теләкте ҡабатлай: "Алла бойорһа, дәүләт имтихандарын тапшырып, һәр беребеҙгә юғары уҡыу йортона инергә яҙһын". Шунда башҡа уй килде: барыһы ла юғары уҡыу йортона инеп бөтһә, ауылда кем эшләргә тейеш һуң? Ә кемдәр техникумдарға, училищеларға инергә тейеш һуң?

**▸ Кешенең үҙ-үҙен тәрбиәләүе нисә йәшендә башлана, тип уйлайһығыҙ?**

**Н. КӘРИМОВА:** Аҡыл ултырғастыр. Ә аҡыл ҡасан ултыра һуң? Иң тәүҙә утыҙ йәштә тип уйлай торғайным. Үҙем утыҙға килеп еткәс, был мөҙҙәт ҡырҡ йәшкә күсте. Ҡырҡҡа еткәс, үҙемде һаман да йәш, дыуамал тоям. Һаман да аңлы рәүештә хаталар яһайым, ниндәйҙер авантюраларға барам. Мөҙҙәт иллегә күсте. Бына иллем дә етте, ә һаман да аҡылға ултырғы килмәй.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Минеңсә, үҙтәрбиә һинә тормош тарафынан бирелгән һынауҙарға бәйлелер. Һынауҙарҙы, ауырлыҡтарҙы үтә-үтә, үҙ хаталарын төҙәтә-төҙәтә, кеше үҙ-үҙен тәрбиәләй башлай. Тормошта һәр кем үҙен хаҡлы тип иҫәпләй, әммә күпмелер ваҡыттан һуң хаҡиҡәтең ялған булып сыға. Аңлы рәүештә үҙенең бер яһаған хатаһын ҡабатлаған кешене үҙ-үҙен тәрбиәләүсе тип тә әйтеп булмайҙыр.

**Н. КӘРИМОВА:** Кеше ғүмеренең аҙағына тиклем хаталана, хаталарын төҙәтә һәм ғүмер буйы үҙ-үҙен тәрбиәләй. Аҡыл кешегә фанилыҡ менән баҡыйлыҡ зарурлығын төйоп, нәфсеһе үлеп, теге донъяға үҙе менән бер нәмә лә алып китә алмаясағын аңлағас ҡына ултыралыр ул. Ә донъя булғанда нәфсе һәр ваҡыт бар, ҡайһы саҡ маҡсат та уның менән билдәләнә. Был хәл ата-әсәнең үҙ балаһын һәр ерҙә беренсе булыуын, бөтә түңәрәктәрҙә ҡатнашыуын, әртис итеп сәхнәлә күрергә теләүҙә, бигерәк тә мотлаҡ рәүештә юғары белем бирергә ынтылыуында сағыла. Унан һуң, алтмышта ла аҡыл ултырмағандар, утыҙҙа ла ил ағаһы булырлыҡтар бар.

**▸ Тиҙлек, ара, ваҡыт төшөнсәләре юҡҡа сыҡҡан ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ. Хәҙер беҙ тиҙ генә Ер шарының бер осонан икенсе осона барып етә алабыҙ, бер-беребеҙҙе күрә-һөйләшә алабыҙ. Кешенең үҙ алдына маҡсат ҡуйып йәшәү зарурлығы юҡҡа сыға бара, сөнки әҙер стандарттар тәҡдим ителә. Ҡыҫҡаһы, шәхестең йөҙө юғала, бер төрлө роботтар яһау системаһы эшләй башланы. Былар барыһы ла беҙҙең балаларҙа сағылыш табасаҡ, йәғни глобалләшеү асылы донъяның бар кешеләрен үҙ асылынан йолҡоп алып, бер стандартҡа ҡыуа. Ошо стандарттан алып ҡалыр өсөн беҙгә бала тыймаҫ борон ниндәй мәғәнәләге "пи-пип" сигналдары кәрәк тип уйлайһығыҙ? Ул халыҡ педагогикаһымы? Улай булһа, унда тыйыуҙар күп, тыйыуҙар ниндәйҙер кимәлдә комплекстар барлыҡҡа килтерә. Ғөмүмән, йәш быуынды һоро масса булыуҙан нисек алып ҡалырға була? Был мөмкинме?**

**Н. КӘРИМОВА:** Беҙ элек күберәк мәктәпкә өмөт бағлай инек, әммә мәғарифта барған реформалар, дөрөҫөн әйткәндә, уҡытыусыларҙы ҡағыҙға, отчет төҙөүгә күмде. Етмәһә, уҡытыусыларҙың хеҙмәтен уҡыусыларҙың һанына ҡарап финанслау мәсьәләһе лә уларҙың кәрен ҡайтарҙы. Мәктәп, асылда, балаға йүнәлеш, махсус белем бирә, әммә бала шәхес булараҡ барыбер ғаилә мөхитендә формалаша. Шул уҡ ваҡытта баланы үҙ милли асылында тәрбиәләргә айырым ғаиләнең дә көсө етмәүе бар. Ата-әсәләрҙең дә төрлөһө, төрлө мөмкинлектәргә эйәләре бар. Был осраҡта нишләргә һуң? Ошо урында халҡыбыҙҙың борон-борондан килгән ырыу-зат-нәҫел институттары иҫкә төшә. Тимәк, туғандар, бер зат, нәҫел, ара кешеләре берләшергә һәм балаларҙы бергәләп тәрбиәләргә бурыслы был осраҡта. Минеңсә, милләтебеҙҙең ошо потенциалы әлегәсә бөтөнләй файҙаланылмай тиерлек. Шуға күрә, бала тәрбиәләүҙә теләһә ниндәй дәүләт институты эшләүенән туҡтап ҡалған осраҡта ла барлыҡ йөктө ғаилә үҙ иңенә алырға тейеш. Милләттең йөҙөн тотош халыҡ түгел, уның айырым шәхестәре билдәләй, тигән принципты иҫкә алғанда, беҙҙең киләсәгебеҙ ҙә абруйлы, көслө шәхестәребеҙ намыҫында буласаҡ. Беҙҙең алда ана шундай шәхестәрҙе тәрбиәләү бурысы тора.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Баланың күңеленә үҙ милләтенә, йолаларына, халҡының тарихына, сәнғәтенә, мәҙәниәтенә мөхәббәт тойғоһо һалып ҡалдырырға кәрәктер, минеңсә. Әгәр ҙә уларҙың күңелендә был тойғо йәшәһә, улар милләттең киләсәген тәьмин итерлек сараларҙы үҙҙәре табыр ине, тием. Күңелендә мөхәббәте булған кешенең намыҫы ла була. "Пи-пип"ҡа мин тағы ла сама тигән төшөнсәне һалыр инем. Нәфсене тыйыу тигән төшөнсә лә бар. Ҡайһы берәүҙәр шулай уйлай: "Мин дә үләм, бай ҙа үлә. Ул да, мин дә теге донъяға бер нәмәбеҙҙе лә алып китә алмайбыҙ..." Бик дөрөҫ һүҙҙәр, әммә башҡалар менән үҙеңде тиң тойор өсөн, балаларыңды аяҡҡа баҫтырыр өсөн күпмелер дәрәжәлә йәшәр өсөн етерлек кимәлдә байлығы ла кәрәк. Ә инде барыһынан бөтөнләй баш тартыуҙы тик хуш күңеллелек йә ялҡаулыҡ тип кенә атарға булалыр. Әгәр ҙә һинең кейергә кейемең, ашарға ризығың, йәшәргә урының, йөрөргә транспортың бар икән, унан артығы, күршенеке менән сағыштырып, юҡһыныу тойғоһо нәфсе тип атала ла инде. Шул уҡ ваҡытта нәфсе лә кәрәк, әммә нәфсенең дә самаһы булһын.

Рухи ҡиммәттәр ҙә балаларға һалынырға тейеш. Унда ла сама һәм сикте белеү кәрәктер. Бар беҙҙең рухи ҡиммәттәр менән генә йәшәүсе заттарыбыҙ. Улар балаларын да, донъяһын да онота, бер йүнәлештә генә һуҡтырып алып китеп йәшәй. Улар энтузиастарҙан да аштырып ебәрә, ни Аллаға, ни муллаға юҡ, тигәндәй, аскеттарса йәшәү рәүеше алып бара. Был нормаль күренеш түгел, минеңсә. Кеше тәбиғәтенә максимализм хас күренеш, әммә был кешенең үҫмер, йәш мәленә генә хас күренеш булып ҡалһын.

**Н. КӘРИМОВА:** Иң ҙур гонаһ -кешенең йөҙөн йыртыу, тип әйтә торғайны әсәйем. Хәҙер инде кешенең йөҙөн йыртыу иң оло мәртәбәлелек, батырлыҡ һанала. Хәҙерге көндә кешенең йөҙөн йыртыу, баҡтырып биткә бәреп әйтеү, нисек кенә булһа ла үҙеңдең һүҙеңде өҫкә сығарыу мәртәбәлек һанала. Кешенең тышҡы матурлығына ҡарағанда, эске донъяһы мөһимерәк, баҫалҡылыҡ кешене биҙәй һәм башҡа шундай принциптарҙа тәрбиәләнгән беҙҙең быуын матди ҡиммәттәрҙе юғары ҡуйған, лидер булырға ынтылған, нимә уйлаһа, шуны әйткән балалар үҫтерәбеҙ. Килешәбеҙме-килешмәйбеҙме, ҡабул итәбеҙме-ҡабул итмәйбеҙме - бөгөнгө балалар икенсе, улар үҙ заманының емештәре. Минең бер теләгем бар: төрлө тәрбиә йүнәлештәрендә, сараларында миһырбанлыҡ, намыҫ, яуаплылыҡ тигән төшөнсәләр иң мөһимдәре булып ҡалһын ине.



**▸ Беҙҙең ҡайһы сифаттарыбыҙ үҙебеҙҙең күҙлектән күркәм һаналһа ла, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙә, милләтебеҙ үҫеше өсөн кире һөҙөмтә бирә, тип уйлайһығыҙ?**

**Н. КӘРИМОВА:** Баҫалҡылыҡ булып күренгән баҙнатһыҙлыҡ, ҡыйыуһыҙлыҡ, матди байлыҡҡа битарафлыҡ. Иң тәүге планға рухты ҡуйыуыбыҙ һәйбәт, әммә кеше хәләл көс менән тупланған етеш тормошҡа ынтылырға тейеш. Аҡса тураһында һөйләргә оялабыҙ, матди байлыҡты күралмайбыҙ, шуға күрә аҡса ла йоҡмай. Ҡайһы берәүҙәребеҙ ҡоро ғорурлыҡ менән генә йәшәй, ҡупырайыуға оҡшаған ғорурлыҡтың был сифаты ыштанһыҙлыҡ тип тә атала. Ҡайһы берәүҙәр эше һәм аҡсаһы булмауын, ялҡаулығын урлаша, кеше таларға белмәүе менән аҡларға һәм ҡапларға тырыша. Ундайҙарға шулай тип әйтке килә: урлаша белмәһәң дә, һис юғы, эшләй бел. Тағы бер сифат тураһында әйтергә кәрәктер: үҙебеҙгә, яҡындарыбыҙға, милләтебеҙгә һәм милләттәштәребеҙгә һүҙ ташланған саҡта, күкрәк менән ҡаплап яҡлап сығырға кәрәк.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Беҙгә "юҡ", тип әйтәләр икән, ишекте шарт ябып сығып китәбеҙ ҙә, ҡабат әйләнеп ҡайта белмәйбеҙ. Шунан һуң бер миҙгел өсөн генә әйтелгән һүҙҙе, фекерҙе тормошобоҙҙоң девизына, ҡәтғи ҡарарына әйләндерергә лә әҙер торабыҙ. Былар барыһы ла яраҡлаша белмәүебеҙ тураһында һөйләй. Бер яҡтан, был һәйбәт ул, йәғни үҙ асылыбыҙға хыянат итмәү, әммә хәҙерге заман өсөн яраҡлаша белмәү кире сифат һанала.

**▸ Мөхәббәт тойғоһона мөнәсәбәтегеҙ нисек? Әлбиттә, бында һүҙ ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт тураһында...**

**Н. КӘРИМОВА:** Мөхәббәт-һәр нәмәнең башланғысы, тиһәм, шағирҙәр һүҙен ҡабатлау булыр. Мөхәббәтһеҙ ғаилә ҡороу- ҡомдан өй төҙөү кеүек. Бала ла мөхәббәттән генә яралырға тейеш. Әммә ул тойғо ғүмерлеккә бирелгән, китмәҫкә килгән тойғо түгел. Ир менән ҡатындың ғаиләләге мөхәббәт мөҙҙәте үтә ҡыҫҡа булыуы ла мөмкин. Шул саҡта мөхәббәт хисен бер-береңә булған хөрмәт, ихтирам, ҡәҙерләү, кисерә белеү алмаштыра. Ир менән ҡатындың ғаиләләге мөхәббәт мөҙҙәте үтә ҡыҫҡа булыуы бик күп факторҙарға бәйле. Иң тәүҙә ир менән ҡатындың ҡапма-ҡаршы енес булараҡ ярһыулығы кәмеүгә бәйле, был хис тоноҡлана төшә. Ошо ваҡыт мөхәббәт хисе бер-береңә хөрмәткә, бер-береңде кисерә белеүгә күсә. Бындай сифаттар, әлбиттә, кешенең тәбиғәтенә һәм тәрбиәһенә, йәғни "пи-пип"кә һалынған булырға тейештер. Беҙ мөхәббәтте тәбиғәт тарафынан бирелгән тойғо тип ышанһаҡ та, ул да шул уҡ тәрбиәләнә торған тойғо бит.

**Н. ҠУНЫСБАЕВА:** Мин мөхәббәтте йән һәм тән тартылыуы булғанда ғына ысын хискә әүереләләр, тип уйлайым. Йәшерәк саҡта күберәк тән тартыла, олоғая килә уның урынын йән яулай баралыр.

*Япондар балаларын 5 йәшкә тиклем бөтөнләй тыймай. Ә беҙ балаларыбыҙҙы тыуғандан алып тыя башлайбыҙ һәм улар үҫкән һайын, тыйыуҙар арта бара. Баҙнатһыҙлыҡ, үҙеңде тулыһынса бойомға ашыра алмау кеүек сифаттарыбыҙ ошо тыйыуҙарҙан киләлер, тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта һәр ваҡыт тыйыуҙың да һөҙөмтәләре билдәле. Минеңсә, бында алтын урталыҡты табыу мөһимдер.*

**Шулай итеп:**

**Нәзирә Фәтхислам ҡыҙы менән Нурия Мохтар ҡыҙының күп йәһәттән фекерҙәре тура килә. Миңә уларҙың тәрбиә мәсьәләләренә ҡарата үҙенсәлекле фекерҙәре булыуы оҡшаны. Уларҙың үҙ балаларын тәрбиәләү һөҙөмтәһенең тағы ла бер уртаҡ яғы бар икән. Нурия Мохтар ҡыҙының улы Вәлиулла Ырымбур архитектура-төҙөлөш университетында уҡып йөрөгән еренән үҙ теләге менән әрме сафына киткән. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, уҡыуын дауам итмәксе. Нәзирә Фәтхислам ҡыҙының кинйә улы Айнур ҙа Ырымбурҙа колледж тамамлаған, ул да быйыл көҙ әрмегә китергә теләк белдергән. Илһөйәрлек, патриотлыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙең бына тигән миҫалдары был егеттәр һәм уларҙың ата-әсәләре.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**




Ул ташты ситенән күтәреп ҡарамаҡсы итте. Урынанан ҡымшанманы ла. Быны тәүҙә ҡалҡытып, һуңынан элекке урынына тап килерлек итеп кире һалыр өсөн, һис юғында, бәләкәйерәк айыу көсө кәрәк. Айбулат яҡындағы кәбән кәртәһенән һайғау һурып килтерҙе. Һайғауҙың йыуан осон таш аҫтына тығып ҡайырыуға, уныһы ҡыбырлағандай итте. Ташты әкрен-әкрен генә шылдырҙы. Күп тә үтмәҫтән, өңөрәйеп, ҡараңғы соҡор ауыҙы күренде. Булыша торғас, ауыҙ буйтым кеше һыймалы булып асылды. Туп-тура аҫҡа йүнәлгән соҡорға байтаҡ ваҡыт өңшәйеп торған Айбулат яҡынараҡ килеп ҡолаҡ һалды: көҙөкләнерлек тауыш-тын ишетелмәй. Аяҡ аҫтында буталған этен ҡыуып ебәрҙе: кем йәки нимә йәшәгәне әлегә билдәһеҙ өңгә төшөп китә күрмәһен. Булмаҫ та тимә ул ауандан.

Бында тәнеңә генә түгел, йәнеңә лә хәүеф янай төҫлө. Артабан ни эшләргә лә белмәгән Айбулат кәртәне соҡор ауыҙына тығып болғаштырҙы. Тауыш-тын да, ниндәйҙер хәрәкәт тә юҡ. Тәрәнлеге өс-дүрт метр самаһы булыр соҡорға яҡын уҡ килеп баҫты: аҫта әүәлгесә шомло тынлыҡ. Башына йүнле фекер килмәгән һунарсы теҙләнә төштө лә өң ауыҙына башын эйә биргән көйө тыңлап торҙо. Ниһайәт, ул ярты кәүҙәһе менән эйелде. Ер аҫты ҡараңғылығында нимә лә булһа шәйләргә, йәиһә, ишетергә тырышты һәм... елкәһенән эләктергән ғәйрәтле ҡыҫҡыстың ҡот осҡос көс менән аҫҡа һөйрәп төшөргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ҡурҡыу түгел, хатта нимәлер уйларға ла өлгөрмәне. Ҡайҙалыр осоп барғаны ғына хәтеренә айырым-асыҡ уйылып өлгөрҙө лә, соңҡаһы менән ҡаты бәрелеүҙән һушын юйып, упҡын йотто ла ҡуйҙы.

***

Бер аҙҙан иҫенә килгән Аҫылбаев көслөк менән күҙҙәрен асмаҡсы итте, ләкин аса алманы. Нимә һуң шул тиклем тота уларҙы? Һәрмәштереп ҡарай - бармаҡтары йәбешкәкләнә. Был ни ғәләмәт? Ул ҡайҙа ята? Ни сәбәптән бер нәмә лә күрмәй? Бына-бына ярылып китер һымаҡ соңҡаһы сатнап һыҙлаған егеттең башы яман шаулай, ҡолаҡтары эсендә нимәлер өҙлөкһөҙ геүләп тик тора. Әлеге хәлдә лә ул, бар зиһенен туплап, үҙе менән ни булғанын хәтерләргә тырыша, хәтерләй алмай. Ята торғас, әкрен-әкрен генә булһа ла асылына ҡайта, мейеһен ҡаплап торған пәрҙә асыла башлай. Шул рәүешле ҡайҙа һәм ни эшләп ятыуы шөйлә хәтеренә төшә: уны бит, бешмәгән эҙәрмәнде, ниндәйҙер соҡорға йыға һуҡтылар...

Көс-хәл менән тороп ултырған Айбулат күтәрелеп өҫкә ҡараны, муйыны ҡапыл ауыртыуҙан "ыһ" итеп ҡуйҙы. Ни өсөн шулай күҙгә төртһәң күренмәҫлек дөм-ҡараңғы һуң? Ҡояш әле байымағандыр бит? Шунда уның оҙайлы яна торған махсус шырпыһы барлығы хәтеренә төштө. Тыңларға теләмәй туҡтауһыҙ ҡалтыранған бармаҡтары менән шырпыларҙын берәүһен көскә килтереп сығарҙы ла һыҙып ебәреүгә, соҡор эсендәге һаҫыҡты еңеп, көкөрт еҫе таралды. Әммә Аҫылбаев аңлайышһыҙ ҡыҙыл шәфәҡтән башҡа нәмә шәйләй алманы. Йәнә күҙҙәрен һәрмәне. Улары ҡанға ҡатып йәбешкән дә, шунлыҡтан асылмай икән. Мәшәҡәтләнә торғас, асты. Тағы шырпы һыҙҙы һәм, өмөтләнеп, өҫкә, бая үҙе осоп төшкән урынға ҡараны. Бейек кенә күренә. Зарар юҡ, тырпайышып торған таш остарына йәбешеп үрмәләргә була. Шулай итте лә. Ләкин... сыға торған урын таш менән ҡаплап ҡуйылған ине. Бая уны шылдырып асҡайны ла баһаң: Айбулаттың йөрәге жыу итеп ҡалды. Ниндәйҙер таш моҡсайға үҙ ирке менән килеп ҡапҡан түгелме һуң ул?!

Һунар шырпыһы ярты минут самаһы янды ла, таш моҡсай эсен йәнә ҡараңғылыҡҡа сумырып, әкрен генә һүнде. Үҙенең аяныслы хәлен аңлай башлаған Айбулат, көс туплағандай, салҡан ятты. Уның хәҙер нимәлер тураһында уйлағыһы ла, нимәлер эшләгеһе лә килмәй ине. Ағас ботағынан ишелеп башҡа төшкән үҙе ауыр, үҙе ҡаты ҡылау ише көтмәгәндә һәм кинәт ябырылған ҡотолғоһоҙ һәм ҡот осҡос хәҡиҡәт уның ихтыяр көсөн һындыра бара.

Ошо уйҙарынан үҙендә тәҡәтһеҙ уяна барған сәм ыңғайына буйтым ғына эске еңеллек тойған Айбулат, һалҡын таштарға таяна-таяна, әүәл тороп ултырҙы. Бер нәмә лә күрмәгән көйөнә ян-яғын һәрмәштерҙе. Ҡулына йәнһеҙ-еүеш һәм ҡырлы таштарҙан башҡа бер ни ҙә һуғылманы. Ул шулай, һәрмәнә-һәрмәнә, тырпайышып торған таштарға йәбешеп, өҫкә үрмәләне һәм, түбәһе төкөлөүҙән, былай ҙа һыҙлап торған башы зыңҡ итеп ҡуйҙы. Түҙеп торғоһоҙ ауыртыу үткәнсе йондоҙҙар уйнап киткән күҙҙәрен сыртылдатып йомдо: аһ, был тиклеме лә булыр икән ғазаптың. Ошонан һуң үҙе тарыған аяныслы хәлде бар тулылығы менән төшөнә башлаған Айбулатты инде ысын-ысындан күңел төшөнкөлгөгө быуып алды ла хәсрәт даръяһына бырағтырҙы. Өмөтһөҙлөктән былайыраҡ көсһөҙлөгөнә ғәрләнеп, йән асыуына ҡысҡырғыһы килде. Ҡысҡырманы, үҙендә тыйылып ҡалыр көс таба алды.

Ошолай фекер йөрөтөп, үҙен-үҙе дәртләндерергә тырышҡан Айбулат таш баҫҡыс буйлап кире төштө. Уның бит, кәрәк була ҡалһа, тип һалып алған ҡыулауҙары бар. Ә уларын алыр өсөн тоҡсайҙы табырға кәрәк. Тағы шырпы һыҙҙы. Әһә, бына. Барлыҡ әйберҙәре лә теүәл. Ҡулына эләккән ҡыулауҙың тәүгеһен тоҡандырҙы ла, дөм-ҡараңғы ер аҫты батшалығында ҡапыл балҡып киткән ифрат көслө яҡтылыҡтан сытырайып, күҙҙәрен аса алмайса торҙо. Күҙҙәре аҙмы-күпме күнегеү менән, яҡтылыҡ сығанағын күтәрә биреп, аяҡ аҫтын ҡараштырҙы. Ана, йылҡылдыҡ ташы суҡайып торған бер мөйөштә мылтығы ята.

Мылтығын алырға тип ынтылғанында теге суҡайсыҡ таштың йәйғор нуры сәскән айырым матурлығына иғтибар итте: аҫыл таш та баһаң. Туҙғып ятҡан ярсыҡтарҙын йоҙроҡ ҙурлыҡ береһен ҡулына ала һалды. Бына ул һинең ғүмереңә етерлек, ул ғына ла түгел, балаларыңа, хатта, ейәндәреңә артып ҡалырлыҡ дәүләт. Ана, ҡалай йәһәт кенә икән ул байып китеүҙәре. Хәйер, байып китерҙән алда был шыҡһыҙ урындан иҫән-имен көйө сығырға кәрәк әле. Айбулат ҡыулау яҡтыһында ҡулының ҡанға буялғанын шәйләне. Ана нимә бая күҙҙәрҙе асырға бирмәгән, бармаҡтарына ла йәбешеп аптыраҡан. Аяҡ аҫтында тағы бәләкәй генә ҡан күләүеге күренә. Быныһы ла соңҡаһындағы яранан аҡҡан үҙ ҡаныдыр, башҡаса кемдеке булһын. Аҫылбаев, ҡулындағы гәүһәр кристалын һаҡһыҙ ғына урынына ырғытты ла өнһөҙ өңөрәйгән соҡорҙоң төп яғына ҡараш ташланы. Ҙур икән, төбө күренмәй. Үлтереп башы зыңҡыуҙан әле булһа тулы асылына ҡайта алмай интеккән Айбулат, абына-һөрөнә, йән иҙгес билдәһеҙлек менән өр-яңы асыштар вәғәҙә иткән шом тулы өшәнес ҡаранғылыҡҡа атланы...

Ул хәйерһеҙ яҙмышты һынағандай, байтаҡ ер үтте. Әммә бер киңәйә биреп, бер тарғайып киткән ер аҫты ҡыуышының осо-ҡырыйы күренмәне. Ул ҡыулау төтөнөнөң фәҡәт бер яҡҡа - алға табан тартылыуына иғтибар итте. Тимәк, соҡор тигәнең бөтөнләй үк соҡор түгел, ә ысын мәмерйә һәм уның ҡайҙалыр ауыҙы булырға тейеш. Юғиһә үтәнән-үтә һауа ағымы ҡайҙан барлыҡҡа килә тиһең. Ә уның барлығын, ана, төтөн раҫлай. Барған һайын аяҡ аҫты ла тигеҙләнә, эре таштар һирәгерәк осрай. Күпмелер үтеүгә, мәмерйә коридоры икегә айырылды. Айбулат, ҡайһы яҡҡа китергә, тигән һымаҡ бер талай тапанып торғандан аҙаҡ уң ҡулды һайланы. Был яғына коридор һиҙелерлек киңәйә һәм бейегәйә барҙы. Уның буйлап атлауы ла хәҙер еңелерәк. Ул ҡапыл, ҙур тирмәне хәтерләткән ифрат бейек көмбәҙле залға килеп сыҡты. Сыҡты ла, танауына яңы тарҡалыусы үләт еҫе бәрелеүҙән уҡшып ебәрҙе, тын алыуы ауырлашты.

Ошо урында Айбулат ҡурҡышынан ҡыулауын төшөрөп ебәрә яҙҙы: уның аяҡ аҫтында эреле-ваҡлы һөйәктәр ҡатыш ойошҡан йөн киҫәктәре һибелгән ине. Ана, бер яҡ ситтә, ап-аҡ һөйәктәрҙән хасил булған "күбә" янында, бөкһөгән тире ята, шуның еҫе бөтә мәмерйәне алған да инде. Тонсоғоп үлмәҫмен тимә, был тирәнән йәһәтерәк китеүең хәйерле. Бер-бер хәл була ҡалһа тип, мылтығын әҙер тотҡан Айбулат дәү "тирмә" буйлап ары атланы. Ул хәҙер ашыҡмаҫҡа тырыша һәм һәр аҙымын самалап ҡына баҫа. Йөрөй торғас, ул таш диуарҙы соҡоп эшләнгән ҙур уйым табып алды. Уйымдың иҙәненә күпертеп түшәлгән ҡаулан менән ҡоро япраҡ ҡатыш мүкте күргәс тә барыһын аңлап алғандай булды: айыу! Эйе, мәмерйә хужаһы күпте күргән ҡарт, шуның өсөн дә үтә хәйләкәр һәм аҡыллы айыу булырға тейеш. Бары ул ғына итте һаҫытып ашай, сөнки йәшенә теше үтмәй. Ә быныһы инде уның ҡышҡылыҡҡа ятыу өсөн ҡулайлаштырылған "йоҡо бүлмәһелер". Ҡайһылай ентекләп әҙерләгән, ә.

"Тирмәне" бер нисә ҡат әйләнеп сыҡһа ла, артабан киткән юл тойолманы. Көтмәгәндә башына килгән: "Мәгәр ошо мәлдә хужа үҙе өйҙә булһа?.." - тигән уйҙан арҡаһы буйлап өшәнес тулҡын үтеп киткән Айбулат сығыу яғына боролдо. Һулышты мөмкин тиклем һирәгерәк алырға тырышып, ытырғана-ытырғана шау һөйәктәр өҫтөнән үтте. Һаҫыҡ зал артта ҡалды.

Айбулат күпмелер ваҡыттан бая ҡолап төшкән урынына килеп сыҡты. Бында һауа саф, һулап туйғыһыҙ. Ярайһы уҡ талсыҡҡан ер аҫты тотҡоно, ҡомһоҙланып оҙаҡ ҡына тын алды. Бәй, бая нисек абайламаған - мәмерйәгә төшкән урындан бер аҙ ғына арыраҡ ниндәйҙер тишек өңөрәйеп тора. Урыҫ мейесе ауыҙын хәтерләткән тишек кеше һыйып инмәле. Ҡайҙа алып бара ул? Бәлки, азатлыҡҡа юл ошолор?.. Күңеле уйнап киткән Айбулат биштәрен ысҡындыра һалды ла, ауыҙ эсен яҡтыртты. Ҙур ғына икән, төбө лә күренмәй. Мылтығы менән башҡа әйберҙәрен алдан шылдыра барып, кипсәлә-кипсәлә ауыҙға инеп китте. Артыҡ күп тә барманы - мөгәрәпкә тартым ҡыуышлыҡҡа килеп сыҡты. Йоморо ҡыуышлыҡ иркен генә, әммә унан ары киткән башҡа юл юҡ ине. Айбулаттың азатлыҡҡа ышанысы ошоноң менән тамаммы әллә? Үтә ҡыҫҡа ғүмерле булды түгелме һуң ул? Егеттең өмөтө һүрелде, ләкин әле бөтөнләйгә һүнеп ҡалманы: был таш батшалығынан ҡотолоу юлының булмауы мөмкин түгел. Йәплерәк урын һайлап ултыра төшкән Айбулат, тәү баштағы дәрте һүрелә биреп ҡуйһа ла, үҙен ҡурҡыныcһыҙ урында итеп тойҙо. Шулай шул, бая көскә һыйып ингән ауыҙҙан башҡа инер юлы юҡ, ә уныһына айыу һыймаясаҡ. Күпме тырышһа ла. Эйе, бында тыныс, ҡапыл-ҡара хәүеф янамай ине. Ул яҫы ташҡа баҫып ҡыулауын һүндерҙе: алда әллә нимәләр бар, әле кәрәге тейер. Аҡылдан яҙҙырырға һәләтле был дөм-ҡара билдәһеҙлектә хәҙер ут менән һыуҙан да ҡәҙерле нәмә юҡ.

Ныҡ асыҡҡанын тойған Айбулат ҡараңғы-юҡҡа һәрмәнә торғас, тоҡсайындағы икмәк һыныҕын табып, оло ләззәт менән сәйнәргә тотондо, ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында һау ҡалған термосынан йылымыс сәй эсте. Ҡара әле, сәйе, ысынлап та, артыҡ һыуынмаған. Тимәк, бында килеп эләгеүенә күп ваҡыт та үтмәгән. Уҙа барһа, биш-алты сәғәттер. Ә Айбулатҡа бер-нисә көн һымаҡ тойола.

Эсенә төйөр төшөп, һыуһыны буйтым ҡанған Айбулаттың кәйефе күтәрелеп киткәндәй булды. Арҡаһы менән һалҡын ташҡа терәлгән ир ала-ҡола уйҙар ҡосағына бирелә: ана бит, бер тешләм икмәк менән бер йотом ғына һыу нимә эшләтә ала. Икмәгеңдән дә мәхрүм итмәһәң ине... Шулай ҙа артабан нимә эшләп ҡарарға, ни ҡылырға? Эҙләнеүҙе дауам итергәме, әллә көс еткеһеҙ таш ҡапҡас менән ябылған ауыҙҙы һағалап ятырғамы? Ҡайһыһы отошлораҡ? Дөрөҫөрәге, кем кемде отор: айыу кешенеме, әллә киреһенсә килеп сығырмы? Хәйер, күренеп торған өҫтөнлөк әҙәми зат яғында: уның биш атар карабины бар, уңайы сығыу менән йыртҡысты "һә" тигәнсе йығасаҡ. Йығыуын йығыр, ә артабан: берҙән-бер ауыҙ бикле. Ғөмүмән, ошо таш зиндандан иҫән-һау килеш сыға алырмы ул?

Туҡта! Онотолоп ултырған Айбулаттың башына ҡапыл ғына шәп фекер килде: нисек ул ошоно алданыраҡ гөман итмәгән? Был урындан бит теге таш ҡапҡас күренеп торорға тейеш. Ә ҡапҡасты асҡан мәлдә... яҡтылыҡ та төшһә... Төбәп атырға мөмкин буласаҡ! Бына ул ҡотолоу юлы! Берҙән-бер дөрөҫ һәм ышаныслы юл. Талап бер генә: ҡапҡас урынына төшөп ятмаҫ элек атып өлгөрөү кәрәк. Бары шул ғына! Ә инде өлгөрмәһәң, мәңге-мәңгелеккә ошонда тороп ҡалыуың ихтимал.

Үҙенең уйламағандағы асышынан ҡанатланып киткән Айбулат һунарсыға ғына хас сабырлыҡ менән көтә башланы. Хәҙер, хәҙер ул иректә буласаҡ. Инһә лә, сыҡһа ла януар һис шикһеҙ ошо урынға, ҡап уның алдына килеп баҫырға һәм ошонан үтеп китергә тейеш. Уның башҡаса юлы юҡ... Әйткәндәй, әле тәүлектең ҡайһы мәле икән? Төн булһа, мәгәр яҡтылыҡтың төшмәүе лә мөмкин. Ул сағында, бәхил булығыҙ өмөттәр. Ошо рәүешле, үҙе лә һиҙмәҫтән, томанлы уйҙарға тағы бирелеп киткән Айбулат һәр төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы фараздарҙан бер тунды, бер янды. Ғөмүмән, күпме осор хитлана ул бында, ошоғаса әҙәм аяғы баҫмаған йәһәннәм төпкөлөндә? Иҫен юғалтып ятмағанда, бәлки, ваҡытты самалай ҙа алыр ине. Шайтан алғыры, бына бит, әлегәсә кәрәкһеҙ һанаған сәғәттең дә бер килеп кәрәге тейҙе түгелме һуң? Тейҙе лә ул, әммә уныһы янда юҡ. Әкрен-әкрен генә

***✓ Ҡолаҡ ярыһы ярыла яҙып, ҡапыл-ҡара нимә булғанын аңларға ла өлгөрмәгән Айбулат әллә һеңгәҙәп торҙо, әллә бөтөнләй һаңғырауланып ҡалып, ҡатты ла ҡуйҙы: айыу тигәне айыу булмай сыҡты түгелме һуң?***



онотола барған Айбулат, иҫ итмәҫтән, бер мәлгә ойоп китте...

Үҙен ҡайҙалыр әллә болоттар өҫтөндә, әллә тулҡындар ҡосағында йөҙгәндәй хис иткән һунарсы, гүйә ер аҫты ҡатламынан килгән шомло дөңкөлдәүгә һиҫкәнеп, асылына ҡайтты. Айбулат тын алырға ла ҡыймай ҡатып ҡалды. Кемдер үтә һаҡ ҡыланып мәмерйәгә инде, буғай: ауыр гөрһөлдәп шылған таш тауышы ошо хаҡта иҫкәртте. Гөрһөлдәү рәттән ике тапҡыр ҡабатланды, тимәк, мәмерйә ауыҙын асып яптылар. Ғәжәп, ә ниңә һуң яҡтылыҡ күренмәне? Ә-ә, был мәлдә ер өҫтөндә ҡараңғы төндөр. Тоҫмаллап булһа ла дөмпөлдәткәндә инде... Юҡ, ярамаҫ, һунар ҡанундары, күренмәгән сәпкә атыуҙы ҡәтғи тыя. Үҙең дә белмәҫтән әллә кемде йығып ҡуйыуың бар. Унан, бынауы шыр яланғас ҡаяларға бәрелеп ҡаҡлыҡҡан йәҙрә яңылыштан ғына үҙеңә килеп тейеүе лә ихтимал.

Айбулаттың танауына тын алғыһыҙ һаҫыҡ еҫ килеп бәрелде. Еҫтең үләт-емтек ашап йөрөгән айыуҙыҡы икәнлеген төптө наҙан һунарсы ла белә алыр ине. Шул әҙере, шыпырт ҡына баҫып, ауыҙ тәңгәленән кемдер уҙҙы ла мәмерйә эсен йөрәк тетрәткес дәһшәтле ауаз ярып үтте. Хатта, бөтә ер аҫты батшалығы һелкенеп киткәндәй булды. Ҡолаҡ ярыһы ярыла яҙып, ҡапыл-ҡара нимә булғанын аңларға ла өлгөрмәгән Айбулат әллә һеңгәҙәп торҙо, әллә бөтөнләй һаңғырауланып ҡалып, ҡатты ла ҡуйҙы: айыу тигәне айыу булмай сыҡты түгелме һуң? Һәр хәлдә был тирә тайыш табандары быныӊ ише рух һындырғыс ауаз сығара белмәй. Ғүмерендә тәү тапҡыр ишеткән ошо, йыһанды һелкетеп ебәрер күк күкрәүенә тартым хәтәр орандан ҡурҡыуға ҡарағанда ғәжәпләнеүе көслөрәк ине: нимә булды был? Кем шул рәүешле итеп ҡысҡырырға һәләтле? Шаҡ ҡатып торған Айбулаттың ҡолаҡтары һаман сеңләһә, мейеһен мең төрлө уй ыраулай: йә, барыһын өйрәнгән һунар белгесе, һинең янында кем йөрөп ята? Әйтә алмайһың. Тимәк, һин һунар белгесе генә түгел.

Мәмерйә төпкөлөндә дөһөр-даһыр килеп таш ишелгәне ишетелде. Шаптырлашып ҡыу һөйәктәр һибелгән ыңғайға "теге" тағы үкереп ебәрҙе. Билдәһеҙ йән эйәһе яман туҙына ине. Уның ни сәбәптән шулай енләнеп йөрөгәнлеген Айбулат шунда уҡ төшөнөп алды - бая һуғып йыҡҡан ҡорбанын эҙләй. Уныһы бит ҡалдырған урынында булмай сыҡты. Өҫтәүенә төп яҡҡа һорауһыҙ уҙған һунарсы еҫ ҡалдырҙы. Әҙәм еҫе. Ана шул әҙәм рухын үҙ ояһында тойоп, тиреһенә һыймай туҙыналыр ҙа. Шул ҡорбаны өлөшөнә төшөргә тейешле көстө бер ғәйепһеҙ таштарға төшөрәлер. Мәгәр уны тойоп, был яҡҡа килһә...

Ошо уйҙан Айбулаттың йөрәге дарҫлап тибергә тотондо, бар тәне ҡалтыранып китте. Юҡ, шөр ебәреүҙән түгел, ә алда торған билдәһеҙ алыш сәменән. Сәмләнмәйсә тороп еңеү яуланмайҙыр ул. Хәҙер уның бар теләгәне бер генә - ошо сөңгәлгә башҡа яҡтан юл була күрмәһен. Ғәйрәтле тауышы менән ер һелкетә баҫып йөрөүенә ҡарағанда ул ғәләмәт дәү булырға тейеш һәм тар ауыҙҙан ҡапыл ғына үтеп инә алмаясаҡ. Яуыз йән шунда тотҡарланған арала Айбулат... Ул яҙа атмаҫ. Йәшәү теләге менән көрәш сәме быға юл ҡуймаясаҡ. Күпмелер ваҡыт йәне сығырҙай булып ҡыланғандан һуң, теге бихая тынып ҡалды. Уның гөп-гөп баҫып ары киткәнен ишеткән Айбулат та тынслана төшкәндәй булды. Уны йәнә үлтереп йоҡо баҫа. Баяғы аңлайышһыҙ хәле тағы ҡабатлана түгелме? Ул ни уяу түгел, ни йоҡлап китмәй. Аяҡ-ҡулын да тоймай, ҡайҙалығын да онота бара. Анауы ише хәүеф янаған саҡта ниткән йоҡо икән ул? Йонсоуы шул ҡәҙәреме: ҡабаҡтарына көсө етмәй башланы. Ә сәм? Йәшәү һәм көрәш сәме? Улары ҡайҙа булды? Зиһене тарҡалып, булмышы үҙенә буйһонмай башлаған Айбулат үлем көҫәгән йыртҡыс урынына йоҡо менән алыша. Уға хәҙер рәхәт, ул бар донъяға битараф көйө ойоп бара. Юҡ! Иҙрәп ятырға ярамай! Йәнәшәндә генә, ҡабырғаң аҫтында, билдәһеҙ дошманың темеҫкенеп йөрөгәндә, йоҡлап китеү үлемгә тиң ғәмәл. Айбулат йән асыуына ҡолаҡтарын ыуалай, беләген семетә, умыра тешләп тә ала. Шул рәүешле бар көсөнә мәлһеҙ баҫып килгән сәйер йоҡоға ҡаршылашып маташа. Шулай ҙа йоҡо тигәнең көслөрәк булып сыға, ул әкрен-әкрен генә еңеп бара - Айбулат ни аралалыр күҙҙәрен йома ла билдәһеҙлек ҡосағына сума...

Уяулы-йоҡоло онотолоп ятҡан Айбулатты эргәһендә генә ҡыштырлап киткән тауыш һиҫкәнеп уянырға мәжбүр итә. Кемдер шыпырт ҡына ул ятҡан урынға яҡынлаша түгелме? Ҡалҡына һалып ҡарарға ине хәле юҡ, аяҡ-ҡулы тыңламай. Башы көс еткеһеҙ булып ауырайҙы ла, уйҙары буталып тик тора. Ул хәҙер үҙенең нимә эшләргә теләгәнен үҙе белмәй. Шулай ҙа, бер мәлгә генә зиһене яҡтыра төшөп, асылына ҡайта биргәнендә шырпы һыҙырлыҡ көс тапты. Теге мәлғүн, тар тишектән тығылып, уның яғына сығырға маташа ла баһаң. Ошоно шунда уҡ төшөнөп алған Айбулаттың уяулы-йоҡоло хәл-торошо ҡул менән һыпырған ише юҡ булды. Ул элекке үҙе ауан, үҙе тәүәккәл һунарсыға әйләнде. Бая булып үткәндәр аңына алама төш кеүек кенә һеңеп ҡалды. Яман төш өҙөлдө. Хәҙер алдында ышанғы ла килмәгән ысынбарлыҡ. Шырпы һүнде. Айбулат мылтығын йәтешләп тотто ла, тәте һаҡлағысын ысҡындырҙы: был яҡҡа үтә ҡалһа, тәтегә баҫасаҡ. Һис шикһеҙ. Тоҫмал менән булһа ла барыбер атып йығыр.

Ҡайҙалыр тамаҡ төбө менән ғырылдаған тауыш ишетелә, уҡшытҡыс-һаҫыҡ еҫ бәрелә. Бәй, ул бит бөтөнләй яҡында ғына. Әллә, барыһын Хоҙай ҡулына тапшырып, атырға ла ҡуйырғамы? Ә һунарсы намыҫы менән һунар ҡануниәте? Улар асыҡ күренмәгән сәпкә атырға ҡушмай. Айбулат башҡаларҙан һәр саҡ ошоно талап итте, ә үҙе. Юҡ, ул тәтегә баҫмаҫ, һуңғы сиккәсә көтөргә һәм түҙергә бурыслы. Бәхетенә күрә теге, бәлки, тар ауыҙҙан үтеп сыға ла алмаҫ.

Ниһайәт, януар, таш диуар алдындағы көсһөҙләгән танығандай, гөпөлдәтеп уға бер һуҡты ла, баяғыһынан да яманыраҡ итеп үкерҙе. Һауа тетрәнеүҙән ҡолағы ҡатҡан Айбулат сытырлатып күҙҙәрен йомдо. Бер аҙҙан мәмерйә эсендә йәнә һиллек урынлашты. Ғәжәп, шылт иткән тауыш ишетелмәй. Байтаҡ ҡына көтөп торған һунарсы, әле генә янаған хәүефтең күпмелер ваҡытҡа сигенгәнен тойоп, еңел һуланы, әммә тулыһынса тыныслана алманы. Тынысланырға әле иртәрәк - йәнәшәлә дошман. Айбулатты, ни ғәләмәт булды әле был, түҙеп торғоһоҙ йоҡо тағы баҫа, һәм шул арала, үҙе лә һиҙмәҫтән, әүен баҙарына китеп тә бара...

...Мәмерйә ҡыуышындағы билдәһеҙ йән тынып ҡалды. Айбулат, ҡырлы таштарға эләгә-һарҡа кипсәлеп, теге яҡҡа кире сыҡты. Хәҙер ул нисектер ҡурҡмай ҙа, көҙөкләнмәй ҙә, сөнки бында бер кем дә юҡ. Ул бары ғәжәпләнә генә: ҡайҙа ғәйеп булыуы бар януарҙың? Әле генә ошонда ине. Айбулат, етеҙ генә үрмәләп, таш стенаға күтәрелә лә, мәмерйә ауыҙы ҡапҡасын күтәрмәксе итә. Уныһы... еңел генә асыла ла китә. Бына бер мөғжизә! Элек көсө етмәгәнде...

Ер өҫтөндә күҙ ҡамашырлыҡ яҡты икән. Ҡар иреп бөткән дә, аҡлан, ни арала тиһең, меңәрләгән сәскәләр менән ҡапланырға өлгөргән. Ниндәй генә төҫлөһө юҡ сәскәләрҙең? Ул селт-ағы, ҡан-ҡыҙылы, зәп-зәңгәре менән сем-һарыһы. Шул рәүешле сәскәләргә күмелеп, әллә яҙ ҙа еткәнме? Нимә, ошо таш ҡыуышта ул оҙон ҡыш буйына ятҡан булып сығамы? Ана, иҫерткес хуш еҫтәре аңҡып торған гөлдәр араһынан уға ҡаршы, етәкләшкән икәү йүгерә. Бәй, ҡатыны менән ҡыҙы бит! Улар бында нимәләрен ҡарап йөрөйҙәр. Әлеге аҡландың ҡот осҡос януар төйәге икәнлеген белмәйҙәрме икән ни? Үҙҙәренең май ҡояшы кеүек балҡыған йөҙҙәрендә әйтеп бөткөһөҙ шатлыҡ-ҡыуаныс сағыла. Шулай ҙа, был ҡурҡыныс урында нимәләрен юғалтҡан улар? Иҫ итмәҫтән йыртҡыс килеп сыға ҡалһа... Ана, килә лә шикелле! Ҡайҙалыр уның ауыр аҙымдары ишетелә: гөп... гөп... гөп... Үҙе күренмәй. Яҡындары өсөн йөрәге ярылыр хәлгә еткән Айбулат уларға ҡаршы йүгермәксе итә - аяҡтары тыңламай. Ә йыртҡыс етеп килә: дөп... дөп...

Йоҡо аралаш һаташыуҙан баҫлығып ята икән. Ҡара тиргә батҡан Айбулат йөрәге ҡабынып уянды. Уянды ла, ҡайҙа икәнлеген аңламағандай, тынлыҡҡа ҡолаҡ һалып ятты. Теге тоноҡ гөпөлдәгән тауыштар - ысынбарлыҡ түгелме һуң? Эйе, ысынбарлыҡ. Ул билдәһеҙ йән эйәһенең аяҡ тауыштары. Күренмәгән януар, уның тәңгәлендә туҡтала биреп торҙо ла ары үтте. Шунда уҡ ауыр таштың икенсеһенә бәрелеп деһерләгәне ишетелде, ә яҡтылыҡ-маҙар күҙгә салынманы. Айбулаттың фаразы дөрөҫкә сыға түгелме? Тимәк, билдәһеҙ йән төнгөлөккә генә сығып йөрөй, һәм шул сәбәпле уны ошоғаса күргән кеше лә юҡ. Ҡырағай тауышы ишетелеп ҡала, ә үҙе күренмәй. Ҡышҡы миҙгелдә, бәлки, бөтөнләй сыҡмайҙыр ҙа? Ул сағында бит Айбулатҡа таш тоҡтан ҡотолоу юҡ иҫәбендә. Ә Айбулат айыу түгел, усын ялап ҡына ҡыш сыға алмаясаҡ. Туҡта. Нисек итеп ошоғаса башына килмәгән? Уға ҡаршы ҡыулауҙы файҙаланып ҡарағанда? Ҡотолоу юлының береһе лә, бәлки, ошонда булыр? Айбулаттың ниәтенән кире ҡайта торған ғәҙәте юҡ. Ер йөҙөндә уттан ҡурҡмаған йән эйәһе бармы икән?

**(Дауамы бар).**

*ЗАУЫҠ*

# КҮҢЕЛДӘРЕМ МӨЛДӨРӘМӘ ТУЛҒАС, ИЛАНЫМ ДА ҠУЙҘЫМ ТҮГЕЛЕП...

***

Мин юғалдым һинһеҙ, йәнем,
Донья шундай икһеҙ- сикһеҙ.
Мине упҡын йотто инде,
Шарламаға баҫып ипһеҙ.

Шарламала шартлап һынған
Минең өмөт ишкәк төҫлө.
Ажар елдәр - һинһеҙ йылдар,
Һинән-минән улар көслө.

Мин юғалдым һалам һалда,
Ташҡын бәрһә- бәрһен ярға!
...Еүешләнеп бөткән шәүләм
Өнһөҙ-төшһөҙ ҡалды зарға.

Тымыҡ күлдең ярҙарында
Бөгөн, йәнем, һинең төҫөң.
Мин юғалдым. Инде көтмә.
Томан ҡаплай күлдең өҫтөн.

## Бәләкәсем-киләсәгем

Шауламағыҙ, ҡыҙым йоҡлай,
Йоҡолары шундай тәмле.
Төштәрендә ниҙәр күрә,
Йылмайыуы ниндәй йәмле.

Тыныс йоҡла, күҙ нурҡайым,
Әсәйең бит тора һаҡта.
Тыям бесәй мыяулауын
Һин бәү-бәү-бәү иткән саҡта.

Тек-тек сәғәт телдәре лә
Маҙаларға тейә инде.
Ҡырҡып алып телгенәһең,
Ауыҙҙарын тегәм инде.

Тышта һайрай сыйырсығың,
Ерҙә тағы тандар ата.
Киләсәгем - бәләкәсем,
Бишегендә йоҡлап ята.

## Мөхәббәт

Юлдарыңа йәйғор йәйәм-
Аллы-гөллө бәрхәт юрған.
Баш осоңа - йондоҙ селтәр
Бәләләрҙән һаҡлай торған.

Ҡулдарыңда миләш тәлгәш
Әсе йәштәр менән татлы.
Һин бит минең падишаһым -
Үҙем үргән сәскә тажы.

Гәлсәр шәмдәл айым һиңә,
Алтын табаҡ ҡына саҡлы.
Ҡояшымды бирәм һиңә-
Ер шарының ул усағы.

Был донъям да һиңә булһын,
Барыһын да бүләк итәм.
Йылдар буйы йыйнап килгән
Байлығымды риш(ә)үәт итәм.

## Хиромант

Ҡулдарымды һуҙам ятҡа,
Һырҙарҙа яҙмыш юлы.
Ҡулым йомшаҡ булмаһа ла,
Ҡыҙыҡтар бит туп- тулы.

Үткәнемде үҙем беләм,
Һөйләмә барлығымды.
Йән дуҫтарым күп булһа ла,
Яңғыҙым ҡалғанымды.

Ауырыуҙарҙы ла һынама,
Йөрәгем тулы яныу,
Һәр нәмәне яҡын алып,
Таша ла китә ҡаны.

Артыҡ бер ни һорамайым,
Булыр, тип яҙылғаны.
Тик бер генә һүҙ әйтһәңсе,
Тик уға ҡағылғанын.

Шулай тиеп өндәшәм дә,
Тартып алам ҡулымды.
Үҙемсә уға барырмын,
Үҙемсә булыр юлым.

***

Бигерәк тә яңғыҙмын да инде,
Хистәремә киттем күмелеп.
Күңелдәрем мөлдөрәмә тулғас,
Иланым да ҡуйҙым түгелеп.

Һөйләй-һөйләй уға һүҙҙәремде
Ҡышҡы төндәр етмәҫ, беләмен.
Шуға күрә ошо һүҙҙәремде
Шиғыр итеп аҡҡа теҙәмен.

## Йәшлек менән хушлашыу

Әллә ниңә һуңғы ваҡыт
Тынғы бирмәй йәшлегем.
Әллә китмәк була минән,
Шуға әллә нишләнем.

Серем дә юҡ был донъянан,
Мин һаман шул шаталаҡ.
Иң бәхетле мин бит тиеп,
Һаман күңел яр һалмаҡ.

Ҡысҡырмайым. Кәрәкмәй,
Йылдар туҙынып китһә.
Мин һаман да йәш тиермен,
Ҡыйыр-ҡыймаҫ көҙ етһә.

## Ҡайын зары

Ғүмерлек юлдаш тиҙәр,
Юлдашмы - юлдарында,
Серҙәшме - йәндәреңә,
Мондашмы - йырҙарыңа?
Юлдаш булһа,
Серҙәш булһа,
Мондаш булһа,
Бәхетлеһең, тәхетлеһең
Ғүмерлек йылдарыңа.
Ғашиҡтарҙы зарлы иткән
Тайпылдырған юл ҡайҙа?
Ул юлдарҙы табайымсы,
Дөрөҫ юлға һалайымсы!
Тик шыршылар араһында
Нисек итеп йәшәрмен һуң
Күҙҙәрен һарғаймайса?

**Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА**

✓ ***Башҡорт йәштәре көнөндә айыҡлыҡҡа саҡырыуҙарына ҡыуандым. Байрамға килеүсе һәр кемде тикшереп, алкоголле эсемлектәрен алып ҡалыуҙың иңгай һөҙөмтәһе булды. Өс көн буйы барған байрамда һуғышып, тәртип боҙоп йөрөүсе кеше булманы.***



ӘЙТӘГҮР!

# ЭСКЕҺЕҘ БАЙРАМДАРҘЫ...

## йәштәр нисек ҡабул итә?

**Хәҙер туйҙарҙы, байрамдарҙы эскеһеҙ күҙ алдына ла килтерә алмайҙар: гәлсәр рюмкаларҙы сәкәштереп, бер-береһенә теләк теләйҙәр ҙә, "Амин" тип эсеп тә ебәрәләр... Ә шулай ҙа һуңғы ваҡыттарҙа эскеһеҙ туй үткәрергә тырышыусы йәштәрҙең арта барыуын күреү бик ҡыуаныслы. Бөрйән ерендә уҙғарылған башҡорт йәштәре көндәре лә эскелеккә ҡаршы уҙғарылғайны. Кемдәр үҙҙәре менән һыра һәм башҡа алкоголле эсемлектәр алған, ойоштороусылар тарафынан улар алып ҡалынды һәм байрам яланына бер кем дә үҙе менән был эсемлектәрҙе алып инә алманы. Шундай күренеш барыһына ла оҡшанымы, әллә ҡайһы берәүҙәрҙең күңелен ҡырҙымы? Ошо айҡанлы йәштәрҙән эскеһеҙ байрамдарҙы нисек ҡабул итеүҙәре тураһында һораштыҡ.**

**Гүзәлиә ҠАЗЫЕВА, студент:** Байрамдарҙың алкоголле эсемлектәрһеҙ уҙғарылыуына ыңғай ҡараштамын, әлбиттә. Барыбыҙ ҙа араҡы бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармай икәнлеген беләбеҙ. Ҡасан эскесенең ҡөмрәт күргәнең, яҡшы әҙәм булғанын күргәнегеҙ бар? Эскеһеҙ байрамдар үткәреү йолаһын күптән атҡарырға кәрәк ине. Әммә әле лә һуң түгел, артабан эскелеккә ҡаршы дәррәү күрәшкәндә, уны енә алырбыҙ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, эскеһеҙ байрам уҙғарыуға ҡаршы йәштәр ҙә бар. Уларға ҡарап, бик әсенәм.

**Ләйсән ХӨСӘЙЕНОВА, студент:** Байрамдарҙың эскеһеҙ уҙғарылыуына һуңғы арала йәштәрҙең дингә ҡайтыуы ла сәбәпселер, тип уйлайым. Иманлы йәштәр айыҡ тормош яҡлы, улар йәшәү мәғәнәһен тәрән аңлай. Йәштәрҙең эсеп йөрөүсе ололарҙан үрнәк алмайынса, киреһенсә, уларҙы айыҡ тормошҡа саҡырыуы, бер-берен эске һаҙлығынан ҡотҡарырға тырышыуы маҡтаулы күренеш. Республикабыҙҙа алкоголле эсемлектәр тыйылған, хәләл ризыҡтар ғына булған ресторан, кафе, ашханалар асылһа, был йәштәрҙең дәртен арттырыуға, уларҙың сафын ишәйтеүгә яҡшы аҙым булыр ине. Күптән түгел уҙғарылған Башҡорт йәштәре көнөндә айыҡлыҡҡа саҡырыуҙарына ҡыуандым. Ысынлап та, байрамға килеүсе һәр кемде тикшереп, алкоголле эсемлектәрен алып ҡалыуҙың ыңғай һөҙөмтәһе булды. Өс көн буйы барған байрамда һуғышып, тәртип боҙоп йөрөүсе кеше булманы. Ҡайһы берәүҙәрҙең: "Хәҙер ҡалала эсмәйҙәр, ауылда ғына эсәләр", - тиеүенә лә ҡырҡа ҡаршы киләм, сөнки эсергә яратҡан кеше ҡайҙа ла эсә. Ҡалала, бәлки, беҙ иғтибар итмәйбеҙҙер, күрмәйбеҙҙер. Ауылда бит кемдең нимә эшләгәне һәр ваҡыт беленеп тора. Шуға ла был йәһәттән ҡаланы маҡтап, ауылды яманламайыҡ.

**Батыр ЮНЫСОВ, студент:** Мине ҡыуандырғаны: эскеһеҙ байрамдар үҙебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәткә хас булғанса, доға менән башланып һәм бөтөрөп ҡуйыла. Борон да бит ата-бабаларыбыҙ һәр эште доға менән башлаған һәм тамамлаған. Йәш кешенең күңеле һәр саҡ ҡайҙалыр атлығып, ярһып тороусан, улар күңел асырға, бер-береһе менән аралашырға ярата. Төнө буйы киске уйындарҙа йөрөһәләр ҙә, көнө буйы эш менән булһалар ҙа йәш йөрәк арымай ҙа, талмай ҙа. Тик йәштәрҙең һыра һәм башҡа алкоголле эсемлектәр менән күңел асыуы бошондора. Улар йә күңел асыр өсөн генә, йә булмаһа, ҡыйыулыҡ өсөн, компания өсөн, тигән сәбәптәр табып, бер аҙ "төшөрөп" ала. Барыһы ла шул әҙ-мәҙҙән башлана инде. Бынан биш-алты йыл элек йәштәр бигерәк нык эсә ине. Һуңғы арала эсеүселәр рәте, ысынлап та, кәмей төштө. Йәштәр араһында күҙгә күренеп дин юлына баҫыусылар артты. Башта эсмәгән кешенән көлөп, мыҫҡыллап ыҙалатһалар, хәҙер, киреһенсә, улар араһында эскән кешенең үҙенә оят. Шуға күрә хәҙер эскеһеҙ байрамдар ойоштороуы еңелерәк. Әлбиттә, бындай байрамдарҙа йәшенеп эсеүселәр бар. Киләсәктә ана шундай дөйөм тәртипкә бойһонмай, эсеп йөрөүселәргә язаһын да уйларға кәрәк. Ул саҡта йәштәр араһында йәшенеп эсеүселәр ҙә булмаҫ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# АЛЛЕРГИЯ

**Сәскә һеркәһенә аллергия (поллиноз) булған кешеләргә, айырыуса аллергендарҙы ҡыяҡлы үҫемлектәр таратҡанда, һыра кеүек эсемлектәр менән бик һаҡ булырға кәрәк. Әгәр ҙә организм ҡыяҡлы үҫемлектәр һеркәһенә нык ярһый икән, был үҫемлектәрҙән эшләнгән аҙыҡ-түлек тә ҡуҙғытыусы була ала. Бигерәк тә организм хәлһеҙләнгән осорҙа ауырға тура килә. Түбәндә аллергиянан бер нисә рецепт тәҡдим итәбеҙ.**

● Ярты литр һыуға бер ҡалаҡ әрем үләне һалып, һыуҙың яртыһы бөткәнсе ҡайнатырға. Ашағандан һуң көнөнә 2-3 тапҡыр бер балғалаҡлап эсергә.

● Аллергияны дауалау сараларының иң көслөһөнөң береһе - ул мумиё. Уны 1 литр йылы һыуға 1 г концентрацияһында иҙергә кәрәк (яҡшы сифатлы мумиё болғансыҡланмай ғына иҙелә) . Был иретмәне тәүлегенә бер тапҡыр 1-3 йәшлек балаларға - 50 мл, 4-7 йәшлектәргә - 70 мл, 8 йәш һәм олораҡтарға 100 мл миҡдар иртәнсәк эсергә. Әгәр ҙә аллергия көслө икән, ике тапҡырға аҙайтып, көндөҙ ҙә эсергә мөмкин. Мумиё бөйәл ҡыуыу һәм эс йомшартҡыс үҙенсәлектәренә эйә. Экзема барлыҡҡа килгән осраҡта 1 г мумиёны 100 мл һыуға иҙеп, ауыртҡан урынға һыларға була. Мумиё бик тиҙ һәм көслө дауалай, хатта балаларҙың лайлалы тамаҡ биҙҙәре шеше лә беренсе көндәрҙә үк бөтә. Әммә был һөҙөмтәләр менән генә сикләнергә ярамай, дауаланыу осоро 20 көнгә һуҙылыуы яҡшыраҡ. Әбүғалисина ла яҙын һәм көҙөн 20 көн мумиё менән дауаланырға кәңәш иткән.

● Татлы тамыр үләне (солодка или лакричный корень) һарҡындыһына иҙелгән мумиё **ҡурылдай астмаһы сирен** дауалауҙа ярҙам итә. 500 мл татлы тамыр һарҡындыһына 0,5 г мумиё һалырға. Һарҡындыны көн һайын бер тапҡыр иртәнсәк 200 мл миҡдарында эсергә (8 йәшкә тиклемге балаларға күләмен әҙәйтеп бирергә). Уны һыуыҡҡыҫта һаҡларға һәм 2 көн уҙғас, яңыһын әҙерләргә.

● **Тищенконың уникаль рецепты.** 5 ҡалаҡ ваҡланған яңы йыйылған ҡарағай энәләрен, 2 ҡалаҡ әлморон емешен һәм 2 ҡалаҡ һуған ҡабығын бер литр һыуҙа ҡайнатырға. Бер тапҡыр ҡайнап сыҡҡандан һуң, тағы ла 10 минут яй утта торға. Төнгөлөккә йылыға ултыртып ҡалдырырға. Һуңынан һөҙөп, 0,5-тән алып 1,5 литрға тиклем тәүлек әйләнәһенә йылымыс көйөнсә эсергә. 3 көндән хәлегеҙҙең яҡшырыуын тойорһоғоҙ.

● Бер литр ҡайнар һыуға бер ус өлгөргән фасоль ҡабығын һалып, 3-5 минут ҡайнатырға һәм 1,5-2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә стаканлап 3-4 тапҡыр эсергә. 2-3 көндән балалар ҙа, өлкәндәр ҙә һауыға.

● 2 ҡалаҡ цикорий, һары мәтрүшкә, эт тырнағы (календула), эт дегәнәгенә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста тоторға. Һөҙөп алып, көнөнә 3 тапҡыр ярты стаканлап эсергә.

● Шәкәр ҡиҫәгенә 5 тамсы укроп, лавр йә фенхель майы тамыҙып, ашарҙан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр ашарға, ә аштың аҙағынан, шулай уҡ көнөнә 3 тапҡыр, хлорлы кальций иретмәһен: 1 балғалаҡ хлорлы кальцийҙы 1 стакан ҡайнар һыуға ҡушып эсергә.

● Сельдерей тамыры һутын көн һайын 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-2 балғалаҡ эсергә кәрәк. Һутты тамыр ҡайнатмаһына алыштырырға ла мөмкин: 2 ҡалаҡ ваҡланған тамырға бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минут яй утта торға, һыуытырға; йә иһә 1-2 ҡалаҡ ваҡланған сельдерей тамырына 1 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, 2 сәғәт торорға мөмкин. Ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3 тапҡыр стакандың 1/3 өлөшө күләмендә эсергә кәрәк.

● **Саңға аллергия булған осраҡта:** Һары мәтрүшкә (4 балғалаҡ), һарыгүҙ - золототысячник (5 балғалаҡ), онталған бәпембә тамыры (3 балғалаҡ), ҡырҡбыуын - полевой хвощ (2 балғалаҡ), кукуруз емешлеге ауыҙын - кукурузные рыльца (1 балғалаҡ), шифалы ромашка (1 балғалаҡ), онталған әлморон емешен (4 балғалаҡ) бергә һалып бутарға; 4 ҡалаҡ ҡатышмаға 1 стакан ҡайнатылған һыуыҡ һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә төнәтергә ҡуйырға; иртәнсәк ҡайнатырға, уттан алып 1 сәғәт торорға. Айына 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә, дауаланыу осоро 6 ай.

● Уҫаҡтан ҡалған 100 г ҡуҙға ярты литр һөт ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, төнгөлөккә ҡуйырға (ярты сәғәт һайын 1/2 стакан эсергә).

● Бер ус исландия мүгенә (ягель) ҡайнатылған һыуыҡ һыу ҡойоп, 2 сәғәт тотҡандан һуң, һыу ағымы аҫтында сайҡарға һәм таҫтамалға һалып киптерергә, аҙағынан өҫтөнә ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға; 20 минут ҡайнатҡандан һуң һыуытырға. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр ярты стакан эсергә.

● **Диатез, аллергия, тәндәге сабыртыуҙарҙан:** Бер ҡап лавр япрағын ярты литр һыуға һалып 2 минут ҡайнатырға. Төнәтергә һәм һөҙөп алырға. Бәләкәстәрҙең ауыҙына көнөнә 1-3 тамсы, өлкәнерәктәргә - 10 тамсы тамыҙырға. Ә тәндә көнөнә бер нисә тапҡыр һыларға.

**Сәриә ҒАРИПОВА әҙерләне.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# ЦИСТИТ ТИГӘН...

## мәкерле сир

**Үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр булһа ла һәр ҡатын цистит тигән мәкерле сир менән ауырый. Был ауырыу йыш-йыш үҙен һиҙҙереп тора. Һейҙек юлдарының ялҡынһыныуын йәки циститты дауалауға бик етди ҡарарға кәрәк.**

**Цистит һәм анатомия.** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һейҙек каналы ҡыҫҡа һәм киң булғанға, микробы инфекциялар һейҙек ҡыуыҡына тиҙерәк барып етә. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәргә ҡарағанда, цистит менән йышыраҡ ауырый. Йыш ҡына һейҙек ҡыуыҡының лайлалы тиресәһе зарарлана. Шешеү процесы йәки цистит - шуның һөҙөмтәһе.

**Циститтың барлыҡҡа килеү сәбәптәре:** организмдың өшөүе; гинекологик, урологик йәки венерик ауырыуҙар кисереү; йыш һәм оҙайлы эс ҡатыу; һейҙек сығарыу режимы боҙолоу (көнөнә биш тапҡырҙан аҙ); эш көнө һуҙымында даими рәүештә оҙаҡ бер урында ултырыу; даими рәүештә йөкө туймау, нығ арыу, туклаһыуҙың насар булыуы, стрестар; әсе, тоҙло һәм ҡурылған аҙыҡ менән туҡланыу; енси тормош гигиенаһын боҙоу; йыш ҡына һығып торған кейем кейеү.

**Циститтың билдәләре:** Һейҙек буленеп сығыу йыш һәм ауыртыу менән булһа (көнөнә 7 тапҡырҙан артыҡ), цистит башланды тигән һүҙ. Һейҙек ҡыуығында әҙ генә шыйыҡса булғанда ла һейҙеккә бушатҡы килә.

**Ауырыуҙы дауалауҙың төрлө ысулдары бар.** Артабан цистит менән көрәштең популяр һәм үтемле ысулдарын асып бирәбеҙ. Яҡшы һөҙөмтә булһын өсөн уларҙы бергә файҙаланырға кәрәк.

**Циститка ҡаршы гомеопатия:** Дауалауҙың был төрө һәр кешегә ҡәтғи рәүештә индивидуаль булырға тейеш. Гомеопатик медицина арсеналында 1500 препарат бар. Шуларҙан табип бер генә кешегә яраған дарыу яһай.

**Классик дауалау:** Был ысул менән дауаланғанда, теге йәки был микробтың антибиотиктарға ҡаршы торолсанлығын белеү өсөн, мотлаҡ рәүештә һейҙек анализы һәм бак анализ бирергә кәрәк. Был осраҡта циститты бөтөрөүсе төп компонент булып антибиотиктар тора. Уларҙың дозаһын, һәм ҡулланыу ваҡытын табип ҡына билдәләй ала. Шулай уҡ күп итеп һыу эсеү, йылы ҡуйыу, йылы ваннала ултырыу бик файҙалы булыр.

**Цистит һәм фитотерапия:** Был алым циститтың билдәләрен генә бөтөрөп ҡалмай, ә бөтә организмды һауыҡтырыуға булышлыҡ итә. Шундай ысул менән дауаланғанда, антибиотиктарҙан баш тартырға, диета тоторға, үлән сәйҙәре эсергә кәрәк.

**Циститка ҡаршы 1-се йыйылма:** 1 ҡалаҡ бесәй тырнағы япрағы һәм сәскәләре, 2 ҡалаҡ арса, 1 ҡалаҡ гөлйемеш емеше, 1 ҡалаҡ ҡырағай цикорий тамыры, 1 ҡалаҡ бөтнөк.

**2-се йыйылма:** 2 ҡалаҡ юл үләне, 1 ҡалаҡ фаяғөл тамыры, 2 ҡалаҡ етен орлоғо, 1 ҡалаҡ мәтрүшкә

Был йыйылмаға ингән үләндәрҙе ваҡларға, 500 мл һыу һалып, 5-10 минут һүрән утта ҡайнатырға. Һарҡытырға кәрәкмәй. 4 сәғәткә ҡатнашманы ултыртып ҡуйырға. Килеп сыҡҡан дарыуҙы ашар алдынан ярты сәғәт алда тәүлегенә 3-4 тапҡыр 50-100 мл эсергә. Был эсемлекте йөклар алдынан да эсергә мөмкин.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын…

### 6-се һабаҡ: "Ихтыяр көсө нимәгә тиң?"

"Үҙ кәйефе менән идара итә алған кеше генә яҙмышының хужаһы була ала" тигән бик тапҡыр әйтем бар. Беҙ барыбыҙ ҙа кәйеф ҡоло шул. Шул уҡ ваҡытта тик аҡыл менән генә лә йәшәп булмай, өлпөлдәп торған йөрәгебеҙ, ҡайнап торған хис-тойғоларыбыҙ бар. Көтмәгәндә әйтелгән ауыр һүҙҙән, күңелгә ятмаған насар мөнәсәбәттән, аңғармаҫтан һине үҙлегеңдән сығарған хәл-күренештәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан беребеҙ ҙә азат түгел. Шуға ла тормошто йәшәү өсөн көрәш, тип әйтәләр.

Тап шундай мәлдәрҙә, кәйефтәр ҡырылған, күңелдәр кителгән саҡтарҙа үҙ кәйефтәрен еңә алмаусылар рюмкаға үрелә лә инде. Араҡы ҡан тамырҙарын киңәйтә, башҡа йүгерә, кеше мейеһен туктауһыҙ игәп торған хафаларынан арындырып, үҙенсә ял иттерә. Шәпме? Шәп! Араҡыны, шарапты юҡҡа ғына уйлап сығармағандар бит. Үкенескә ҡаршы, ситтән ҡарап торғанда ғына шулай кеүек. Ләкин ошо урында "Әммә..." тигән ике күренеш, ике хәл бар. Шулар булмағанда, ҡайһылай яҡшы ла бит.

Беренсенән, күңел төшөнкөлөгөнән ошо юл менән сыҡтың да, ти. Әгәр ҙә был хәлең көн һайын ҡабатланһа? Һин башҡа осраҡтарҙа инде үҙеңдән-үҙең ошо анһат ысулды ҡулланасаҡһың бит. Был бер аҙна һүҙымында дауам итһә? Тағы ла алдағы 280 көн буйы һин ошо уҡ допингтың ҡолона әйләнһәң? Хатта бер көндә, бер генә тапҡыр эселгән йөҙ грамдан һуң да 40 көн буйына шул хәлеңдән сыға алмайһың бит. Бында арифметика ябай: 9 көн буйына, көн һайын йөҙәр грамм ғына эсһәң дә, һин тотош йыл буйы туҡтамай эскән кеше булып иҫәпләнәсәкһең. Ҡалған 356 көнөңдә "коп-коро" үткәрһәң дә.

Икенсенән, һин кәйеф ҡоло һәм күңелеңде күтәрер өсөн ошо юлға бараһың икән, йөҙ грамм менән генә сикләнмәйәсәкһең. Үҙлегеңдән сығарған хәлде тыныс ҡына ҡабул итә һәм үткәрә белмәй, рюмкаға ынтылыуың үҙе үк шул турала һөйләй. Бындай саҡта тик йөҙ грамм менән генә мөрхәтһенгән кешене күргәнем юҡ әле. Тәүге һәм артабанғы йөҙәр грамдарҙы ҡабул итеү технологияһы һәм психологияһы шулайыраҡ: тәүге рюмка - ул һорау, икенсеһе - яуабы, өсөнсөһө - раҫлаусыһы, артабанғылары - инҡар итеүселәре... Аңлайышлыраҡ булһын өсөн һәр хәлгә айырым туҡталып үтәм.

Тәүге рюмканы ҡабул иткәндә, әйткәнемсә, кеше үҙен шул тиклем һәйбәт тойғандай хис итә. Башына ҡан йүгергәс: "Әле генә миңә ҡыйын ине, нинә шулай ҡапыл рәхәт булды әле?" - тигән һорау уны тынғыһыҙлай башлай. Бәлки, ул шул йөҙ грамдан туҡталып та ҡалыр ине, әммә үҙенә рәхәтлек тойғоһо бүләк иткән сәбәпте аңларға теләй. Һәр хәлдә, кеше тәбиғәте шулай ҡоролған. Тәүге рюмкаға яуап булып икенсе йөҙ грамм эйәрә лә инде. Һорау ҡәнәғәтләндерелгәс, кеше үҙен тәүге йөҙ грамды эсергә мәжбүр иткән күңел хәлен иҫенә төшөрә лә, кемгәлер был хаҡта һөйләп, эс бушатҡыһы килә башлай. Өсөнсө - раҫлаусы рюмка эселгәс, кешенең теле сиселә. Был саҡта күптәр һөйләү урынына йырлай башлай. Был да аңлашыла, эскә йыйылған хәсрәтте йыр ҙа бушата бит. Артабанғы дүртенсе, бишенсе, алтынсы һәм башҡа н-сы рюмкалар - бар нәмәне, туғандарын, дуҫтарын, таныштарын, хатта донъяны инҡар итеүсе йөҙәр грамдар.

Әммә "иң ҡыҙығы" иртәнсәк уянғас башлана. Кеше кисәгегә ҡарағанда ун-егерме тапҡырға тәрәнерәк күңел төшөнкөлөгөнә юлыға. Артабан тағы ла - "һорау - яуап - раҫлау - инҡар итеү". Тик был юлы инде мәғәнәһеҙ һорауҙар ҡуйыла, ауырыраҡ яуаптар бирелә, михнәтлерәк раҫлауҙар була, ғазаплыраҡ инҡар итеүҙәр башлана.

Шатлыҡ тойғоһо кисергәндә лә кеше ошо уҡ юлға барыусан. Әммә тәүге рюмканан башлап ҡыуаныысың үҙенән-үҙе һағыш тәҫө ала башлай. Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән шатлыҡты Иблис ризыҡы менән арттырып булмай бит инде. Үҙенең изге бүләген шулай хәрәм менән буяғаның өсөн киләсәктә һиңә тағы ла шатлыҡ килтерерме икән Аллаһы Тәғәлә? Яҙмаларымдың "үтескә алынған шатлыҡ" ( 26 август) тигән бүлегендә мин был хаҡта әйтеп үткәйнем инде.

Әгәр ҙә ИХТЫЯР КӨСӨҢ булмаһа, һәр ынтылышың "тумыртҡа тәүбәһе" генә була инде. Тап ошо сифаттарға эйә булмағандар эсеүҙән ҡотолоу өсөн табиб ярҙамына таяна. Әммә тормош беҙҙән көслөрәк, башта һанап киткән хәлдәргә, кисерештәргә ҡалғанда, күптәр табибтан үҙенең тәнендә тектергән ампуланы алып ташлап булһа ла, тәүбәләрен, бирелгән анттарын онотоп, тағы ла эсә башлай. Был осраҡта оҙаҡ ваҡыт эсмәй йөрөүселәр бөтөнләй туктай алмай, эсмәй йөрөгән көндәрҙәге лимитын кире тулыландыра, артығы менән. Ҡайһы берҙәре хатта араҡыға янып үлә. Был хәл көн һайын эсеүгә ҡарағанда ла аяныслыраҡ. Шуның өсөн эсеүен ташлаған кеше был аҙымға "ғүмерлеккә" тип барырға тейештер, тип уйлайым.

Ихтыяр көсөнә килгәндә, атҡарып булмаҫлыҡ эш булмай, уны эшләй алмаған кешеләр генә була, тип яуап бирер инем мин. Сәбәп ҡылһа, ҡарап тороуға хатта иң ихтыярһыҙ булып күренгән кеше лә ҡорос ихтыярлыға әүерелә ала. Шешәбикә менән хушлашҡанға тиклем мин үҙемде, көслө ихтыярлы кеше инем, тип тә әйтә алмайым. Был сифаттарҙы мин үҙемдә айыҡ тормошта яһаған тәүге аҙымдарымдан уҡ тәрбиәләргә тотондом.

Ихтыяр көсө нимәгә тиң? Егеттәр менән үҙ-ара һөйләшкәндә мин быны уларға шаяртып түбәндәгесә аңлатам: "Күҙ алдына килтерегеҙ. Һеҙ аулаҡ ҡына йылы бүлмәлә шундайын сибәр, шундайын йәш, ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ ҡыҙ менән яңғыҙ ҡалғанһығыҙ. Тышта, яҡшы хужа хатта этен дә ҡыуып сығармаҫ, тигән шөҡәтһеҙ һауа торошо. Бүлмәгә яғымлы музыка ағыла, яртылаш ҡараңғы, өҫтәл аш-һыуҙан һығылып тора. Иң мөһиме, ҡыҙ һине ярата, таңға тиклем бүлмәлә ҡалыуыңды теләй, етмәһә, әле генә танышҡан һылыуға үҙең дә битараф түгелһең. Барыр ерең булмаһа ла, ошо донъяны ташлап, ырашҡылы, һыуыҡ ҡараңғылыҡҡа олаға алаһығыҙмы? Эсеү ташлау ана шундай ихтыяр көсөнә тиң...".

Егеттәр йығылып ятып көлә. Ҡайһылары: "Мин ул бүлмәлә тороп ҡалыр инем. Араҡы эсмәһәм дә, ҡыҙҙы ҡосағыма алыр инем..."- тип тә өбәрә. Икенселәре: " Ундай мине яраткан, үҙем яраткан кешем булһа, эсеүемде ташлар инем..."- тип ҡуя. Бында икенселәрҙең яуабы ҡулай булһа кәрәк, сөнки ҡоро ышаныска һәм инаныуға таянып ҡына эсеүеңдән ҡотолоп булмайҙыр. Һине аңлаған ныҡлы терәгең, яҡын дуҫың, яраткан кешең булыуы мотлаҡ. Ундай кешем хаҡында мин алда әйтеп үткәйнем инде. Әлбиттә, мин бында шартлы рәүештә, ихтыяр көсөнөң үлсәү берәмеген билдәләү өсөн "аулаҡ бүлмәләге ҡыҙ" миҫалын килтерәм. Ә, ысынында иһә, араҡының, иҫереклектең ымһындырғыс көсө тап ана шундай. Ихтыяр көсөн ныҡытыуға килгәндә, был хаҡта алдараҡ һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Һин тормоштан түгел, тормош һинән нимә көткәнен һора

Беҙ тормоштан нимә көтәбеҙ һуң? Был һәр кемебеҙ өсөн мөһим һорау булып тора. Бындай осраҡта беҙ етерлек аҙыҡҡа, аңғәмәләшеү, үҙеңде табыу һәм ҡыуаныс кисереү мөмкинлегенә эйә булыу, шулай уҡ яҡшы хеҙмәт хаҡы түләнгән эшле булыу кеүек үҙебеҙҙең төп талаптарыбыҙҙы һәм теләктәребеҙҙе һанай башлайбыҙ. Әммә күптәребеҙ быларҙың барыһына ла өлгәшеү өсөн башта үҙең нимәләр бирергә тейеш булыуыңды аңлап етмәй.

Президент Джон Ф.Кеннеди американлыларға мөрәжәғәт итеп, уларға: "Ил һеҙҙең өсөн нимә эшләй ала, тип түгел, ә һеҙ үҙ илегеҙ өсөн нимә эшләй алыуығыҙҙы һорағыҙ", тигән кәңәш биргән. Был донъялағы һәр кем өсөн яраҡлы булған бүләк итеү һәм ҡабул итеү ҡанунының бер әйтеме. Мәҫәлән, әгәр беҙ яҡшы эш эҙләһәк, ә буш урындар булмаһа, беҙгә был өлкәлә бушлай, ирекле башланғыста эшләп ҡарау мөмкинлеген эҙләргә кәрәк. Тормоштан беҙ теләгән эште талап иткәнсе, тәүҙә үҙебеҙгә ниндәйҙер өлөш индереү мөмкинлеге юҡмы икән, тигән һорау ҡуйырға кәрәк. Ирекле башланғыста эшләп ҡарау теләген күрһәтеп, беҙ тәжрибә һәм кәрәкле бәйләнештәр туплайбыҙ һәм, һөҙөмтәлә, беҙ урынлашырға ынтылған эш үҙе беҙҙе килеп табыуына шаһит булабыҙ.

Күптәребеҙ һөйөлөргә һәм дуҫтарса мөнәсәбәт булдырырға теләй, әммә тормош ҡануны бының өсөн башта үҙебеҙ бүтәндәргә һөйөү һәм дуҫлыҡ бүләк итергә тейешлеген әйтә. Хәҡиҡәт асылы - башта кешеләр тураһында кире фекерҙә һәм мөнәсәбәттә булыуҙан баш тартып, уны мөхәббәткә алмаштырыуҙан ғибәрәт. Бүләк итеү һәм ҡабул итеү ҡануны шулай уҡ бүләкте ҡабул итә белеүебеҙҙе талап итә. Кешеләр өсөн бүлгән ваҡытың, ынғай мөнәсәбәттәрең һәм һөйөү менән башҡарылған фекерең һәм ғәмәлең ни тиклем мөһим булған кеүек, бүтәндәрҙән бүләк ҡабул итә белеү ҙә мөһим булып тора.

Был тормошта беҙ уңышҡа өлгәшергә теләһәк, бүләк итеү һәм ҡабул итеү ҡануны төп әйберҙәрҙең береһе булып тора. Әгәр беҙ нәмәләләр етешһеҙлек кисерһәк, тәүге уйыбыҙ "Мин нимә бирә алам? Мин нимә бирергә тейешмен?" тигән булырға тейеш. Беҙ ни тиклем күберәк бирһәк, шул тиклем күберәк алабыҙ.

## Үҙеңде күрә алмаған кешеләрҙе ярат

Луканан тапшырылған Инжилдың "Иаков короле Тәураты" тәржемәһендә былай тип әйтелгән: "Һеҙгә, тыңлаусыларға, әйтәм: дошмандарығыҙҙы яратығыҙ; һеҙҙе күрә алмаусыларға шәфҡәтлек күрһәтегеҙ; һеҙҙе ҡарғаусыларға фатиха бирегеҙ һәм һеҙҙе йәберһетеүселәр өсөн доға ҡылығыҙ. Битеңә һуғыусыға икенсе яғын ҡуй; өҫ кейемеңде тартып алыусыға ҡаршы торма. Һәр һорауысыға хәйер бир һәм һинекен алғанда ҡайтарып биреүҙе һорама. Һәм кешеләр һинең менән ниндәй мөнәсәбәттә булыуын теләһәң, үҙең дә шундай мөғәмәләлә бул.

Әгәр ҙә һине яратҡандарҙы яратһаң, бының өсөн һиңә рәхмәт була, гонаһлылар ҙа үҙҙәрен яратыусыларҙы яратыр! Әгәр ҙә һиңә изгелек ҡылыусыларға изгелек күрһәтһәң, бының өсөн дә рәхмәт була, шулай уҡ гонаһлылар ҙа рәхмәт ала. Әгәр ҙә кире ҡайтарыу ниәте менән бурысҡа аҡса бирһәң, бының өсөн һиңә ниндәй рәхмәт була, гонаһлылар ҙа гонаһлыларға шул тиклемде үк кире ҡайтарып алыу өсөн бурысҡа аҡса бирә. Әммә һин дошманыңды ярат һәм шәфҡәтлек күрһәт, һәм бер нәмә лә көтмәйенсә, бурысҡа бир; һәм һиңә Аллаһы Тәғәләнән оло бүләк булыр. Аллаһы Тәғәлә кеүек рәхимле бул. Хөкөм итмә һәм хөкөм ителмәҫһең; ғәйепләмә һәм ғәйепләнмәҫһең; ғәфү ит, ғәфү ителерһең".

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# АТАЙЫМ ИҪТӘЛЕГЕ - ҠУРАЙ МОҢО

**Үҙемде белгәндән алып ҡурай моңон тыңлап үҫтем. Ә ҡурай моңоноң йөрәгемә үтеп инеүе, әсир итеүе ете йәшемдә булды.**

Минең атайым Шәйхисламов Ғәлиәстан Баймаҡ районы Иҫәнбәт ауылынан ине. Атайым бәләкәй сағынан ҡурайҙа уйнаған. Ҡурайҙа уйнарға ул ағаһы Динислам ағайымдан өйрәнгәндер, тип уйлайым, сөнки ул да танылған ҡурайсыларҙың береһе ине.

1937 йылда Мәскәүгә уҡырға киткән Заһир Исмәғилов урынына атайымды Башҡорт дәүләт академия драма театрына ҡурайсы итеп эшкә саҡыралар. Мин атайымдың Өфөгә китеүен бик ауыр кисерҙем. Шулай бер көндө әсәйемдең бер туған ағаһы Зиннәтулла бабайым мине Түбә руднигына алып барҙы. Уларҙа стенала түңәрәк радио эленеп тора ине. Мин тыштағы йөрәгендә Разия инәйем йүгереп сығып, "Сәлимә, тиҙ генә ин, атайың ҡурай тарта," - тине. Шунда мин беренсе мәртәбә атайымдың Өфөнән ҡурай тартыуын илай-илай тыңланым. Атайым күп ерҙәрҙә гастролдәрҙә йөрөнө. Мәрхүм Зәйни Иғдәүләтов ағайҙан 100-ҙән артыҡ көйҙең тарихын яҙҙырған булған. Театрҙа ул дүрт кенә йыл эшләп ҡала. 1941 йылда һуғыш башланғас, беренселәрҙән фронтҡа китә. Белоруссияның Гомель өлкәһендә һәләк була.

Ҡурай моңо тәндең һәр күҙәнәгенә үтеп инә, уны тыңлаған саҡта Башҡортостан тарихы, тәбиғәте барыһы ла күҙ алдынан үтә. Шуға күрә мин Башҡортостандың иң беренсе мөғжизәһе - ул ҡурай, тим.

**Сәлимә ШӘМСИТДИНОВА.**
**Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылы.**

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсы буйынса мин дә, беҙҙең Башҡортостан үҙе бер мөғжизәләр иле бит ул, улар етәү менән генә лә сикләнмәй, әммә конкурсҡа иң-иңдәре тип тәҡдим ителгән бөтә объекттарҙы ла хуп күрәм, тип, үҙемдең һүҙемде еткерергә теләйем.**

# БАШҠОРТ ҠУЛЫ ТЫУҘЫРҒАН...

Мәзинә Йәғәфәрованың "Аҡ кейеҙ" тигән тәҡдименә мин дә ҡушылам. Төрлө мөғжизәләр тыуҙырған, һәр нәмәне йәнләндереүсе, йәмләндереүсе башҡорт ҡулына, талантына, һөнәренә рәхмәт. Башҡорт ҡурайы, башҡорт балы, башҡорт аштары кеүек үк, аҡ кейеҙҙән яһалған аҡ тирмәһе лә мөғжизә бит уның. Был ата-бабаларҙан ҡалған ҡиммәтле ҡомартҡы. Хәҙер төрлө байрамдарҙы уҙғарғанда тирмәһеҙ йөрөмәйбеҙ. Тирмә эсен ҡурай, бал, ҡымыҙ, сәк-сәк, күпереп бешкән икмәкһеҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Был әйберҙәр - башҡорт йәшәйешенең мөғжизәһе. Әлбиттә, тирмәләр башҡа халыҡтарҙа ла бар. Әммә беҙҙеке үҙебеҙсә, башҡортса. Ҡото икенсе уның. Аҡ тирмәне, әйтәйек, Шүлгән мәмерйәһе янында, йәки Торатау итәгендә, Салауат монументы янында күреү үҙе бер мөғжизә һәм шатлыҡ тойғолары уята. Туристар ҙа, ҡунаҡтар ҙа гәжәпләнеп тә, һоҡланып та ҡарай, өйрәнергә тотона былдай саҡта кейеҙ тирмәләребеҙҙе.

Кейеҙ бит ул - минең йылы өйөм,
Дауаланыр дарыу донъям да.
Аяғымда сарыҡ, йылы быйма,
Кейәм уны әле һаман да...

- тип йырлап та ебәрәбеҙ әле беҙ. Һәм, әлбиттә, башҡорт кейеҙен, башҡорт тирмәһен дә мөғжизәгә тиңләйбеҙ.

**Нәтижә ВӘХИТОВА.**
**Хәйбулла районы Юлбарыҫ ауылы.**

# НУРИМАНЫМ - ХОЗУРЛЫҒЫ

**Халыҡта бик дөрөҫ әйтем бар: "Һәр баҡа үҙ һаҙын маҡтар". Сағыштырыу бик урынлы булмаһа ла, хаҡлыҡты инҡар итеп булмай.**

Бына мин дә үҙебеҙҙең Нуриман районы тәбиғәтен мөғжизәгә тиңләп, уның хаҡында бер нисә һүҙ яҙып ебәрергә булдым әле. Беҙҙең тәбиғәттең хозурлығы был төбәктә йәшәүсе һәр кешенең, килгән ҡунаҡтарҙың күңелендә яҡынлыҡ һәм йылылыҡ тойғолары уята. Сит тарафтарҙан килеүселәрҙең күбеһе был хозур ерҙә ғүмерлеккә төпләнеп ҡала. Сөнки беҙҙең районда йәшәр өсөн бөтөн мөмкинлектәр бар.

Беҙҙең районда ағастарҙың ниндәйе генә үҫмәй: имән, уҫаҡ, ҡайын, ерек, ҡарама, зифа буйлы аҡ, ҡара шыршылар, ҡарағай, ҡарағас, балға бай йүкә, саған, тал, муйыл, миләш, балан һәм башҡа емеш ағастары - барыһы ла бар. Беҙҙең район күлдәр һәм йылғалар донъяһы. Яңыкүл һәм Нуриман ауылдары тирәһендә генә лә 40-тан ашыу күл бар. Шуларҙың бер нисәүһен әйтеп үтәйем: Сәлимәкәй, Олокүл, Билгеләр, Нимисләр, Упҡанлы һ.б. Упҡанлы күлендә республикабыҙҙың башҡа бер районында ла булмаған һыу сәтләүегә үҫә. Был үҙе тәбиғәттең иҫ киткес мөғжизәһе.

Районыбыҙҙы инләп Ҡариҙел йылғаһы аға. Мул һыулы Йүрүҙән, Һалдыбаш, Йәналды, Саруа, Ҡаҙнаташ, Ҡыҙыл таш, Саула, Рәтүш һәм башҡа йылғалар Ҡариҙел йылғаһына ҡушылып, уны мул һыулы дарьяға әйләндерә. Был йылғаларҙа балыҡтарҙың да ниндәйҙәре генә юҡ: сөгә, бәрҙе, бағыр, алабуға, суртан.

Районыбыҙҙа 500 йылдан ашыу үҫкән, йыуанлығы 4,5 метрға еткән йүкә ағасы ла бар. Ул Упҡынлы күленән алыҫ түгел. Был тәбиғәттең тағы ла бер сағыу мөғжизәһе. Йүкәгә ҡағылышлы шундай шиғырым да бар минең:

Кемдәр хайран ҡалмай күреп һиндә,
Ярты мең йыл үҫкән йүкәне.
Йәшендәрҙе тотоп, шаһит булып
Ерем тарихын иждад иткәнде...

**Фәнүр ӘХТӘРЙӘНОВ.**
**Нуриман районы.**

ТӘГӘРМӘС



# МАШИНА АЛЫРҒА ЙЫЙЫНҺАҢ...

**Льготалы автокредит буйынса дәүләт программаһы сиктәрендә һатып алырға мөмкин булған автомобилдәрҙең рөхсәт ителгән хаҡы 600 меңгә тиклем күтәрелгән. Ошоға ярашлы, машиналар исемлеге лә киңәйтелеп, 29 марка һәм моделдән 50-гә тиклем төрләндерелгән.**

Элек автокредит алғанда автомобилдәр хаҡы 350 мењдән артырға тейеш түгел һәм былдай машиналар 29 позицияны ғына үҙ эсенә ала ине. Июль башында индерелгән үҙгәрештәр әле яңы ғына тормошҡа ашырыла башланы. Ил етәкселеге льготалы схема буйынса машиналар һатыуҙы дәртләндереү өсөн ошо аҙымға барҙы. Июль айындағы күрһәткестәргә ҡарағанда, быйыл апрель айында программа буйынса бирелә башлаған льготалы кредиттарҙың дөйөм күләме 21 700-ҙән ашыу тәшкил итә, шул уҡ ваҡытта банкҡа 40 меңгә яҡын ғариза тапшырылған булған. Рәсәй хөкүмәтендә ошо программа сиктәрендә 2009 йылдың аҙағына тиклем 120 мең льготалы автомобиль һатырға иҫәп тотолған.

Машиналарҙың рөхсәт ителгән хаҡын арттырыу һәм уларҙың төрҙәре исемлеген киңәйтеү берҙән-бер яңылыҡ түгел. Беренсе тапҡыр индерелә торған минималь түләү автомобиль хаҡынан 30 проценттан алып 15 процентҡа тиклем төшкән. Кредиттарҙы түләү срогы буйынса сикләүҙәр ҙә алынған. Шулай уҡ еңел автомобилдәрҙән тыш, коммерция транспорттарын да һатып алырға мөмкин буласаҡ.

РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы тарафынан раҫланған машиналар исемлегеҙ: Chevrolet NIVA, Chevrolet Cruze, Fiat Albea, Fiat Doblo, Fiat Ducato, Ford Focus, Kia Spectra, LADA-1117, LADA-1118, LADA-1119, LADA-2104, LADA-2105, LADA-2107, LADA-2111 LADA-2112, LADA-2113, LADA-2114, LADA- 2115, LADA- 2121, LADA- 2131, LADA-2170, LADA-2171, LADA- 2172, LADA- 2329, Renault Logan, Skoda Fabia, Skoda Octavia, UAZ Hunter, UAZ Patriot, UAZ Pickup, ГАЗ-2217, ГАЗ-2310, ГАЗ-2705, ГАЗ-2752, ГАЗ-3221, ГАЗ-3302, УАЗ-2206, УАЗ-2360, УАЗ-3303, УАЗ-3741, УАЗ-3909, УАЗ-3962, Volga Siber, ИЖ-2717, Hyundai Sonata, Hyundai Accent, ТагАЗ С100, ТагАЗ Road Partner, ТагАЗ Tager, ТагАЗ LC100.

Бынан тыш, хәҙер автокредиттарҙы 70 миллиард һумдан кәм булмаған устав капиталы һәм бөтә федераль округтарҙа ла вәкәләте булған банктар бирә ала. Әлеге ваҡытта льготалы автокредиттар менән өс банк: Сбербанк, ВТБ һәм Россельхозбанк ҡына эшләй ине.

Эксперттарҙың күпселеге үҙгәртелгән программаның ыңғай һөҙөмтә бирерәнә ышана. Башҡортостан Республикаһы Милли банкыһы рәйесе Рөстәм Мәрҙәнов төбәктәге банк берләшмәһендә һатыу күләме артыуына иҫәп тотоуын белдерә.

Ватан автосәнәғәтенә дәүләт ярҙамы программаһының асылы - банктарҙы РФ Үҙәк банкының рефинанслау ставкаһының икенән өс өлөшө күләмендә субсидиялау, был бөгөн 11 процент тәшкил итә. Шулай итеп, дәүләт үҙенең бюджет аҡсаһынан банктарҙың юғала барған килемдәрен ҡаплай һәм граждандар түбәнәйтелгән ставка буйынса автомобиль һатып алыу мөмкинлегенә эйә була. Шул уҡ ваҡытта льгота ватан автосәнәғәте тауарҙарына һәм Рәсәйҙә йыйылған иномаркаларға ғына ҡағыла.

**Әлфиә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**
**БАШвестЪ.**

# *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Ҡәҙерле кешебеҙ **Фирҙәүес Фәсхетдин ҡыҙы ТАҢҒАТАРОВАны** матур юбилейы менән ысын күңелдән ҡайнар ҡотлайбыҙ. Сәләмәтлек, ҡурай моңондай оҙон ғүмер, тыныс күк йөҙө, йән тыныслығы теләйбеҙ. Тормош иптәше Таңғатаров Шәфҡәт Фаат улы менән татыу, матур, мөхәббәтле ғаиләлә балаларыңдың бәхетенә һөйөнөп, һөйөп, һөйөлөп йәшә!



Шатлыҡ-ҡыуаныстар ташламаһын,
Ҡайғы-борсоу ҡапҡа ҡаҡмаһын,
Хоҙай һине бары беҙҙең өсөн
Күҙ ҡараһы һымаҡ һаҡлаһын.

**Ҡотлау менән тормош иптәшең Шәфҡәт, ҡыҙҙарың Гөлназ менән Айгөл, улың Илнур һәм Магнитогорск ҡалаһынан апайың Гөлшат.**

# *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында йәшәүсе беҙҙең өсөн ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле, алтындарға тиң булған әсәйебеҙ, ҡәрсәйебеҙ, бейемем **Зилиә Дәүләтша ҡыҙы ИСҠУЖИНАны** - 50 йәшлек һәм һөйөклө тормош иптәшем, атайыбыҙ, ағайыбыҙ һәм ҡустыбыҙ **Артур Юлай улы ИСҠУЖИНды** 25 йәшлек юбилейҙары менән ысын йөрәктән ҡотлайбыҙ.

Яҡын кешеләребеҙгә оҙон ғүмер, ныҡлы һаулыҡ, ғаилә именлеге, шатлыҡ-ҡыуаныстар теләйбеҙ. Һәр атҡан таңға ҡыуанып, тормош матурлығынан йәм табып йәшәргә яҙһын.

Ҡотло булһын юбилейығыҙ,
Ҡыуаныстар килһен ишелеп.
Ҡайғы-хәсрәт урап үтһен,
Һеҙ йәшәгән өйҙөң ишеген.
Һеҙҙең яҡты йөҙөгөҙҙән
Бәхет нуры һис тә китмәһен,
Шат йылмайып ҡаршы алығыҙ һеҙ
Ғүмерҙәрҙең һәр бер иртәһен.

**Иң изге теләктәр менән ҡыҙҙарың, апайың, һылыуың Юлиә һәм Сулпан, киленең, ҡатының Илүзә, ейәнсәрең, ҡыҙың Зөлхизә.**

КИТАБЕННАС

# БАЛАЛАР КҮҢЕЛЕ ӨСӨН КӨРӘШ,

## йәки Артур Иҙелбаевтың "Командир балалары" повесы хаҡында бер-нисә һүҙ

Беҙ хәҙер бөтә донъя бәләләрен балаларға япһарырға күнеккәнбеҙ. Имеш тә, улар көнө-төнө компьютер менән булыша, китап уҡымай, тарихыбыҙҙы ихтирам итмәй... Әммә улар бит - беҙҙең балалар һәм уларҙы беҙ тәрбиәләргә тейеш.

Ни эшләргә һуң? Нисек уларҙа илһөйәрлек тәрбиәләргә, данлы тарихыбыҙға ҡыҙыҡһыныу уятырға? Ҙур йылға кескәй ағыштарҙан башлана. Һәм бына ысулдарҙың береһе - Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә яңы донъя күргән "Командир балалары" китабын алып, балаларығыҙға уҡығыҙ. Артур Иҙелбаев яҙған был повесть мине бала саҡ иленә алып ҡайтты. Бала саҡта бит беҙ Әнүәр Бикчәнтәевтың "Нисә йәш һиңә, комиссар?" повесын уҡып үҫтек, "Илсе ҡыҙы" Шәүрә менән Һиндостанда сәйәхәт ҡылдыҡ... Артур Иҙелбаевтың был повесы ла - ошо әҙәбиәт традицияһына тоғролоҡ һәм ошо әҙәбиәттә һағыныу сағылышылыр.

Китаптың бағышлауына күҙ һалайыҡ. "Ирхан улым менән Ынйыҡай ҡыҙыма бағышлайым. Татыу булығыҙ, Ватаныбыҙҙы һөйөгөҙ!" тип яҙылған. Ысынлап та, балаларың үҫә башлағас, һин ғаиләңдә ниндәй балалар үҫәсәк, тип кенә түгел, ә Ватаның, тарихың өсөн кемдәрҙе үҫтерәсәгең тураһында ла уйланырға бурыслыһың. Яҙыусы Артур Иҙелбаев ошо уйҙарын, ниәттәрен әҫәренә һалған. Повесть геройҙары ла бит - Вил исемле ун бер йәшлек малай һәм биш йәшлек Лилиә. Шуға ла балалар мөнәсәбәте тормошсан, яҙыусының үҙ күҙәтеүҙәренән алынған. Ә ихлас әҫәр күңелде арбай. Оноларҙы ғына бит модалы әҙәбиәт тип тә, башҡаһы менән дә әүерәтеп, ялған юлдан алып китеп була. Ә балалар тик ихласлыҡҡа, улар менән тиңдәрсә мөнәсәбәткә генә ылыға.

Тарихсы булараҡ, әлбиттә, Артур Иҙелбаевтың төп бурысы - балаларҙы Бөйөк Ватан һуғышы тарихы менән ҡыҙыҡһындырыу. Балаларҙы ғына түгел! Повесты уҡып сыҡҡас, мин үҙемдең Ватан һуғышы хаҡында белемемде байҡап, башымды сайҡап, интернет селтәре аша фронттар бүленеше, һуғыш яуҙарын өйрәнергә керештем.

Гәҙәттә, етди тарихсыларҙан һәйбәт яҙыусылар килеп сыҡмай. Сөнки тарихсылар һәр фактты ентекләп, ситкә сайпылтмай бирергә теләй. Әҙәби әҫәрҙең ҡанундары башҡаса. Бында ҡыҙыҡлы сюжет менән уҡыусыны ылыҡтырыу, драматургия ҡанундарына буйһоноу хөкөм һөрә. Ошо йәһәттән дә был әҫәр шул тиклем отошло. Сөнки иң кәрәкле урында, сюжет боролошон аңлатыр өсөн Артур Иҙелбаев ҡыҫҡа һәм ябай ғына итеп һуғыш хаҡында ла бәйән итә. Һәм был тарихи факт йотлоғоп уҡыла...

"...Көҙгә тигәнс ҡасанға тиклем һүҙылырын белһә, Гәйшә апай шулай уйлар инеме икән? Октябрҙә Гитлер ғәскәрҙәре Брянск участкаһында яңы, ҙур һөжүм башланы. Фронт ҡапыл йөҙҙәрсә саҡрымға көнсығышҡа күсте... Ғөмүмән, 1943 йылдың йәйенең икенсе яртыһын һәм көҙөн Брянск партизандары өсөн иң ҡыйын ваҡыт тип атап була. Уларҙың күбеһе немец




карателдәре тарафынан ойошторолған блокадаға эләгеп һәләк булалар..." Ошондай фактар әҫәрҙең ағымынан айырылғыһыҙ, улар күңелгә ныҡ уйыла, сөнки улар аша беҙ Вил менән Лилиәнен артабанғы тормошон күҙалларға тейешбеҙ... Бик отошло алым, әлбиттә.

Ошо китаптан һуң йөмәғәт эштәрендә лә, ижадта ла, хөкүмәт эшендә лә мәж ҡайнаған Артур Иҙелбаевты мин, мәҫәлән, тик балалар өсөн китаптар ижад итеүгә ултыртып ҡуйыр инем. Сөнки беҙҙең балалар ошондай мәғлүмәтле китаптар уҡып үҫергә тейеш. Сөнки Артур Иҙелбаевта яҙыусы ла, тарихсы ла, драматург та, өс бала атаһы тәжрибәһе лә йәшәй. Ә иң мөһиме - унда илһөйәр көрәшсе рухы йәшәй. Һәм ул бөтә йәне менән беҙҙең балаларҙың күңеле өсөн көрәшкә тотонған. Ихлас рәхмәт кенә әйтергә ҡала уға.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘЛӘКӘЙ БӘЛӘЛӘРГӘ...

## ҡапҡа асма

Кеше донъяға килгәндә устарын йомоп килә - бар донъя минеке, йәнәһе. Донъянан киткәндә кешенең устары асыҡ була - ҡарағыҙ, үҙем менән бер ни ҙә алмайым, йәнәһе.

**(Талмуд).**

Берәүҙәр - вазифаға, икенселәр - батырҙарға, өсөнселәр - көскә, дүртенселәр Аллаға табына һәм ошо табыныуҙары арҡаһында үҙ-ара бәхәсләшә, ләкин... барыһы ла аҡсаға табына икәнен генә береһе лә танымай.

**(Марк Твен).**

Аҡса барыһын да эшләй, тигәндәр ысынында аҡса өсөн барыһын да эшләй.

**(Д. Галифакс).**

Бәләкәй генә бәләләргә ҡапҡа асыуҙан һаҡлан - улар артынан тағы ҙурҡыныслыраҡ бәләләр инәсәк.

**(Б. Грасиан).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер крәҫтиән көн һайын бер алмағас янынан үтә икән. Ундағы бер алманы булһа ла өҙөп ашарға теләй, ти, ләкин һорамайынса кешенекен алырға ярамай икәнен дә нык үҙләштергән булғас, ҡыйыулығы етмәй, ти. Ләкин хәйләкәр кеше һәр саҡ юлын таба. Был крәҫтиән дә, сираттағы тапҡыр алмағас алдында туктап, шулай ти икән:**

**- Алмағас, алмағас, миңә бер-ике емешеңде генә өҙөп ашарға рөхсәт ит әле!**

**Шунан:**

**- Биш-алтыны ал! - тип үҙ-үҙенә яуап та ҡайтара, ти.**

**Татлы ризыҡты ауыҙ итеү был кешегә шул тиклем оҡшап китә, хатта ул көн һайын алмағастан һыйланырға керешә. Тиҙҙән баҡса хужаһы алмаларҙы кемдер урлап ашағанын шәйләп ҡала. Бер ваҡыт ҡарауыллап ултырып, ул бурҙы тота:**

**- Кеше алмаһын урларға нисек баҙнат иттең? - тип һорай ул, ярһып.**

**- Асыуланма, асыуланма инде миңә, - тип һүҙ башлай крәҫтиән. - Мин урламаным, мин гел һорап алдым!**

**- Шулаймы ни? Ә кемдән һораның?**

**- Алмағастан! - тип яуап бирә крәҫтиән. Һәм шундуҡ алмағастан нисек рөхсәт һорағанын һорап күрһәткән. Баҡса хужаһы, күп тә уйлап тормаған, быны ҡоҙоҡҡа елтерәтеп алып барған һәм:**

**- Ҡоҙоҡ, ҡоҙоҡ, ошо ахмаҡты һиндә бер-ике тапҡыр сумдырырға рөхсәт ит әле! - тип ҡысҡырған. Үҙ-үҙенә шундуҡ яуап та бирә икән:**

**- Биш-алты мәртәбә сумдыр һин уны!**

**Шулай итеп, баҡса хужаһы крәҫтиәнде ҡоҙоҡҡа бер нисә тапҡыр сумдырып сығарып, урлау теләге мәңгегә онотолорлоҡ итеп һабаҡ биргән".**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН



### Помидорҙан соус

Помидорҙарҙы ҡайнар һыуҙа бешекләп алғас, тишекле сүмес аша үткәреп, тышын ташларға. Үткәрелгән иҙмәгә тәменә ҡарап тоҙ, лавр япрағы, борсаҡлы ҡара борос өҫтәп, биш минут ҡайнатып алып, стерилле банкаларға тултырып ябырға.

Соус эшләү өсөн 2 кило помидор, 15 бөртөк борсаҡлы ҡара борос, 5-7 лавр япрағы, тәменә ҡарап тоҙ һалырға кәрәк.

### Аш тәмләткес

5 кило помидор менән ярты кило кишерҙе ит турағыс аша үткәреп, 20 минут ҡайнатҡас, эсе алынмаған бер әсе боросто, ярты кило алманы ит турағыс аша үткәреп ҡушырға һәм 15 минут ҡайнатырға. Унан һуң туралған 10 дана татлы борос, ярты литр көнбағыш майы, тәменә ҡарап тоҙ һалып, тағы ла 10 минут ҡайнатҡас, үткәрелгән 250 грамм һарымһаҡ менән 5-6 бөртөклө ҡара боросто ҡушып, 2-3 минут ҡайнатып, әҙер массаны стерилле банкаларға һалып, тимер ҡапҡастар менән ябып ҡуйырға.

### Лечо

4 кило помидор менән 1 кило кишерҙе ит турағыс аша үткәреп, ярты сәғәт ҡайнатҡас, тәменә ҡарап тоҙ, ярты стакан шәкәр ҡомо, бер стакан көнбағыш майы, оҙонсалап туралған 100 дана татлы борос ҡушып, тағы ла 20 минут ҡайнатабыҙ. Бер баш иҙелгән һарымһаҡ өҫтәп, ике минут ҡайнатып алғандан һуң әҙер массаны стерилле банкаларға һалып, тимер ҡапҡастар менән ябып ҡуйырға.

### Тәмле ҡайнатма

Ит турағыс аша үткәрелгән 1 кило һырғанаҡтан, бер лимон һәм ике әфлисундан (ҡабыҡтары менән) торған ҡатнашмаға 1 кило шәкәр ҡомо өҫтәп, болғатып 2-3 минут ҡайнатып алырға.

### Төрлө печеньелар һәм бәлештәр өсөн татлы ҡамыр

250 грамм аҡ май йәки маргаринды бер стакан шәкәр ҡомо менән бутап, 2 йомортҡа, 1 ҡалаҡ ҡаймаҡ, ҡайнар һыуҙа һүндерелгән 1/4 балғалаҡ аш содаһы һәм 3 стакан он һалып, ҡамыр баҫырға. Эслегенә алма, джем, йә төрлө ҡайнатмалар һалып, бәлеш, шулай уҡ печенье бешерергә мөмкин.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририят:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5569
Заказ 3462